ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

19-25 июнь (һөтай) 2021

№25 (963)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Һабантуйҙар...** халыҡсан асылда булһын! 2



**Әсирлеккә төшкәндәр хыянатсымы,** йәки Хәбәрһеҙ юғалғандарҙы ла онотмайыҡ 3,6



**Мең саҡрымлыҡ сәйәхәттәр...** бер аҙымдан башлана 8-9



**Никах ҡороусыларға нәсихәт** 12-13



**ТВ-программа** 14

*Иғтибар! Быйылғы йылдың икенсе яртыһы өсөн ПР905 индекслы аҙналыҡ "Киске Өфө" гәзитенә 25 июнгә тиклем 705 һум 12 тингә яҙылырға мөмкин. Был миҙгелдә лә гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер матур ғына китаптарға эйә буласаҡ. Почтальондар ҙа бүләкһеҙ ҡалмаясаҡ. Гәзит уҡыусыларыбыҙ "Киске Өфө" - бүләгем" акцияһына ҡушылып, баҫмабыҙҙы атай-әсәйҙәренә, мәктәптәргә, дуҫтарына яҙҙырып бүләк итә ала.*

*Мөхәрририәт.*

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

**?**

**Беҙҙең милли көрәш киләсәктә Башҡортостан брендына әйләнә, башҡортҡа ғына хас спорт төрө булып үҫешә алаҫаҡмы? Ошо һорауҙы баш ҡаланың "Ватан" паркында үткән көрәш буйынса асыҡ турнирға йыйылған көрәш белгестәренә бирҙек.**



***Зәһит СОЛТАҠАЕВ, көрәш буйынса Бөтә Рәсәй категорияһына эйә судья, юғары категориялы тренер-уҡытыусы:*** Беҙҙең милли көрәштә Европа чемпиондары ла, Рәсәй еңеүселәре лә, Халыҡ-ара кластағы спорт мастеры булғандар ҙа бар. Йәғни, был спорт төрөндә спортсыларыбыҙ яҡшы уҡ үҫешкән, тип әйтмәксемен. Милли көрәш әле документаль раҫланмаһа ла, ул инде күптән беҙҙең Башҡортостандың бренды. 2013 йылдан алып шул уҡ самбо, грек-рим көрәше һәм башҡалар кеүек үк, РФ Спорт министрлығында спорт төрө булараҡ реестрға ингән. Оҙаҡламай Олимпия уйындарына ла керер, тип уйлайым.

Көрәш - башҡорт халҡының борондан килгән милли спорт төрө. Бик ғәйрәт, таҫыл ир-егеттәр генә көрәшсе була ала. Шул уҡ ваҡытта ул хәүефле спорт та. Киләмгә сыҡҡан көрәшселәр бер-береһен ихтирам итергә, көрәш ҡағиҙәләрен теүәл үтәргә тейеш. Уның ниндәй ҡағиҙәһе бар, тиерһегеҙ. Кем көслө - шул еңә. Башҡорт көрәше хәйләгә түгел, ә көскә, таҫылға нигеҙләнә. Билдәле мәғрифәтсе Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев көрәш хаҡында бына нимә тигән: "Башҡорт көрәшенең ике ысулы бар: көрәштәште күтәреү һәм күкрәккә һалып, аҙыраҡ эйелгән килеш аяҡ аҫтына йәки ситкә ташлау. Былар бик тиҙ эшләнә, ә башҡа ысулдар иҫәпкә алынмай һәм приз алырға хоҡуҡ бирмәй", - тип яҙған ул. Һәм бөгөн дә беҙ мөмкин тиклем көрәштең боронғолоғон, халыҡсан талаптарын һаҡларға тырышабыҙ.

***Нурулла ХИСМӘТУЛЛИН, СССР-ҙың спорт мастеры, Башҡортостандың көрәш буйынса тәүге спорт мастеры:*** Мин бөгөн һикһәнгә еткән көрәшсе. Был шөғөлгә һуңыраҡ килдем, мәктәпте тамамлап, Салауат ҡалаһында кәсепселек училищеһында уҡығанда көрәшә башланым. Үзбәкстандың спартакиада чемпионы, СССР-ҙың хәрби көстәре призеры, Үҙәк советтың биш йыл рәттән призеры булдым. Башта ирекле көрәш менән шөғөлләнһәм, аҙаҡ милли көрәшкә күстем. Физкультура техникумында, Стәрлетамаҡ институтында көрәш буйынса студенттарҙы тәрбиәләнем. Бында минең уҡыусыларым күп. Шул егеттәрем менән бик тә ғорурланам, уларҙың уңыштарын күҙәтеп барам.

Советтар Союзы ваҡытында көрәш спорты илде шаулата ине. Унан ул һүлпәнәйҙе һәм спортсыларға ла иғтибар булмай башланы. Мәшһүр көрәшсе, СССР-ҙың атҡаҙанған тренеры, профессор Харис Йосопов та Башҡортостандан билдәле сәбәптәр арҡаһында китте һәм уға был яҡҡа юл бикле булды. Ә ниндәй данлыҡлы батыры ине ул башҡорттоң! Ниндәй еңеүҙәр яуланы! Союздың йыйылма командаһын тәрбиәләне, Союз, Рәсәй, Олимпиада чемпиондарын үҫтерҙе.

Элек һәр уҡыу йортоноң, һәр заводтың, һәр коллективтың спортсылары булды һәм көрәш иң үҙәктә ине. Башҡортостан чемпионаты дүртәр көн барҙы, илдәге турнирҙар берәр аҙналап үтте. Хәҙер бөтөн был саралар бер, хатта ярты көндә тамамлана. Боронғо һабантуйҙарҙы хәтерләһәң, һөйләп бөтөрлөк түгел. Егермешәр саҡрымды йәйәү килеп көрәшә ине батырҙар. Ауырлыҡ үлсәме юҡ, күҙ самаһы менән билдәләнәләр, таҫтамалда шыбаға тотошалар ҙа, ялан аяҡланып, билгәсә яланғасланып, сиҙәмде ҡара тупраҡ иткәнсе көрәшәләр. Йөҙәр килолы көрәшселәр бер-береһен таҫтамал менән ерҙән һөйрәп алып баш аша ырғыталар. Шундай бәһлеүәндәр булды, хатта көсәнеп, тешләнеп, тештәре сатнап ҡойолоп китә ине. Үәт, шундай ине ул милли көрәш! Дөрөҫ алып барғанда, ул иң ауыр спорт төрө. Һәм бөгөн ошо милли байлыҡты юғалтмай, боҙмай, теләһә нимәгә ҡушылдырмай ғына һаҡлап, нығытып ҡуйырға ине. Республикабыҙ етәкселегенән, йәш спортсыларҙан шуны көтәм.

## ШАҒИР ҺҮҘЕ

# ХӘБӘРҺЕҘҘӘР



**Юғалдылар күптәр хәбәрһеҙ,**
**Хәбәрһеҙҙәр илдә ҡәберһеҙ,**
**Уларҙың юҡ ҡәбер таштары -**
**Ҡайҙа ҡалды ғәзиз баштары?**
**Ҡарай-ҡарай киткән юлдарын**
**Әсәләре көттө улдарын.**
**Ҡайтып күрә алмай Уралды**
**Сит илдәрҙә улдар юғалды.**

**Борсомағыҙ һорап әсәне:**
**"Ҡайҙа, - тиеп, - улың ҡәбере?"**
**Яуап булыр әсе күҙ йәше,**
**Өҙөләлер әсә бәғере.**
**Юғалды ул, тигән хәбәрҙәр**
**Әсә күңелдәрен игәйҙәр.**
**"Ваҡыты юҡтыр, ҡайтыр әле", тип,**
**Өмөтләнеп үлде инәйҙәр.**

**Хәбәрһеҙҙәр беҙҙә ҡәҙерһеҙ,**
**Хәбәрһеҙҙәр илдә ҡәберһеҙ.**
**Юғалғандар улар тимәгеҙ,**
**Батыр намыҫына теймәгеҙ,**
**Илен һаҡлап улдар юғалған,**
**Ҡош юлына улар юл алған.**

**Әкрәм ҠӘЙЕПҠОЛОВ.**

12+

✓ *Бөгөн милли көрәште ауыл егеттәре күтәрә. Ҡалала бәләкәйҙән көрәшкә ылыҡҡан балалар бик аҙ. Ҡала ата-әсәләре балаларын төрлө һуғышырға өйрәтә торған түңәрәктәргә бирергә тырыша.*



*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# ҺАБАНТУЙҘАР...

## халыҡсан асылда булһын!



**Һабантуйҙарҙы ҡабаттан халыҡ байрамы итеп ҡайтарыу хаҡында һүҙ күптән йөрөй, әммә был һаман һүҙҙә генә ҡала әле.**

Иң беренсе күңелде ҡырған нәмә - байрамдың русса алып барылыуы. Элегәрәк театрлаштырылған тамашалар башҡортса булған булһа, хәҙер инде ситтән килер ҡунаҡтарға көйләнеп, сәхнәләге "боронго" башҡорттарҙы ла русса һөйләштерәбеҙ. Үҙебеҙҙекеләр былай ҙа русса аңлай, йәнәһе, ә Өфөнән, Мәскәү йә Питерҙан киләсәк ҡунаҡтарға аңлайышлы булһын. Йәғни, был саралар әҙерләнгәндә үк ерле халыҡ өсөн түгел, ә ошонда ярты сәғәткә һуғылып китеүселәрҙең күңелен күреү өсөн башҡарыла булып сыға. Ә бит шул өс кешегә тәржемәсе лә беркетеп ҡуйырға була...

Һабантуйҙарҙа ауыл биләмәләренең тирмәләре ҡуйылыу матур йола. Матур, әммә шул биләмәләр өсөн мәшәҡәтле һәм уңайһыҙ. Ундағы ауыл кешеләре тәүлек буйына ҡаҙан-усағын һаҡларға мәжбүр. Шундай уҡ ун минутлыҡ күренеш, ниндәйҙер бәләкәй генә баһа өсөн ауыл уҡытыусылары, ағинәйҙәре өйөндәге иң тәмле ризыҡтарын тейәп килеп, табын тултырып һый теҙеп ҡуйып, йырлап-бейеп ҡаршы алып тора. Шундай ихласлыҡ һәм ҡунаҡсыллыҡ күрһәтелә күрһәтелеүгә, әммә шул ҡатын-ҡыҙҙар бит майҙандағы төп сараларҙы тамаша ҡыла алмай. Уларға быны өсөн аҡса түләнмәй, ниндәйҙер ташламалар яһалмай. Ошо фиҙаҡәр ҡатын-ҡыҙҙарҙан мотлаҡ булмағанды эшләтеп, уларҙы ирекһеҙләп байрам яһау кеүегерәк килеп сыға. Закон теле менән әйткәндә, уларҙың хоҡуғын боҙоу була инде. Бигерәк тә ағинәйҙәрҙең шундай сараларҙа ялпылдатып йөрөтөлә торған бушлай әртистәргә әйләндерелеүе эсте бошора. Уларҙың башҡорт йөмғиәтендәге тәғәйенләнеше икенсе бит...

Бәйгеләрҙә һуңғы йылдарҙа сабыш аттары күбәйгәндән-күбәйә. Был шәхси хужалыҡтарҙа аттарҙың ишәйә барыуына бәйлеләр. Хатта сабышҡа тип махсус тоҡомло мал һатып алып аҫрағандар ҙа бар икән. Сабыш аттары иһә әллә ҡайҙан айырылып тора, һонолоп, енел елеп, толпар булып осоп киләләр. Ҡарап тороп күҙҙәр һөйөнә. Ауылдарҙағы ир-егеттәрҙең ат спортына йөҙ бороуы ла, боронғо ата-бабалар йолаһын ҡайтара барыуҙары ла итеп ҡабул итергә була быны. Һәр хәлдә, был һөйөндөрә. Тик егеттәрҙең аттарын һәм үҙҙәрен сабышҡа, йәғни йөҙәрләгән кеше мажара ҡылыр сараға әҙерләй белмәүҙәре генә шелтә яһарға мәжбүр итә. Ҡаҙаҡтарҙа, ҡырғыҙҙарҙа менгеләрҙең, һыбайлыларҙың ҡупшылығын күрһәтергә ине үҙебеҙҙекеләргә. Ул аттарҙың ялдары таҫмалап үрелгән, бәкәлдәрендә - төсло ойоҡтар, ҡойроҡтар биҙәлгән, эйәрҙәр семәрләнгән. Һыбайлылары милли кейемдә. Ә беҙҙең һыбайлы төркөм ситтән ҡарауға уҡ күнелһеҙ, ир-егеттәр бер төрлө - эш кейемендә.

Ашау-туҡланыу урындары ла үҙгәрмәй әле. Байрамға килгән халыҡ һаман сауҙа урындарында баҫып тороп ашарға мәжбүр. Тирмәләр күргәҙмә өсөн генә, милли мөхиттә ял итеү, ашап сығыу мөмкинлеге юҡ.

Шулай ҙа хәҙерге һабантуйҙарҙы онотола барған уйындарҙың тергеҙелеүе биҙәй. Мәҫәлән, күп урындарҙа таш атыу, таяҡ тартышыу, һуйыл ташлау, айран эсеү, һарыҡ йөкмәп йүгереү, уҡ атыу, ылаҡ һымаҡ ярыштарҙың булыуы халыҡты ҡыҙыҡһындыра. Ғөмүмән, бөгөн һабантуйҙарға ысын халыҡ байрамы асылын ҡайтарыу тураһында һүҙ күтәрелә икән, ул тиҙерәк тормошҡа ашһын, тип теләргә генә ҡала.

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА.**

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

**?** ***Беҙҙең милли көрәш киләсәктә Башҡортостан брендына әйләнә, башҡортҡа ғына хас спорт төрө булып үсешә аласаҡмы? Ошо һорауҙы баш ҡаланың "Ватан" паркында үткән көрәш буйынса асыҡ турнирға йыйылған көрәш белгестәренә бирҙек.***

***Йәлил ЙОСОПОВ, Рәсәйҙең спорт мастеры, БР-ҙың атҡаҙанған физик тәрбиә хеҙмәткәре, милли көрәш буйынса тренер:*** Борон-борондан һәр ырыуҙың үҙ батырҙары, бәһлеүәндәре булған. Улар тураһында хикәйәттәр, риүәйәттәр беҙҙең көнгә килеп еткән. Милли көрәштең тарихы бай һәм тәрән. Хатта "Урал батыр" эпосында ла, мәҫәлән, "Көрәш бармы, алыш бармы?" тип өндәшә батырҙар. Беҙҙең көрәш "Башҡорт халҡының милли көрәше" тигән атаманы рәсми рәүештә үҙенә ныҡытһын ине ул. Күптән ваҡыт! Югиһә, беләһегеҙ, көрәш төрки халыҡтарының күптәрендә бар. Әммә башҡорт көрәшенең үҙ тәртиптәре бар һәм һуңғы йылдарҙа ошо айырмалыҡтар юйыла бара. Киләсәктә барыһыныҡы ла дөйөмләштерелгән бер көрәш төрө килеп сығыуы ла ихтимал. Һәм шунан әйтеп ҡара был беҙҙең милли көрәш тип!

Беҙҙә көрәшсе йәштәр, ир-егеттәр аҙ түгел. Тик улар бер нисә көрәш төрөн үҙ иткән. Берәүҙәре көрәшкә килә, икенселәре ММА-ға, кемдәрҙер бил һуғыштарына китә. Ә милли көрәш - ул спорт ҡына түгел, ул башҡорт халҡының мәҙәниәте лә, тарихы ла, рухиәт кимәлендәге бер байлығы ла.

Республика Башлығы Радий Хабиров бөгөн милли көрәшкә йөҙ борҙо һәм был әлеге спорт өсөн иркен юлдар асып ебәрер, тип өмөт итәйек.

Бөгөн милли көрәште ауыл егеттәре күтәрә. Ҡалала бәләкәйҙән көрәшкә ылыҡҡан балалар бик аҙ. Ҡала ата-әсәләре балаларын төрлө һуғышырға өйрәтә торған түңәрәктәргә бирергә тырыша. Йәнәһе, тик шунда ғына улар үҙҙәрен яҡлай аласаҡ, тип уйлай. Ә көрәш эсенә бит бөтөн төрлө спорт күнекмәләре лә инә. Ул шундай бай спорт төрө комплекслы физик әҙерлек. Бына мин 70 йәштәге көрәшсе һәм әллә нисә быуын көрәшселәрҙе тәрбиәләгән тренер, быға тиклем бер генә үҙен һәм башҡаларҙы яҡлай алмаған йәки кемдәндер туҡмалған көрәшсене күргәнем юҡ.

Бөгөн беҙҙә көрәш секцияһы бер БДУ-ла ғына ҡалды. Башҡалары билбаулы көрәш төрҙәренә йәки башҡа шөғөлдәргә әүерелеп бөттө. Ауыл егеттәрен ҙур ҡалала юғалтмау өсөн һәр уҡыу йортонда милли көрәш түңәрәктәрен күпләп асырға һәм тренерҙар йәлеп итергә кәрәк, тип иҫәпләйем.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостанда 18 июндә тәүлек эсендә COVID-19 йоҡтороуҙың 109 яңы осрағы теркәлгән. Ауырыуҙарҙың дөйөм һаны 39 865-кә еткән, шуларҙың 1541-е әлеге ваҡытта сир менән көрәшә. Шул иҫәптән 28 кеше ауыр хәлдә. Тәүлек эсендә яңы коронавирус инфекцияһын йоҡторған дүрт кеше яҡты донъя менән хушлашҡан. Һаулыҡ һаҡлау министры Максим Забелин белдереүенсә, бөгөн дауаланыусыларҙың 95 проценты вакцина яһатмаған. Роспотребнадзор төбәктә айырыуса 14 йәшкә тиклемге балалар араһында ауырыуҙар һаны күбәйеүен хәбәр итте.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров коронавирус таралыу хәүефенә бәйле юғары әҙерлек режимы тураһында указға үҙгәрештәр индерҙе. 2021 йылдың 2 июленә тиклем Башҡортостан халҡына, шулай уҡ республика биләмәһендәге сит ил граждандарына һәм гражданлығы булмағандарға халыҡ күп йөрөгән урындарға, шул иҫәптән майҙандарға, парктарға, скверҙарға, аллеяларға барыуҙан тыйылырға кәрәк. Вакцинация үтеү сертификаты, медицина ойошмаһынан прививка эшләтеү тураһында йәки эшләтергә ярамауы тураһында белешмәһе, ПЦР-анализдың кире һөҙөмтәһе тураһында белешмәһе булғандар ғына учреждение һәм ойошмаларҙа хеҙмәтләндереләсәк.

✓COVID-19 инфекцияһына ҡаршы Рәсәй вакциналары күрһәтмәләрендә, яман шеш менән ауырығандарға вакцина ярамай, тигән иҫкәрмә юҡ, тип белдерҙе Башҡортостан һаулыҡ һаҡлау министры Максим Забелин. Ә бына нимәгәләр аллергияһы булған кешеләргә вакцина ярамаған осраҡтар бар. Республикала 402 804 кеше прививка эшләткән. Өфөлә 14 майҙан 23 июнгә тиклем вакцина эшләткән кешеләр махсус танытма һәм QR-код алып, шуны "Здоровая Уфа" сайтында теркәп, бер бүлмәле фатир, 10 смартфондың береһен йәки башҡа ҡиммәтле бүләктәр ота ала. Йомғаҡтар "Вся Уфа" каналында 23 июндә яһала.

✓Мәскәүҙең баш санитар табибы Елена Андреева ҡул ҡуйған ҡарарға ярашлы, Мәскәүҙә һәм Мәскәү өлкәһендә хеҙмәткәрҙәрҙең 60 проценты коронавирустан прививка эшләтергә тейеш. Шулай итеп, Мәскәү - илдең Йәкут Республикаһынан ҡала коронавирусҡа ҡаршы мотлаҡ вакцинация тураһында ҡарар сығарылған икенсе, ә Мәскәү өлкәһе өсөнсө субъекты булды. Санитар табип ҡарарының үтәлеше өсөн эш биреүселәр яуап бирә. Улар вакцинациянан баш тартҡан хеҙмәткәрҙәрҙе эштән сығарырға хоҡуҡлы.

УЙЛЫҒА - УЙ

# ӘСИРЛЕККӘ ТӨШКӘНДӘР ХЫЯНАТСЫМЫ,

## йәки Хәбәрһеҙ юғалғандарҙы ла онотмайыҡ

**Һөжүм итмәү хаҡындағы пактты боҙоп, фашист армадаһының Советтар Союзына аңғармаҫтан ябырылыуына - илебеҙ тарихындағы иң ҙур һуғыштың тоҡанып китеүенә һикһән йыл тулды.**



Егерме миллиондан ашыу Совет кешеһенең ғүмерен өҙгән, бынан тыш әллә күпме башҡа халыҡты ҡырған Гитлер палачтарының вәхшилеге кешелек хәтеренән юйылмай. Мәшһүр шағирыбыҙ - яугир Мостай Кәримдең "Өсөнсө көн тоташ ҡар яуа" тип аталған шиғырында: "...Бәлки, үсем кәмер дошманға, тәнемдәге тимер ирейһә", - тигән юлдар бар. Көн боҙолған һайын үткән яуҙы иҫләтеп, әрнеп торған яра төбөндәге мина ярсығы, әлбиттә, бер ҡасан да иремәй, эйәһе менән бергә ҡәбергә лә инеп китә. Фашистарға ҡарата халыҡ нәфрәте лә һис бөтмәйәсәгенә ишара итеп әйтелгән был һүҙҙәр. Бөгөнгө көндә ошо оло яуҙа ҡатнашҡандарҙың, шулай уҡ уларҙы аҙыҡ-түлек, кейем менән тәьмин итеп торған тыл эшсәндәренең, ғөмүмән, һуғыш ауырлығын үҙ иңендә татығандарҙың бик аҙҙары ғына иҫән. Дәһшәтле шул йылдарҙың - әсе хәҡиҡәттең шаһиттары көндән-көн кәмей. Әммә, бәғзе бер Көнбайыш сәйәсмәндәре, тарихсылары нисек кенә итеп Бөйөк Ватан һуғышының асылын үҙҙәренсә бороп яҙырға маташыуҙарына ҡарамаҫтан, хәҡиҡәт хәҡиҡәт булып ҡала...

Ватан һуғышының башын - фашистарҙың тантана итеүен сағылдырған документаль фильмдарҙы һәр кемебеҙҙең күргәне бар. Башлыса немец кинооператорҙары төшөрөп, һуңынан беҙҙекеләргә килеп эләккән кадрҙар улар. Ҡанаттарына тәре төшөрөлгән самолеттарҙың күк йөҙөн ҡаплап, ҡалаларыбыҙҙы аяуһыҙ бомбаға тотоуын, гитлерсыларҙың шашына-көлә ауыҙ гармуны тартып, йөк машиналарына, танкыларға тейәлешеп, урамдарыбыҙҙан үткәнен, емерек һәм янған өйҙәрҙе күреп, кемдең генә йәне әрнемәй икән. Бәйгә тағылған овчаркалы һаҡсылар оҙатыуында барған, бил ҡайыштары сиселгән, ҡоралһыҙ, күптәренең йөҙҙәренән малай сырайы ла китеп өлгөрмәгән йәш совет һалдаттарын - әсирҙәр колоннаһын да күрһәткәндәре бар... Ә инде һуғыш аҙаҡтарында үҙебеҙҙекеләр төшөргән фильмдарҙы - совет ғәскәрҙәренең "Катюша" һәм башҡа ҡоралдарҙан фашистарҙы утҡа тота-тота алға барыуын, немецтар ҡулы аҫтында булған Европа ҡалаларын ҡабаттан тартып алып, үҙ хужаларына ҡайтарып биреүен, Көнбайыш илдәре халыҡтарының нисек итеп беҙҙең ғәскәрҙе алҡышлап ҡаршы алыуын оло кинәнес менән ҡарайбыҙ.

(Дауамы 6-сы биттә).

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

**?**

***Беҙҙең милли көрәш киләсәктә Башҡортостан брендына әйләнә, башҡортҡа ғына хас спорт төрө булып үҫешә аласаҡмы? Ошо һорауҙы баш ҡаланың "Ватан" паркында үткән көрәш буйынса асыҡ турнирға йыйылған көрәш белгестәренә бирҙек.***

***Рәмил РӘХМӘТОВ, Башҡортостандың 1975 йылғы көрәш батыры:*** Тарихҡа килгәндә, көрәш элек йәш үҫмерҙәрҙе хәрби-физик яҡтан көслө итеп тәрбиәләү өсөн ҡулланылған, һуңынан ярыш, уйын-көлкө, үҙеңдең ихтыяр көсөңдө һынап ҡарау маҡсатында ойошторолған. Атай-олатайҙар улдарының биш йәше тулыуын тулҡынланып, түҙемһеҙлек менән көткән, нәҡ ошо йәштән баланы милли көрәш алымдарына, атта сабышырға, йәйәнән атырға, һөңгө сөйөргә өйрәтә башларға мөмкин булған. Көрәш бигерәк тә төрки халыҡтарҙа киң таралған. Үзбәк, ҡырғыҙ, монгол көрәше башҡорт көрәшенә яҡын, айырмаһы шунда: уларҙа аяҡ салыу рөхсәт ителә. Беҙҙең милли көрәш, башҡа төрлө ғөрөф-ғәҙәттәр, йолалар менән бер рәттән, милли мәҙәниәтебеҙҙең шаҡтай мөһим өлөшө, йәш быуынды көслө рухлы, дәртле һәм яуаплы итеп тәрбиәләүҙең бер ысулы ла. Башҡорт көрәшендә көрәшселәр таҫтамал менән бәйләп, бер-береһенең билен ала, ҡул көсө менән генә күтәреп, арҡаһына һала. Тап ошо күренеш - милли көрәштең сағыу биҙәге. Төбәктәрҙә ойошторолған ярыштар олимпиадаға ингән көрәш төрҙәренең үҫешенә ыңғай тәьҫир итә, сөнки уның байтаҡ алымдары ирекле көрәштә лә, самбола ла бар.

Милли көрәште республика бренды тип иҫәпләргә күптән ваҡыт. Беҙ, мәҫәлән, шуның өсөн көс һалманыҡмы? Йәштәрҙе шуның өсөн тәрбиәләмәнекме? Уларҙың киләсәге ошо спортҡа хеҙмәт итеүҙә ышаныслы булһын ине.

**Әлиә СӘЙҒӘФӘРОВА яҙып алды.**

БЫНАҒАЙЫШ!

# ТАРИХЫН БЕЛМӘГӘНДЕҢ...



**Был донъябыҙ ҡайҙа бара? Әле генә Ҡаҙан фажиғәһе айҡанлы, унан ары тарих дәреслектәренә дәғүәләр менән бәйле тәрбиә мәсьәләһе буйынса ҡыҙыу-ҡыҙыу бәхәстәр, фекер алышыуҙар булып алды ла тынды. Ләкин был темаға нөктә ҡуйылырға тейеш түгеллеген барыбыҙ ҙа беләбеҙ, тик бына һүҙҙән ҡасан эшкә күселер - быны берәү ҙә белмәй.**

Ә шул арала үҫмерҙәр тарафынан ҡылыныусы бәйһеҙлек, хаттин ашыу факттары бер-бер артлы иҫ-аҡылдарҙы шаңҡытыуын дауам итә. Хәҙерге ғибрәттәргә күнеп барған күңелде лә тетрәтерлек була хатта дыуамал үҫмерҙәрҙең хаяһыҙлыҡтары. Бына, мәҫәлән, әле генә Тверь ҡалаһынан интернет бәйләнешкә видео һалдылар: ике үҫмер ҡыҙ булкалар һатып алып, икмәктең йомшағын соҡоп ташлағандар ҙа, был батондарҙы ҡата урынына аяҡтарына кейеп алғандар. Ни өсөнмө? Әлеге лә баяғы Тик-ток геройҙары булғылары килгән! Хәҙер бит йәштәрҙең төп шөғөлө ошо Тик-токта мөмкин тиклем күберәк тауыш, хуплау, һис юғы, уны ауыҙ асып тамаша ҡылыусылар йыйыу. Бының өсөн улар нимәләр генә ҡыланмай, маймылланыуҙарҙың сиге юҡ. Әлеге ике ҡыҙҙың яман ҡылығын төшөрөп алып интернетҡа һалған автор сикһеҙ нәфрәтен белдерә һәм ата-әсәләренең ошо видеолағы ҡыҙҙарын күреп, уларҙың арт һабағын уҡытырҙар тип өмөтләнә, күрәһең. Ләкин... йүнле кешеләрҙең балаһы ошондай аҙымға барырмы икән һуң - был да һорау тыуҙыра, сөнки видеоға ҡарашын белдереүселәр араһында, киреһенсә, ҡыҙҙарҙың был ҡылығын хуплап, унан мәрәкә табыусылар ҙа күп. Әгәр "көн героинялары"ның ата-әсәләре лә шундайҙарҙан булһа?

Видеола мәрәкә күреүсе әлегеләр был ҡылыҡты "креатив" күренеш тип атауҙан да тартынмай. "Бының нимәһе ғәжәп?" тип аптырай шуларҙың береһе. Башҡалары ла унан алыҫ китмәгән: "Был ҡыҙҙарға лайк ҡуйырға кәрәк!", "Блокада күптән бөттө бит инде, әле 2021 йылда йәшәйбеҙ. Икмәк йәлме һеҙгә? Әллә һеҙ һаман да шөкәрә киптереп, "ҡара көн"гә әҙерләнәһегеҙме?", "Ҡабартмағыҙ әле, был бит бары көлкө өсөн генә..." - бына шундай комментарийҙар яҙа 21-се быуаттың икмәккә туйып һикереүселәре. Дмитрий Кузнецов тип имза уйған берәү: "Гениально! Былар, күрәһең, тарих тыңлап ялыҡҡан тарих факультеты студенттарылыр, моғайын", - тип сәпәкәй итә. Саша Белов тигән яһалма исем артына йәшеренгән тағы берәү: "Икмәкте изгеләштереүсе ҡарт-ҡоро фәлсәфәһе бөттө, уны талонға алған заман түгел бөгөн. Үҙ аҡсаһына һатып алғандар икән, икмәкте улар теләһә ни эшләтә ала, юҡтан шау-шыу ҡуптармағыҙ", - тип аҡыл һата. Был әҙәмдәр башҡалар фекеренә ҡолаҡ һалырға ла теләмәй, ҡыҙҙарҙы оялтырға тырышыусыларҙы агрессив һәм тупаҫ бүлдерә, мыҫҡыллап көлә.

Эйе, тәнҡитләргә тырышыусыларҙың береһе әйтмешләй, йәшәүе ҡурҡыныс булып китә: 21-се быуаттың "креатив" ҡырағайҙарынан киләсәктә ни көтөргә ҡала һуң? Тимәк, был быуын бынан теүәл 100 йыл элекке йотлоҡто ла, Бөйөк Ватан һуғышында тылдағы аслыҡтан шешенеп үлгән балалар хаҡында ла, Ленинград блокадаһы тураһында ла бер ни белмәй һәм белергә лә теләмәй. Тарих юҡ улар өсөн, улар бөгөнгө менән генә йәшәй. Ә киләсәктәре ниндәй булыр? Хәйер, тарихын белмәгәндең киләсәге юҡ, тиҙәр. Ҡурҡыныс булып китә...

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Йель университеты ғалимдары кешене коронавирустан ябай һалҡын тейеү һаҡлай ала, тигән һығымтаға килгән. Улар һалҡын тейеүҙе ҡуҙғытыусы вирус ауырыуҙың иммунитетына тәьҫир итеп, коронавирусты булдырмауға булышлыҡ иткән процесты эшләтеп ебәреүен асыҡлаған. Был асыш COVID-19 дауалауҙың яңы ысулдарын асыҡларға ярҙам итеүе бар, тип яҙа РИА Новости.

✓Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы депутаттары пленар ултырышта йәштәрҙең йәш сиктәрен биш йылға арттырған "Йәштәр сәйәсәте тураһында" закон проектын ҡарай. Республикабыҙҙа 14 йәштән 35 йәшкә тиклемге граждандар йәштәр тип һанала. "Беҙ әҙерләгән закон проекты йәштәр сәйәсәтенең концептуаль нигеҙҙәрен, уның маҡсаттарын, принциптарын һәм тормошҡа ашырыу йүнәлештәрен билдәләй. Артабан республикабыҙҙа йәштәр менән эшләү системаһы ошо нигеҙҙә төҙөлә", - тине парламент спикеры Константин Толкачев.

✓Бөтә донъя фольклориадаһы ҡатнашыусылары башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары биҙәүесе - түшелдереккә 46 тәңкә баҫасаҡ. Бының өсөн улар үҙ иленең тимер аҡсаларын алып килә. Был биҙәүес халыҡтар һәм ҡитғалар араһында дуҫлыҡ, берҙәмлек, тыныслыҡ символы булараҡ Башҡортостандың Милли музейына тапшырыла.

✓Әлеге ваҡытта Башҡортостанда йод менән байытылған һөт ризыҡтары рецептарын әҙерләйҙәр. Кәрәкле документтарҙы алғандан һуң "Һөт кухняһы" предприятиеларында биойодлы продукция етештерелә башлай. Был хаҡта Башҡортостандың сауҙа министры Алексей Гусев республика Хөкүмәтендәге оперативкала хәбәр итте. "Рецептура һәм техник шарттар үҙенсәлекле, тап беҙҙең төбәк өсөн әҙерләнгән", - тип билдәләне Гусев.

✓Башҡортостан Башлығы хакимиәте етәксеһенең беренсе урынбаҫары Ринат Бәшировтың отставкаһы тураһында билдәле булды. "Башинформ" агентлығы сығанағы мәғлүмәтте раҫланы. Атап әйткәндә, ул Ринат Бәшировтың отпускыға сығыуын, шунан үҙ теләге буйынса эштән китәсәген хәбәр итте. Ринат Бәширов 2018 йылдың көҙөндә Башҡортостан Башлығы хакимиәте етәксеһенең беренсе урынбаҫары итеп тәғәйенләнгәйне.

ҠЫҪҠАСА

# ХАЛЫҠ ФЕКЕРЕ

✓ **БР Гуманитар тикшеренеүҙәр үҙәге белгестәре ижтимағи-сәйәси темаға республика социологик тикшеренеүҙәре үткәрҙе. Һорауҙарға яуап биреүҙә 1048 кеше ҡатнашты.** Яуап биреүҙәрҙә ҡатнашыусыларға уларҙы иң ныҡ борсоған проблемаларҙы атарға ҡушылғайны. Беренсе урында күп йылдар инде хәҙер "Хаҡтар артыуы", "Торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәре сифаты һәм хаҡтары", "Медицина хеҙмәттәре сифаты", "Насар юлдар" һәм "Эшһеҙлек" проблемалары күрһәтелеп килә. Күптәрҙе шулай уҡ экология, эскелек һәм наркомания, әхлаҡ ҡиммәттәренең юҡҡа сыға барыуы борсой. Уларға тәҡдим ителгән тағы бер һорау: "Бөтөн Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу эше иртәгә башланһа, анкетала туған тел тип ниндәй телде күрһәтер инегеҙ?" 55 процент - рус телен, 22 процент - башҡорт телен, 13 процент татар телен, 6 процент башҡорт теленең төньяҡ-көнбайыш диалектын, 4 проценты башҡа телдәрҙе атаған.

✓ **М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетында ошо көндәрҙә "Мәктәпкәсә белем биреү ойошмаларында белем биреү процесы технологиялары" һәм " Балаларға музыкаль белем биреүҙә компетенциялы ҡараштарҙы тормошҡа ашырыуҙың практикаһы һәм методикаһы" программалары эшләй башлаясаҡ.** Аҡмулла университеты донъя кимәлендәге Евразия Фәнни-белем биреү үҙәге ҡатнашыусыһы булып тора һәм үҙенең үсеш стратегияһын уның эшмәкәрлек программаһына ярашлы эшләй. Вузда ойошторолған оҫтаханалар яңы һөнәргә һәм яңы оҫталыҡҡа эйә булыу мөмкинлеген бирә. Программаның маҡсаты - айырым категория граждандарға хеҙмәт баҙарында дәүәселек һәм һөнәри мобиллек тәьмин иткән белем, компетенция алыу йәки булғанын үҫтереү өсөн, һөнәри, өҫтәмә белем биреүҙе ойоштороп, мөшғүллек буйынса ярҙам итеү. Был проект сиктәрендә университет үҙенең WorldSkills оҫтаханаларында 2024 йылға тиклем квалификацияны күтәреү программаларын тормошҡа ашыра. Программала эш эҙләүсе һәм мөшғүллек хеҙмәттәренә мөрәжәғәт итеүсе граждандар, эшһеҙҙәр; 50 йәштән һәм унан өлкәндәр; пенсия алды йәшендәгеләр; өс йәшкә тиклем бала ҡараусы әсәләр; эшләмәгән һәм мәктәпкәсә балаһы булған әсәләр ҡатнаша ала.

✓ **Башҡортостан халҡын "Башҡортостан тәме" онлайн кулинария марафонында ҡатнашырға саҡыралар. Сара быйыл 12 июндән 4 ноябргә тиклем уҙғарыласаҡ.** Ҡатнашыу өсөн 31 октябргә тиклем Башҡортостан Республикаһы халыҡтарының милли аш-һыуын бешереп, видео-рецебын "Бәйләнештә" һәм Инстаграм социаль селтәрҙәренә һалырға кәрәк. Яңылыҡ аҫтына исем-шәрифтәрҙе, ҡайһы илдән, төбәктән, ҡала-ауылдан булыуҙы яҙырға һәм ни өсөн нәҡ ошо аш-һыуҙы бешереүең тураһында мәғлүмәт яҙырға кәрәк. Шулай уҡ #вкусбашкирии2021 и #TasteOfBashkiria хештегтарын ҡуйырға онотмағыҙ. Ярышты ойоштороусы БР Халыҡтар дуҫлығы йортонан хәбәр итеүҙәренсә, бөтә ҡатнашыусыларға ла дипломдар тапшырыласаҡ, ә енеүселәр 4 ноябрҙә билдәле була. Һорауҙарҙы ddnrb1@mail.ru электрон почтаһына, йәки 8 (347) 276-62-75 телефоны буйынса бирергә мөмкин.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ҺУҒЫШ БАЛАЛАРЫНА...



**Башҡортостанда "Һуғыш балалары" тигән махсус статус 1927 йылдың июненән алып 1945 йылдың 3 сентябренә тиклем тыуған һәм республикала даими йәшәгән граждандарға бирелә. Бөйөк Ватан һуғышы һәм ул башланғанда 14 йәше тулмаған кешеләр шулай уҡ был статусты алыуға дәғүә итә ала.**

Законға ярашлы, һуғыш балалары уларға бирелгән таныҡлыҡ нигеҙендә сираттан тыш медицина хеҙмәтләндереүенә, шулай уҡ Башҡортостан Республикаһы ҡарамағындағы социаль стационар хеҙмәтләндереү ойошмаларына, шул иҫәптән ваҡытлыса йәшәү өсөн сираттан тыш урынлаштырыу хоҡуғына эйә булалар. "Республика ҡалаларында һәм райондарында таныҡлыҡтарҙы тапшыра башланылар ҙа инде, был эш ошо йылдың июнь аҙағына тиклем дауам итәсәк. Ошоға ҡағылышлы бөтөн һорауҙар менән Республика халыҡҡа ярҙам үҙәгенең йәшәгән урын буйынса филиалдарына мөрәжәғәт итергә кәрәк", - тип аңлатма бирә ведомстводың матбуғат хеҙмәте.

БР Ғаиләгә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, Башҡортостанда әлеге көндә 189 мең һуғыш балалары йәшәй. Шуларҙан 13 мең кеше социаль ярҙам саралары менән файҙаланмай. "Һуғыш балалары" таныҡлығы формаһы һәм уны тапшырыу тәртибе республика Хөкүмәтенең 2021 йылдың 1 июнь ҡарары менән раҫланған. Исемлектәр Республика халыҡҡа социаль ярҙам үҙәге тарафынан һуғыш балалары хаҡында улар ҡарамағындағы мәғлүмәттәр нигеҙендә төҙәлгән һәм республика район, ҡалалары хакимиәттәренә ебәрелгән.

Күп райондарҙа "Һуғыш балалары" таныҡлыҡтарының иң тәүгеләрен һабантуй байрамдарында тапшырҙылар. Өфөлә таныҡлыҡтар Рәсәй көнө, Өфө ҡалаһы һәм Салауат Юлаев көндәрен байрам иткән тантаналар ваҡытында бирелде.

# БАЛ ҠОРТТАРЫ ҮЛӘ



**Күгәрсен, Мәләүез һәм Хәйбулла райондарында парһыҙ ебәк күбәләгенә ҡаршы урманды эшкәрткәндән һуң бал ҡорттары үлгән. Күбәләк менән бәйле ғәҙәттән тыш хәл Башҡортостандың биш районында (Баймаҡ, Ейәнсура, Йылайыр, Күгәрсен, Хәйбулла) 12 майҙа иғлан ителгәйне. Урманды ерҙән һәм авиация ысулы менән эшкәртеү планлаштырылғайны. Бал ҡорттары күпләп үлеүенә ошо хәл сәбәпсе булыуы ихтимал, ти белгестәр.**

Ғөмүмән, һуңғы 30 йылда Рәсәйҙә ҡорт һаны кәмей. Әгәр 1990 йылда бөтә төр хужалыҡтарҙа 4,5 миллион умарта иҫәпләнһә, 2000 йылға 3,4 миллионға тиклем кәмене. Рәсәй статистикаһы мәғлүмәте буйынса 2019 йылда был һан 3 миллиондан кәмерәк билдәләнде. Июнь аҙағында "Рәсәй Федерацияһында умартасылыҡ тураһында"ғы федераль закон үҙ көсөнә инеүе шуға ла бик ваҡытлы сара тип ҡабул ителә. Ул тармаҡҡа дәүләт ярҙамы, фальсификатҡа ҡаршы көрәш, ҡорттарҙы агрохимикат һәм пестицидтар менән ағыулауҙы иҫкәртеү механизмын ҡарай.

"Яңы закондың төп положениеларының береһе - сәсеүлекте эшкәртеү өсөн файҙаланылған химикаттарҙың йоғонтоһонан яҡлауға йүнәлтелгән нормалар. Унда ауыл хужалығы етештереүселәренең баҫыуҙы эшкәртерҙән өс көн алдан 7 километр радиусындағы умартасыларҙы иҫкәртергә тейешлеге билдәләнгән. Бал ҡорто тотоусылар ниндәй химикат һибелеүе, ваҡыты, ысулы, хәүефһеҙлеге тураһында белһә, умарталарын һаҡлау сараларын ҡабул итә ала", - ти Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев.

Республика парламенты спикеры әйтеүенсә, был законды ҡабул итеүгә 2019 йылдың йәйендә бал ҡорттарының күпләп үлеүе сәбәпсе булды - Рәсәйҙә 80 мең умарта ҡорт юҡҡа сыҡты. Был күренеш илдең 30 төбәгендә, шул иҫәптән Башҡортостанда теркәлде. Рәсәй Ауыл хужалығы министрлығы һәм Россельхознадзор уның төп сәбәбен пестицидтар менән ағыуланыуҙан күрҙе. Бал ҡортонон үлеүе былтыр ҙа осраны. Яңы закон уларҙы химия йоғонтоһонан яҡларға ярҙам итәсәк. Ҡанун шулай уҡ бал ҡортон Рәсәйҙә теркәлмәгән дарыу препараттары менән дауалауҙы тыя. Һәр умарталыҡтың ветеринария-санитария паспорты булырға тейеш. Ғәҙәти умарталыҡтарҙы тоҡомло ҡортсолоҡ менән шөғөлләнеүселәрҙән 25 километр алыҫлыҡта урынлаштырыу мөһим. Умартасылыҡ менән ауыл хужалығы йүнәлешендәге, режимы тура килгән башҡа ерҙәрҙә, шулай уҡ шәхси ярҙамсы хужалыҡ өсөн бирелгән йәки алған участкала шөғөлләнергә мөмкин. Умартасыларға дәүләт һәм урындағы үҙидаралыҡ органдары ярҙамын алыу мөмкинлеге ҡаралған.

# ТЫУҒАН ЯҠҠА ЯРҘАМ

**Башҡортостанда "Атайсал - кесе ватан" меценаттар проектының һөҙөмтәләре билдәле булды. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, проект яҡташтарҙың тыуған яҡтарына ярҙам итеү йәмәғәт программаһы булараҡ Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров башланғысында барлыҡҡа килгәйне.**

"Атайсал - кесе ватан" проектына старт биреләүгә өс ай үтте. Ошо арауыҡ эсендә 377 ғариза килгән, шуларҙың 56-һы тормошҡа ашырылған", - тине Радий Хәбиров. Порталда тәҡдим ителгән проекттар һаны буйынса Асҡын районы беренсе урында - уларҙан 22 ғариза килгән. Ғафури районынан 20 тәҡдим, Балтас районынан 18, Мәләүез һәм Борай райондарынан 17-шәр, Благовещен һәм Ҡырмыҫҡалы райондарынан 14-әр проектты тормошҡа ашырыу маҡсатында ғаризалар килгән. Ә бына ҡалалар араһында иң күбе Нефтекама һәм Өфөнән - 15, Салауаттан 9, Ағиҙелдән 7 проект тәҡдим ителгән. Күпселек проекттар шишмә һәм ҡоҙоҡтарҙы төҙөкләндереү, Бөйөк Ватан һуғышы яугирҙарына обелиск һәм һәйкәлдәр ҡуйыу, урам һәм юлдарҙы яңыртыу, балалар һәм спорт майҙансыҡтарын яңыртыу, мәктәп һәм балалар баҡсалары тәҙрәләрен алмаштырыу тураһында. Спорт саралары, һабантуй, концерт кеүек саралар ойоштороу, мәктәпкә йыйыныуға ярҙам итеү кеүек проекттар ҙа осрай. Благовещен районына тиҙ ярҙам машинаһы һатып алыу, Мәләүез районы Воскресенск ауылы мәҙәниәт йортона автомобиль һатып алыу йәки Баймаҡ районында медицина ҡорамалдарын тапшырыу кеүек ҙур проекттар ҙа бар. Уларға сит илдәрҙә йәшәгән яҡташтар ҙа ҡушылған. "Илсур Нәбиуллин - урман эшкәртеү һәм төҙөлөш буйынса ике компанияның генераль директоры, күптән яҡташтарына ярҙам итә. Ул үҙ аҡсаһына тыуған ауылы Бетерәлә (Баймаҡ районы) мәсет төҙәткән, республикалағы бер нисә мәсетте төҙөкләндерергә ярҙам иткән. Социаль йорттарға, район һәм республика проекттарына ярҙам күрһәтеп тора. "Атайсал" проекты буйынса Бетерә ауылындағы обелискыны яңыртыуға аҡса бүлгән һәм Темәс ауылындағы обелискыны төҙөкләндереү өсөн төҙөлөш материалдары менән ярҙам иткән. Яңыраҡ ҡына Илсур Нәбиуллин Мәләүез районы Воскресенск ауылы балаларына сығыштар яһау һәм экскурсияларға йөрөү өсөн автомобиль бүләк итте", - тине проект һөҙөмтәләре менән таныштырып Радий Хәбиров.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Өфө буйлап эш сәйәхәте барышында Көньяҡ биҫтәһендәге 2700 квадрат метр майҙанды биләйәсәк "Көньяҡ" паркы ла Республика Башлығының иғтибарынан ситтә ҡалманы. Бында бер нисә спорт һәм уйын зонаһын булдырыу, воркаут өсөн тренажерҙар ҡуйыу планлаштырыла. Парк периметры буйынса йүгереү һәм йәйәүлеләр өсөн юлдар эшләнә. Парктың үҙәк элементы булып фонтан торорға тейеш. Битләүҙә урынлашҡанлыҡтан парк өс яруслы буласаҡ. Төҙөүселәр барлыҡ эштәрҙе йәйгеһен тамамлап, уны августа асырға ниәтләй.

✓Баш ҡаланың Октябрь районында "Коштар" скверын төҙөкләндереү тамамлана. Ул 130-сы мәктәп территорияһы эргәһендә урынлашҡан. Эргә-тирәләге йорттарҙа йәшәүселәр республика Башлығының Өфө буйлап эш визиты ваҡытында ихата территорияларын ремонтлауҙың түбән сифатлы булыуына, ваҡытында таҙартылмауына һәм тротуарҙар юҡлығына зарлана. "Дөрөҫөн әйткәндә, тәүҙә юлдар эшләргә, һуңынан паркты төҙөкләндереүгә тотонорға кәрәк ине, - тип белдерә Радий Фәрит улы. - Әммә эш башланғас, уны ярты юлда ташлап ҡуймаясаҡбыҙ, быйыл сквер эшләнәсәк".

✓Башҡортостанда "Медицина хеҙмәткәре көнө" киң билдәләнде. Өфө ҡалаһының алты залында медицина хеҙмәткәрҙәрен федераль һәм республика наградалары менән бүләкләү тантанаһы үтте. Республиканың барлыҡ медицина округтарынан 650-нән ашыу медик ҡатнашлығында парад, Башҡортостан юлдаш телеканалында тура эфирҙа телемарафон ойошторолдо.

✓"Һаулыҡ һәм әүҙем ғүмер оҙайлығы йылында 21 июндән пенсионерҙарға һәм инвалидтарға сертификаттар тапшыра һәм юллама хаҡының бер өлөшөн субсидиялай башлайбыҙ",- тип хәбәр итте социаль селтәрҙә Радий Хәбиров. Эксперт советы пенсионерҙарға һәм инвалидтарға республика маршруттары буйлап 186 социаль тур һайлап алды. Сертификаттар теркәлгән урын буйынса республика халыҡҡа социаль ярҙам үҙәге филиалдарында, шулай уҡ "Ғаилә" район-ара үҙәктәрендә тапшырыла. 2021 йылда 7 793 600 һумға 905 кешене юллама менән тәьмин итеү планлаштырыла.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

***✓ Килешеү төҙөгән саҡта фатир һатыусы документтарҙың төп нөсхәһен күрһәтеүҙән баш тартһа, шунда уҡ шик уяныуға тейеш һәм килешеүҙе кисектереп торорға тәҡдим итәм.***

ИҪКӘРТӘБЕҘ!

**Көн һайын меңәрләгән кеше йорт йәки фатир һатып ала, йә булмаһа, уны һатыу мәшәҡәттәре менән йөрөй. Тәү ҡарашҡа ябай ғына күренгән донъяуи мәсьәлә ҡайһы саҡта һатып алыусы йәки һатыусы өсөн ауыр эҙемтәләргә килтерергә мөмкин. Күсемһеҙ милек мәсьәләләрен хәл иткәндә нисек мутлашыусылар ҡулына эләкмәҫкә? Ошо хаҡта Дәүләт теркәүе, кадастр һәм картография федераль хеҙмәте Башҡортостан Республикаһы буйынса идаралығының күсемһеҙ милекте теркәү бүлеге етәксеһе урынбаҫары Алһыу КҮСӘРБАЕВАның кәңәштәрен тәҡдим итәбеҙ.**

# ФАТИРЛЫ БУЛАМ ТИП...

## мутлашыусыларға эләкмә



**➔ Алһыу Фәтих ҡыҙы, һеҙҙең идаралыҡ белгестәре күсемһеҙ милек теркәү өлкәһендә мутлашыусылар менән йыш осрашамы?**

- Беҙҙең идаралыҡтың документтарға техник-криминалистик экспертиза эшләү вәкиллеге юҡ. Шулай ҙа идаралыҡтың дәүләт теркәүселәрендә тапшырылған документтарҙың ысын булыуына шик тыуһа, мутлашыу фактының булыу йәки булмау осраған тикшертеү өсөн прокуратура органдарына мөрәжәғәт итеү мөмкинлеге бар. Мәҫәлән, 2020 йылда хоҡуҡи экспертиза ярҙамында үлгән кеше исеменән йорт һатырға, ялған ышаныс ҡағыҙы һәм суд ҡарарҙары менән күсемһеҙ милек теркәргә тырышыу осраҡтары булды. Шулай уҡ торлаҡ йорт билдәләренә тап килмәгән күсемһеҙ милекте теркәү өсөн документтар тапшырыусылар етәрлек. Был осраҡта беҙҙең белгестәр күсемһеҙ милек урынлашҡан урынға барып, уны фотоға төшөрә һәм шик раҫланған осраҡта материалдар шулай уҡ прокуратура органдарына ебәрелә. Улар иһә объекттың техник планын эшләп биреүсе кадастр инженерының эшмәкәрлеген тикшерә.

**➔ Күсемһеҙ милек һатып алғанда аҡсаһыҙ ҙа, торлаҡһыҙ ҙа тороп ҡалмаҫ өсөн, тәү сиратта нимәгә иғтибар итергә кәрәк?**

- Әгәр ҙә беҙ фатир йәки бүлмә тураһында һүҙ алып барһаҡ, иң беренсе, уның законһыҙ рәүештә ҡайтанан планлаштырылған булмауына иғтибар итергә кәрәк. Күп фатирлы йорттағы бүлмәләрҙе үҙ белдегенә яңынан планлаштырған өсөн ҙур күләмдәге штрафҡа юлығырға мөмкин.

Килешеү төҙөгән саҡта фатир һатыусы документтарҙың төп нөсхәһен күрһәтеүҙән баш тартһа, шунда уҡ шик уяныуға тейеш. "Һуңынан күрһәтәм", "Өйҙә онотоп ҡалдырғанмын" һәм башҡа аҡланыуҙар ишеткән осраҡта килешеүҙе кисектереп торорға тәҡдим итәм. Документтарҙың төп нөсхәһен үҙ күҙегеҙ менән күреп, уҡығандан һуң ғына артабан килешеү эштәрен дауам итергә мөмкин.

Күсемһеҙ милекте ышаныс ҡағыҙы аша һатып алғанда ла ауыр булырға саҡырам. Һуңынан үкенмәҫ өсөн ышаныс ҡағыҙының алдаҡ түгел икәнлеген Федераль нотариаль палата сервисы аша тикшереү мотлаҡ. Ышаныс ҡағыҙҙары ялған, үлгән кеше исеменән яҙылған булырға мөмкин. Был осраҡта киләсәктә торлаҡһыҙ тороп ҡалыу ҡурҡынысы бар.

Әгәр ҙә һатыусы документтарға ҡул ҡуйыуҙы артыҡ ҡабаландырһа, шулай уҡ шикләнергә урын бар.

Һатып алырға теләгән күсемһеҙ милектең әҙ генә ваҡыт эсендә күпләп хужалары алмашыныуы ла уйландырырға тейеш. Бәлки, ошо юл менән мутлашыусылар тәүге килешеүҙең законға ярашһыҙлығын йәшерергә тырышалыр.

**➔ Мутлашыусылар ҡулына эләкмәҫ өсөн нимә эшләргә?**

- Тәү сиратта, документтарҙың төп нөсхәһен күрһәтеүҙәрен талап итергә. Ул Берҙәм дәүләт күсемһеҙ милек реестрынан алынған күсермә, йорттоң йәки фатирҙың техник планы, хосусилаштырыу, һатыу-һатып алыу килешеүе һәм башҡа документтар булыуы мөмкин.

Ышаныс ҡағыҙы менән һатырға тырышыу осрағында милек хужаһы менән шәхсән осрашып һөйләшеү мөмкинлеген эҙләгеҙ. Ул ысынлап та йортон һатырға теләй икәнен үҙенән асыҡлағыҙ.

Күсемһеҙ милеккә ҡарата сикләүҙәр ҡуйылмағанын, уның кем исемендә булыуын асыҡлау өсөн МФЦ йәки беҙҙең Идаралыҡта выписка эшләүгә заказ бирегеҙ. Ул түләүле, ләкин уның күләме алданып, ҙур суммала аҡса юғалтыуға бәрәбәр түгел.

Әгәр ҙә торлағығыҙҙың мутлашыусылар ҡулына эләгеү хәүефен тойһағыҙ йәки үҙ милкегеҙҙе һаҡларға теләһәгеҙ, МФЦ йәки беҙҙең идаралыҡ аша үҙегеҙҙең шәхси ҡатнашлығығыҙҙан тыш һатыу-һатып алыу процедуралары үткәреүҙе тыйған махсус ғариза бирә алаһығыҙ. Был осраҡта бер кем дә һеҙҙән башҡа милкегеҙҙе һата алмаясаҡ.

Киң таралған мутлашыу ысулы - бер үк торлаҡты бер нисә кешегә "һатыу", йәғни уларҙың барыһынан да аванс алалар һәм юҡ булалар. Шулай уҡ һатып алыусынан дәүләт теркәүе үткәнгә тиклем, төрлө сәбәптәр килтереп, фатир өсөн аҡсаның күп өлөшөн алыуы һәм шулай уҡ юҡҡа сығыу ҙа киң таралған күренеш. Торлаҡ һатып алған саҡта килешеүҙең дәүләт теркәүе үтмәйенсә тороп законлы көскә эйә булмауы тураһында онотмағыҙ.

Фатир йәки йорт һатып алыу ҙур финанс сығымдар талап итә. Шуға күрә был эште башҡарғанда бөтә иғтибарығыҙҙы туплап, ниндәйҙер шик тыуған осраҡта юрист менән кәңәшләшеп, кәрәк тип тапһағыҙ, килешеү төҙөүҙе кисектереп тороп, барыһын да асыҡлағас ҡына килешеүгә ҡул ҡуйып, аҡсағыҙҙы бирегеҙ.

Шулай уҡ күсемһеҙ милкегеҙҙе һатҡанда ла уяу булығыҙ. Бер кемгә лә йорт документтарын алып китергә юл ҡуймағыҙ, күсермәләр эшләтмәгеҙ һәм ышаныс ҡағыҙҙарын уйлы-һуллы таратмағыҙ. Тәү күргән кешегә ышанмағыҙ. Йортһоҙ ҙа, аҡсаһыҙ ҙа ҡалғандар рәтен тулыландырмағыҙ.

**Гөлназ МАНАПОВА**
**әңгәмәләште.**

ҠЫҪҠАСА

# ӨФӨ ҮҪЕШЕ ТИКШЕРЕЛДЕ

**✓ Башҡортостан башлығы Радий Хәбиров етәкселегендә Республикаһың ҡала төҙөлөшө советы ултырышы үтте. Унда Өфөнөң үҫеш мәсьәләләре ҡаралды.** Хакимиәттең Баш архитектура һәм ҡала төҙөлөшө начальнигы урынбаҫары Ольга Сарапулова белдереүенсә, Дим, Затон кеүек биҫтәләр ҡаланы киңәйтеү өсөн резерв булып тора. Затонды үҫтереүҙә төп мәсьәлә транспорт хәрәкәте һәм яңы эш урындары булдырыу, шулай уҡ территорияны төҙөкләндереү, торлаҡ фондын яңыртыу һәм киңәйтеү, мәктәптәр, поликлиникалар төҙөү, йәмәғәт киңлеген булдырыуға бәйле. Өфөнө үҫтереүҙең генераль планы өс күпер төҙөү һәм 42 километр автоюл һалыуҙы күҙаллай. Был саралар оҙайлы перспективала биҫтәгә транспорттың күпләп йөрөү ихтималлығын арттыра. Үҫеш проекты 8 Март ҡасабаһында ҙур торлаҡ комплекстары, "Затон-Көнсығыш", "Затон-Көнбайыш" биҫтәләрен, поликлиника, мәктәптәр һәм балалар баҡсалары төҙөүҙе, үҙәк урам булған Әхмәтов урамын төҙөкләндереүҙе күҙаллай.

**✓ Өфө буйлап эш сәйәхәте барышында Радий Хәбиров Калинин районында 2019 йылда реконструкциялана башлаған "Беренсе Май" паркы менән танышты.** Быйыл июнь башына ремонт эштәре тулыһынса тиерлек тамамланған. Парк территорияһында "Теплое" күле төҙөкләндерелгән, уның периметры буйынса терраса таҡтаһынан юл һалынған, сығанаҡ уртаһына фонтан ҡуйылған. Парктың барлыҡ йәшел үҫентеләре, шулай уҡ йәйәүлеләр юлдары һаҡланған, бер нисә яңы юл барлыҡҡа килгән. Бынан тыш "Беренсе Май" паркында балалар майҙансығы модернизацияланған, унда хәүефһеҙ ҡатлам менән ҡапланған уйын һәм спорт зонаһы барлыҡҡа килгән. Иҫке сәхнә яңыртылған, йыл әйләнәһенә файҙаланып булған сисенеп-кейенеү урыны эшләнгән. Халыҡтың фекерен иҫәпкә алып, 1,5 километр оҙонлоғондағы "Сәләмәтлек һуҡмағы" һәм велоюл булдырылған. Шулай уҡ парк территорияһында заманса скейт-парк, велопарк һәм һыу эсеү фонтандары барлыҡҡа килгән. Эштәр тулыһынса июль һуңында тамамланырға тейеш.

**✓ Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Һупайлы биҫтәһендә Ҡашҡаҙан паркы реконструкцияһы менән танышты.** Бында күл тулыһынса таҙартылған, барлығы 40 мең йөк машинаһы ләм, батҡаҡ һәм көнкүреш сүп-сары сығарылған, күл төбө тәрәнәйтелгән, иң тәрән урыны дүрт метрға етә. Күл һыуы таҙа һәм был уның экосистемаһын һәм биологик күп төрлөлөгөн булдырыуға ярҙам итәсәк. Әле яр буйы һыҙатын һәм һыу һаҡлау зонаһын төҙөкләндереү эштәре башҡарыла, паркта яңы яҡтылыҡ сығанағы, төҫлө һәм музыкалы фонтан барлыҡҡа киләсәк. Күл эргәһендә унайлы пляж һәм ял зонаһы буласаҡ - йәйгеһен кәмәләрҙе һәм катамарандарҙы прокатҡа биргән яхт-клуб, ҡышҡыһын һырғалаҡ ойоштороу ҡарала. Бынан тыш парк территорияһында ике ресторан асыу һәм оркестр майҙансығы менән йыһазландырыу күҙаллана. Күл уртаһына елкәнле кәмә макеты һәм күҙәтеү майҙансығы ҡуйыу планлаштырыла. Проект хаҡы 650,3 миллион һум тип баһалана, әлегә 428,6 миллион һумлыҡ эш башҡарылған.

# ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, анығ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Күреү нервы ҡороу

❖ Был осраҡта күҙҙәрҙе файҙалы матдәләр менән туйындырыу кәрәк. Дөйә һеңеренән (астрагал) төнәтмә яһарға була: 2 ҡалаҡ киптерелгән һәм ваҡланған дөйә һеңере үләненә 1,5 стакан ҡайнатып һыуытылған һыу ҡойорға. Дүрт сәғәт төнәтергә. Төнәтмәне көнөнә 3 тапҡыр яртышар стакан эсергә кәрәк. Дөйә һеңерендә күҙгә файҙалы селен бар, шуға төнәтмәне 2 ай эсеү файҙалы. Иҫкәрмә: дауа өсөн билдәләнгән миҡдарҙа ҡулланыуҙан зыян килмәй. Әммә 2 йәшкә тиклем балаларға һәм бик ныҡ ярһығанда төнәтмәне эсмәҫкә кәрәк.

❖ Тағы ла шифалы календула сәскәләренән күҙҙәргә файҙалы төнәтмә эшләйҙәр. 3 балғалаҡ киптереп ваҡланған календула сәскәһен термосҡа һалып, ярты литр ҡайнар һыу ҡойорға. 2 сәғәт төнәтергә, һөҙөргә. Был төнәтмәне көнөнә 3 тапҡыр яртышар стакан эсергә кәрәк.

❖ Бөтнөк үләне (мята перечная) һутын һыу һәм бал менән 1:1:1 нисбәтендә ҡатыштырып, күҙгә икешәр тамсы тамыҙырға. Был рәүешле көнөнә ике тапҡыр - иртәнсәк һәм кис дауаланырға. Шулай уҡ бөтнөктө аҙыҡҡа ла ҡушып ашарға.

## Яман шеште иҫкәртеү

**Ямаш шеш ауырыуҙарын иҫкәртеү өсөн ҡуҙаҡлыларҙан бутҡа һәм аштар бешереп даими ашарға кәрәк. Бынан тыш, бер нисә халыҡ кәңәше лә бар.**

❖ Ярты ҡалаҡ ваҡланған ҡан ҡыҙыл яран (герань кроваво-красная) тамырын ярты литр ҡайнаған йылы һыуҙа 7-8 сәғәт төнәтергә. Шунан һөҙөргә, әҙерләмәне һығып алырға. Төнәтмәне ашарҙан 10-15 минут алда көнөнә 3-4 тапҡыр яртышар стакан йылытып эсергә.

❖ Теләгән миҡдарҙа баҡса кәбеҫтәһе һутын эсергә һәм кҫсән үҙеген ашап йөрөргә. Был аҙыҡ радиоактив нурланыш эҙемтәләрен дауалауҙа һөҙөмтәле булыуын иҫбатлаған.

❖ Календула төнәтмәһе әҙерләргә: 0,5 литрлыҡ банканың 1/2 өлөшөнә араҡы йәки спирт ҡойорға. Ҡараңғы урында 10 көн төнәтергә һәм ашарҙан алда 1 ҡалаҡ ҡайнатылған һыуға 5-10 тамсы тамыҙып эсергә. Был рәүешле 10 көн дауалангас, туктап торорға.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

✓ *Бала саҡта, күрше ауылдарҙың береһендә бер малайҙы: "Һинең атайың һатлыҡ йән булған бит" , - тип үртәгәндәре хаҡында ишетә торғайным. Әләкләшкән бала-саға ололарҙан ишеткәнен ҡабатлай инде.*



*ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!*



# БАШҠОРТ ТУҠЫМАҺЫ

1972 йылғы экспедиция барышында һирәкләп булһа ла аҫалап һуғылған биҙәкле боронғо таҫтамалдар ҙа осраны. Таҫтамал баштарындағы ҡыҙыл һыҙаттарҙы ыҡсым, ваҡ ҡына аҡ фигуралар рәте тултырып тора.



*Аҫалап һуғылған биҙәкле таҫтамал (Силәбе өлкәһе, Сосновка районы, Туҡтыбай ауылы). Автор фотоһы, 1972*

Урал аръяғының Силәбе һәм Ҡурған өлкәләре туҡымалары араһында бер нисә үҙенсәлеклеһе бар. Шуның береһе - бөтөн итеп, өлөштәргә ҡырҡылмай туҡылған ҡатын-ҡыҙҙарҙың таҫтамалға оҡшаш баш кейеме таҫтар өсөн әҙерләмәләр. Улар Силәбе өлкәһендәге Сары һәм Ҡолһары ауылдарында, Ҡурған өлкәһенең Тәңрекүл ауылында һатып алынғандар. Нескә аҡ туҡымала ҡыҙыл еп менән ырғаҡлы, ҡусҡарлы ҡыя шаҡмаҡтар, ҡыя сатраштарҙан һәм башҡа хас булған элементтарҙан торған тығыҙ, нескә орнамент эшләнгән. Ҡыҙыл арҡауҙы аҡ буйғау менән сиратлаштырып, бөтә төньяҡ-көнсығыш башҡорттарына хас булғанса, арауыҡтарҙағы ҡайма һыҙаттарын сатраш (шашечное заполнение) менән тултырғандар. Таҫтар ябынмай башлағас, бындай туҡымаларҙы йорт эсен биҙәү өсөн тотона башлағандар.



*Таҫтар өсөн туҡылған биҙәкле әҙерләмәләр (Силәбе өлкәһе Арғаяш районы Ҡолһары ауылы; Ҡоншаҡ районы Сары ауылы). РЭМ. XX быуат башы*

Шулай итеп, XIX быуаттың икенсе яртыһында һәм XX быуат башында Урал аръяғы территорияһында йәшәгән туҡыусылыҡ традициялары күп төрлө булған. Элекке Силәбе өйәҙе башҡорттарында биҙәкле туҡыма һуғыу күптән ижади һөнәрҙәр рәтенә ингән һәм күренеүенсә, XIX быуат дауамында камиллаштырыла барған.

Урал аръяғының көньяғыраҡ райондарында (Башҡортостан Республикаһы территорияһы) йәшәгән башҡорттар биҙәкле туҡыма һуғыу менән шөғөлләнмәгән. Тегелгән әҙер әйберҙәр туҡымаһын был яҡтарҙа таҫмалар, аппликация, ҡайыу менән биҙәгәндәр. Ҡайһы берҙә һыҙат йәки контурлы биҙәктәрҙе үҫемлек һуты, йә буяусы тау ташы ярҙамында төшөргәндәр.

**Светлана ШИТОВА.**

**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

*УЙЛЫҒА - УЙ*

# ӘСИРЛЕККӘ ТӨШКӘНДӘР ХЫЯНАТСЫМЫ,

## йәки Хәбәрһеҙ юғалғандарҙы ла онотмайыҡ



**(Башы 3-сө биттә).**

Бына ошо документаль фильмдарҙа йыш ҡына фашист тотҡононан хәрби әсирҙәрҙе азат итеү мәлен дә күрһәткеләйҙәр. Төрмәләрҙә, һәр төрлө концентрацион лагерҙарҙа айҙар-йылдар буйы интегеп, хәҙер инде үҙҙәрен irектә тип хис иткән ябыҡ, йонсоу, әммә шат йөҙлө, ала кейемдәге әсирҙәр һалдаттарыбыҙҙы ҡосаҡлай, тантана итә... Элегерәк, вайымһыҙ бала сағымда шул кадрҙарҙы ҡарап, мин дә ошо ватандаштарым менән бергә ысын күңелдән шатлана инем. Нисек итеп шатланмаҫһың! Был документаль кадрҙар - ысынбарлыҡты һөйләй бит! Фашист ҡоллоғонан ҡотолғандарҙы өйҙә яҡындары көтә. Йылдар буйы уларҙан хәбәр ала алмаған, әммә, "похоронка"-һы булмағас, яуға киткән улының имен-һау булыуына өмөтөн өҙмәгән әсәләре, һөйөү наҙын татып өлгөрмәгән йәш кәләштәре, ун ике-ун өс йәштәренән тормош йөгөн тартып, инде ир булған улдары, йә иһә, әле атаһын бер мәртәбә лә күрмәгән сабый балалары... Бына ошо категория кешеләребеҙ - әсирлектә булып ҡайтҡан йә иһә бөтөнләйгә хәбәрһеҙ юғалған яугирҙарыбыҙ хаҡында бөгөн бер аҙ фекерләп алырға булдым әле. Яу ҡырында һәләк булыуы аныҡланып, йә иһә, дошманды еңеп, өйҙәренә һау сәләмәт ҡайтҡандарға ҡарағанда күпкә һирәгерәк телгә алына улар. Герман пленынан ҡотолоп сыҡҡан ана шул ватандаштарыбыҙ илгә ҡайтҡас, тыныс тормошта бәхет таптылармы икән?..

Әлеге бала сағым һаман иҫемә төшә. Атайым менән әсәйем үҙ-ара һөйләшкәндә: "Фәлән кеше, нимес белинендә булып, һуғыш бөткәс ҡайтҡайны ул. Әммә бер нисә көндән уны милисийә килеп алып китте. Шул китеүҙән юҡ булды..." Йә иһә икенсе берәй яҡташыбыҙҙың әсирлектән ҡайтҡас та, "барыбер әпкитәләр", тип, өмөтһөҙлөккә бирелеп, эскелеккә һабышып китеүе, хатта үҙенә ҡул һалыуы хаҡында һөйләгәндәрен ишетеп аптырай инем. "Ни өсөн һуғыштан ҡайтҡан кеше (әсирҙә булғандарҙы ла мин, башҡалар менән бер рәттән, яугир итеп һанай инем), инде тыныс тормошта ҡыуанып, шатланып йәшәй башлау урынына, үҙен үҙе юҡ иткән?" "Нишләп яугир кешене милиция алып китә икән?" Минең өсөн ошондай хәлдәрҙең бөтөнләйгә аңлайышһыҙ булыуына ҡарамаҫтан, төрлө һорауҙар биргеләп, атай-әсәйемде лә артыҡ бимазаламаным. Ҡабаттан төрмәгә япҡас, тигенгә түгелдер инде, тигән уй ғына башыма килгеләне...

Һуғыш башланғанда атайымдың бер туған ҡустыһы (1921 йыл тыуған) Заһитулла ағайым ул осоро Балтик буйы илдәренең береһендәге часта "действительный хеҙмәттә" булған. Июль-август тирәләрендә уның бер генә хаты килгән, башҡаса хәбәр ҙә булмаған. Уның хаҡында ҡыҙыҡһынып, һораша башлаһаҡ, атайым мәрхүмдең был темаға ҡағылышлы әллә ни һүҙ алып барғыһы килмәгәненә лә ғәжәпләнә инек. Бының сәбәбе хәҙер генә бер аҙ аңлашыла башланы: туғаны хәбәрһеҙ юғалғаны өсөн, власть органдары тарафынан үҙенә берәй зыяны тейеп тормаһын, тип шикләнгәндер атайым, моғайын. Заһитулла ағайҙың ҡайҙа һәм нисек һәләк булыуы хаҡында ошоғаса бер ниндәй ҙә мәғлүмәт юҡ. Бәлки, ул снаряд шартлауынан емерелгән окоп төбөндә күмелеп тә ҡалғандыр, йә һыуға батҡандыр, йә булмаһа, әсиргә төшөп, фашист крематорий мейесендә үртәлгәндер... Тик бер Аллаһ ҡына белә инде. Хәҙерге Балтик буйы илдәрендә юғалып ҡалған яугирҙарыбыҙ хаҡында ниндәйҙер мәғлүмәт табыу, эҙәрмәнлек эше алып барыу мөмкин түгелдер. Совет Армияһын "оккупант" тип атаған уларҙың сәйәсмәндәренән башҡаса ни көтәһең инде...

Мин армияла хеҙмәт итә башлағанда хәрби уставта "Военнослужащему запрещается сдаваться в плен", тигән статья була торғайны. Ябай тел менән әйткәндә, бына ошо статьяға ярашлы, һин йә еңергә, йә үлергә тейешлеһең. Ә дошман ҡулына тереләй көйө эләктеңме, һин - хыянатсы... Әммә һуғышта төрлө хәлдәр була. Аңһыҙ, яраланған һәм башҡа төрлө хәлдә әсиргә эләгеп китеү ихтималлығы ла юҡ түгел... Моабит төрмәһендә тотҡонда үлгән Советтар Союзы Геройы Муса Йәлилдең "Пистолетым итте хыянат..." тигән шиғыр юлы хәтеремдә. Үҙен үҙе атып өлгөрмәй ҡалыуы хаҡында әсенеп яҙған уны шағир. Политрук булып хеҙмәт иткән был әҙип немецтарға пленға төшкәс тә илдәгеләр уға "хыянатсы" мөһөрө таға һалалар. Хатта гәзиткә лә ошо хаҡта яҙып сығарырға ашығалар. "Моабит дәфтәре" исемле фильмды мин бала сағымда илай-илай ҡарай инем. Бына шунда яҙылған уның шиғырҙарында "Шул йәшәүме булыр, "хаин" тиеп, ил битемә минең төкөрһә...", "Һуңғы йырым палач балтаһына башты ҡуйған килеш яҙыла...", тигән юлдарҙы иҫләһәм, әле булһа оҙаҡ ҡына тыныслана алмайым. Шағирҙы немецтар язалап үлтерә, әммә ниндәйҙер мөғжизә менән, уның ҡуйын дәфтәре һаҡланып ҡала. Бына шундай ялҡынлы шиғырҙары арҡаһында, һуғыш тамамланғас, күпмелер ваҡыттан һуң аҡлана ул. Ә инде уның әсирлектән ҡотолоп, тере ҡайтыуын күҙ алдына килтереп ҡараһаҡ - ҡурҡыныс бит! "Һатлыҡ йән", тип, илебеҙ төрмәһендә уны харап итеү ихтималлығы - көн кеүек асыҡ. Был шағир өсөн (дөрөҫөн әйтеү кәрәк) илгә тере ҡайтмауы - хәйерлерәк булғандыр ҙа...

Фашистар ҡулына төшкән тағы бер Советтар Союзы Геройы - генерал Карбышев хаҡында кемдең генә ишеткәне юҡ! Ҡышҡы сатлама һыуыҡта сисендереп, өҫтөнә һалҡын һыу ҡойоп, туңдырып үлтерелгән был генералға ла үлгәндән һуң "герой" исеме бирәләр... Әммә уны, азат ителеп, илгә ҡайтҡан икән тип күҙ алдына килтереп ҡараһаң, тәндәр эҫеле-һыуыҡлы булып китә. Үҙебеҙҙекеләр уны, әлбиттә, туңдырмай, ә башҡа төрлө "еңелерәк" итеп үлтерерҙәр ине, моғайын, тигән уй ғына бер аҙ тынысландырғандай... Әсиргә эләгеп, немецтар тарафынан юғары дәрәжә вәғәҙә ителеп тә, уларға һатылыуҙан баш тартҡан был батыр генералдың тере ҡайтмауы барыбер уның өсөн яҡшыраҡ булғандыр, тигән уйҙамын.

"Изменник Родины" тигән мөһөр баҫылған ошо категория яугирҙарының НКВД лагерҙарында интегеүҙәре хаҡында ла күп ишетеләйбеҙ. Бик һирәктәр генә унан тере ҡайта алған. Хатта яҡташтары ла бындай тотҡонда булғандарҙы йылы ҡаршы алмағанлығы хаҡында хәбәрҙармын. Бала саҡта, күрше ауылдарҙың береһендә бер малайҙы: "Һинең атайың һатлыҡ йән булған бит" , - тип үртәгәндәре хаҡында ишетә торғайным (уның атаһы һуғыш мәлендә әсирлектә булып, һуңынан үҙебеҙҙең төрмәлә ултырып ҡайтҡан булһа кәрәк). Әләкләшкән бала-сага ололарҙан ишеткәнен ҡабатлай инде. Ә өлкәндәрҙең фекерләүе - һәр саҡ заман сәйәсәтенә ярашлы... Әлбиттә, хәрби тотҡондар араһында дошмандарға теләктәшлек белдереп, уларҙа "полицай" булып йә икенсе берәй төрлө хеҙмәт иткән, хатта үҙебеҙҙекеләргә ҡаршы ҡорал күтәреүселәр ҙә булған. Ул - бөтөнләй башҡа мәсьәлә. Бөгөнгө һүҙем ундайҙар хаҡында түгел.

Шулай ҙа батша Рәсәйендә, унан совет ҡоролошонең әле генә башланған осорҙарында әсирҙә булып ҡайтҡандарға насар мөнәсәбәт күрһәтмәгәндәр. Ун дүртенсе йылда "Ярман һуғышында" әсиргә төшөп, бер нисә йыл немец пленында булған Мөхәмәтйән ҡартатайым граждандар һуғышы тамамланғас ҡына өйөнә әйләнеп ҡайтҡан. Илгә ҡайтҡас та һин дә мин йәшәп алған да киткән ул. Пленда булғаны өсөн уны бер кем дә эҙәрлекләмәгән һәм уны "һатлыҡ йән" тип тә атамаған. Хатта, киреһенсә, утыҙынсы йылдарҙа кулаклыҡта ғәйепләп, судҡа саҡырылғас: "Мин - герман пленында булған кеше!" - тигән һымағыраҡ итеп, бер аҙ ғорурланып, судья алдында үҙен яҡлап сығыш яһауы уға ниндәйҙер кимәлдә ярҙам да иткән...

Хөрмәтле ватандаштарым, беҙ әле, әлхәмдүлиллаһ, тыныс шарттарҙа йәшәйбеҙ. Һуғыш тураһында фәҡәт китаптар, кинофильмдар аша ғына беләбеҙ. Ғәйәт ҡатмарлы был тормоштоң, бәғзе ваҡыт үҙебеҙ әллә ни иғтибар итмәгән бихисап төр нескәлектәре булыуы хаҡында ла иҫебеҙҙән сығармайыҡ. Һуғышта "хәбәрһеҙ юғалған" йә, илгә ҡайтып, Себер тайгаларында ятып ҡалған яугирҙарыбыҙҙы ла башҡаларҙан һис кенә лә кәм күрмәйек, тимәксемен. Ҡайҙалыр йыназаһыҙ ерләнгән шундай милләттәштәребеҙ өсөн доғалар ҡылып торайыҡ.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

ЫРЫУЫҢ КЕМ?

# ЫРЫУЫБЫҘ - БАШҠОРТ БАЙЛАРЫ



Байлар ырыуы башҡорт кландары араһында кеше иҫәбе яғынан да, биләгән аҫаба ерҙәренең дөйөм күләме буйынса ла иң эре этник берләшмәләрҙең береһе була. Уның аҫаба территорияһы тарихи Башҡортостандың төньяҡ-көнбайышында үтә ҙур ер майҙандарынан хасил була. Байлар биләмәләренең үҙәге - элекке Минзәлә өйәҙе. Хәҙерге заманда Минзәлә һәм Яр Саллы ҡалалары арауығында байлар ырыуы башҡорттары нигеҙләгән 20-гә яҡын ауыл бар (Татарстандың Туҡай һәм Минзәлә районларында). Бынан башҡа, Минзәлә йылғаһы үҙәнендә, әүәл сарылы-мең башҡорттары ерҙәренә сиктәш булған ауылдарҙа шулай уҡ байлар вариҫтары йәшәй. Әлеге көндә Татарстандың Сарман районында уларҙың 15 ауылы бар. Шулай уҡ Татарстан Республикаһының Аҡтаныш районында ла, гәрәй, бүләр һәм йәнәй башҡорттары ауылдары менән аралаш, бер нисә ауыл Минзәлә байларының тарихи тораҡ пункттары булып тора.

Байларҙың бергә тупланып йәшәгән икенсе бер төбәге - элекке Алабуға һәм Сарапул өйәҙҙәрендә, Кама йылғаһының уң яҡ яры буйындағы ерҙәрҙә. Хәҙерге ваҡытта ошо төбәк байларының 3 ауылы Татарстандың Менделеев районына һәм тағы ла бер нисәһе Агрыз районына ҡарай (бында уларҙың күршеләре - йәнәй ырыуына ҡараған башҡорт ауылдары).

Ыҡ йылғаһы үренең үҙәнендә, элекке Бөгөлмә һәм Бәләбәй өйәҙҙәре сигендә байлар йәшәгән өсөнсө ареал хасил булған. Әүәл улар йәшәгән ерҙәргә йылан ырыуы башҡорттарының аҫаба биләмәләре сиктәш булған, һуңынан байлар-йылан башҡорттары тығыҙ аралашып, ҡатнашып йәшәй башлай. Әлеге көндә был ауылдар Татарстандың Бавлы һәм Ютазы районларына ҡарай. Ә элекке Бәләбәй өйәҙенә ҡараған байлар ауылдары Башҡортостандың Йәрмәкәй, Илеш һәм Туймазы районлары территорияһында урынлашҡан.

Ошо заманға ҡараған ҡайһы бер тарихи документтар билдәле. Мәҫәлән, Ҡаҙан даруғаһы Байлар олоҫонон Турай ауылынан старшина Надыр Килеев командаһы башҡорттары Йәркәй Әсеинов, Хөсәйен Аҙнағолов, Имансар Яҡупов, Мумаҡ (Мәмет) Йоносов, Иҫәмбай Йосопов, Чапдар Сатыковтар Өфө һәм Ҡаҙан өйәҙҙәрендәге уртаҡ аҫаба ерҙәре иҫәбенән үҙ пайҙарын Ырымбур гарнизонының Ҡаҙан драгун полкы поручигы И.Л. Мильковичҡа 500 һумға һатҡанда 7205 (1696) йылдың 5 ноябрендә алынған грамотаға һылтана: "Оная вотчинная земля состоит в Байлярской волости по ниже писанным межам, а именно: рыбным ловлям - первая межа Большое озеро, а нижняя - на низ по Ику реке озера Урла, и сенным покосам - верхняя межа Большое озеро, нижняя - Бережное озеро до озера Теня и по Ику реке по обе стороны да по Шильке речке, вверх в одну сторону да по Кошале речке по одну сторону по Безкечене по обе стороны, с вершины до устья Ику реки, а бортные угодья на Каме реке от устья Ику реки, по обе стороны Камы реки, да за Камой реки, по Ику реки по обе стороны выморок (оставшийся после владельца без наследника), на которую землю отдал я, Мамет, ему поручику Мильковичу, жалованную деду и отцу в 7205 г. ноября в 4-й день из бывшаго в Москве Казанского дворца старинную грамоту, по которой с имеющихся в оной же вотчинной земле рыбных ловель мои паи иметь во владение поручику Мильковичу".

Икенсе бер сығанаҡта (шикәйәт ҡағыҙында) Байлар олоҫона ҡараған башҡа аҫаба ерҙәрҙең сиктәре билдәләнә: "Имеется у нас жалованная от царей предкам нашим земля со всеми угодьями, состоящая за Камою рекою, верхняя межа подле Камы реки Красный Яр, а нижняя межа гора Лоденка по Ижу, по Салагушу речки с вершины и до устья до Ижу по Уфимскую сторону от острова Каратова до Большого озера и по речке по Ижу, а Тыганского и Мензелинского устья по обе стороны реки Ижу и до Усалы-Тамаку и по Мензеле реке вверх по правую сторону до болота Бикасаз с мелкими речками до против того болота за Мензелей межи Калтамони межи Кавзияку речки до дубровы, до по другую сторону болота Бикасаз по речкам по Игине и по Дрюше по правую сторону, и то ниже владение состоит смежностию Булярской и Иректинской волостей и коронною землею дер. Сармашбашевой и Налимовой с прочими деревнями и между ними не было никакого спору и владели каждый своим повытьем и по своими правами особенно, не входя друг к другу в границы. Права наши в межевую кантору представлены. Землемер Добровольский обмежевал земли Салагушевой тюбы Байлярской волости не отдельно, особо, а вместе с Сaралиминской волостью "в одну округу", которые владеют "по одну округу", которые владеют "по особому от нас праву", и обошел как их землю, так и нашу и всю соединил, не различа нас владельцев по правам порознь зделал формальную межу в одну округу". Ошо шикәйәт-ғаризаны биреүселәр үҙҙәренең ышаныслы кешеһенә "Обмежевать нашу землю особою округою" тигән талапты ер межалаусы чиновниктарға еткереүҙе һорай. Һуңынан байлар һәм сарылы-мең ырыуҙары башҡорттары араһындағы ер бәхәсе үҙ-ара килешеү менән тамамлана, ә берләштерелгән олоҫҡа Сарылы-Мең-Байлар исеме бирелә.

1797 йылдың 8 октябрендәге Сенат указында Байлар олоҫона ҡағылышлы тағы бер мәғлүмәт бар, ул шулай уҡ ике айырым ырыуҙың аҫаба ерҙәрен бергә ҡулланыу хаҡында: "...основанным на грамоте 7166 (1657) г. башкирам Байлярской волости всею землею велено владеть с жителями Кыр-Еланской волости вместе".

Татарстан Республикаһының Минзәлә районында байлар ырыуы тоҡомдарының генетик үҙенсәлектәрен асыҡлау маҡсатында махсус экспедициялар ойошторолдо. Байлар ир-аттарының генетик линияһы башҡа башҡорт ырыуҙары ирҙәренекенән байтаҡка айырылып тора. Тикшеренеүгә йәлеп ителгән ирҙәрҙең барыһы ла R1b гаплотөркөмөнә ҡарай, уның субклады - R1b-L2. Шул уҡ ваҡытта R1b гаплотөркөмөнә ҡараған ҡайһы бер башҡорт ырыуҙары вәкилдәренең субклады R1b-U152, ул байлар субкладынан боронғораҡ. Һуңғыһы башҡорттар араһында һирәк осрай. R1b-U152 субклады вәкилдәре Көнсығыш Европала ла күп түгел, Азия илдәрендә юҡҡа иҫәп, улар Италияла, Швейцарияла, Германияла һәм Британияла йышыраҡ осрай.

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ әҙерләне.**

**(Аҙағы. Башы 22-24-се һандарҙа).**

БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 76



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Ирҙәр үлә, башын һала...

Ниһайәт, биш меңлек гарнизонлы Морозовск ҡалаһы ла беҙҙең ҡулда. Йәнә бик ҙур трофей: һуғыш припастары һәм яғыулыҡ (бензин) складтары, 11 паровоз, медикаменттар тулы ике вагон алдыҡ. Фашистар ҡаҙып күмгән соҡорҙо астыҡ, һуғышсыларға күрһәттек: унда рәхимһеҙ язалап үлтерелгән утыҙ ҡатын-ҡыҙ, ҡарт-ҡоро, бала-саға мәйеттәре... Һәр атлының йөрәгендә үс, нәфрәт ҡайнай.

Полктарҙа сафтар һирәгәйҙе, тәжрибәле офицерҙар етешмәй. Өс полкты йәнә бергә ҡушып, берләшкән полк төҙөнөк (командиры Г.Е. Фондеранцев)".

Подполковник Герасим Ефимович Фондеранцев Ҡыҙыл Армияның кадровый офицеры була, Граждандар һуғышында ҡатнаша. Уны 112-се Башҡорт дивизияһына комдив М.М. Шайморатов үҙе һоратып алдыра, 294-се полкҡа командир итеп тәғәйенләй. Уның хаҡында Г.А.Белов та бик хөрмәтләп иҫкә ала: "Г.Е. Фондеранцев тыныс холоҡло, ҙур рух көсөнә эйә кеше ине. Алыштың иң ауыр минуттарында ла бер ҡасан да юғалып ҡалманы. Үҙенең тыныс булыуы һәм ҡыйыулығы менән ул барса полк яугирҙарына һәм офицерҙарына алыштың уңышлы буласағын һеңдерә алды".

Морозовск ҡалаһын азат иткәндән һуң 8-се атлы корпусҡа көнбайышҡа - Донбасс йүнәлешендә һөжүмде дауам итергә приказ бирелә. Алда - байтаҡ дошман көстәре тупланған Тацинский станцияһы һәм Таловский утары. Утар станцияның төньяғында, уны алмайынса, Тацинскийҙы ла азат итеп булмай. Тацинский станцияһын төнгө һөжүм менән алырға ҡарар ителә, әммә был килеп сыҡмай. Станциянан йыраҡ булмаған ерҙә дошман корпус яугирҙарына нығытылған артиллерия һәм миномет позицияларынан көслө ут яуҙыра, оборона алыштары бер аҙнаға һуҙыла. Әммә 14 ғинуарҙа, дошман оборонаһын йырып, беҙҙең яугирҙар Таловский утары янына килеп етә. Подполковник Фондеранцевтың берләштерелгән отрядына утарҙы дошмандан азат итергә, ә 21-се һәм 55-се дивизияларға Тацинский станцияһын атакаларға бойорола.

Ғинуар уртаһы, ҡаты һалҡындар башланған мәл. Юлдарҙы ҡар баҫҡан, атлыларға тәрән ҡарҙы йырып барырға тура килә. Етмәһә, өҫтән бер туҡтауһыҙ ябалаҡлап ҡар ҙа яуа. Яугирҙар Таловский утарына яҡынлашҡас, дошман уларҙы артиллерия һәм миномет уты менән ҡаршылай. Арып-талып, инде тамам йонсоп бөткән яугирҙар туҡтап ҡала, әммә был үтә лә хәүефле була, сөнки дошман уты көсәйә бара. Шул саҡта дивизия штабы начальнигы, полковник Иван Иванович Голенев яугирҙарҙы үҙе атакаға күтәрә. Әммә яугирҙар туранан-тура дошман позицияларына табан бармайынса, уны урап үтеп, немец артиллеристарын флангынан атакалай. Ҡаушап ҡалған немецтар, пушкаларын ҡалдырып, утарға ҡасыу яғын ҡарай. Утарҙа ла паника башлана, дошман һалдаттары окоптарын ташлап ҡаса. Утар азат ителә, 50 немец һалдаты әсиргә алына, 3 төҙөк орудие беҙҙекеләр ҡулына эләгә. 15 ғинуарҙа Тацинский станцияһы ла дошмандан азат ителә.

**Ошо урында йәнә Сабир Ҡадиров хәтирәләренә урын бирәйек:**

"Тәүлек буйына барған ныҡышмалы алыштан һуң дивизияның һалдат һәм офицерҙары арманһыҙ булып арыған, асыҡҡайны. Генерал үҙе лә тәүлек буйына ашамаған. Тацинскийға инеү менән, һуғышсыларҙың тамағын туйҙырып алырға булдыҡ. Барый Сөйәрғолов етәкселегендә политбүлек инструкторҙары бер йортҡа туҡталып, ҡыҙыу мейескә бәрәңге тәгәрәткән. Беҙ генерал менән үтеп барғанда, капитан Н. Камалетдинов беҙҙе тамаҡ ялғап алырға саҡырҙы. Ул өндәшеү менән, генерал: "Нимә? Бәрәңгеме? Була ул!" - тип йәнләнеп китте. Өйгә индек; унда йылы, көлдә бешкән бәрәңгенең тәмле еҫе аңҡый. Генерал, өҫтөн дә һалып тормай, аяғөҫтө килеш: "Донъялағы иң тәмле аш бына ошолай бешерелгән бәрәңге инде ул", - тип уны ҡулына алып, өрә-өрә әрсей башланы. Шул арала ишек асылып, бүлмәгә корпус командиры урынбаҫары генерал Дудко килеп инде; кергән ыңғайға уҡ: "Иптәш генерал, ниңә аҡрын хәрәкәт итәһегеҙ, ашығырға кәрәк!" - тип мыжырға тотондо. Шайморатов: "Юҡты һөйләйһегеҙ, иптәш генерал!" - тип, ҡулындағы ризығын өҫтәлгә ташлап, ашығып сығып китте. Беҙ ауыр хәлдә ҡалдыҡ. Б. Сөйәрғолов бер нисә бәрәңге төрөп, коноводы аша генерал артынан саптырҙы..."

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**

**(Дауамы бар).**

***✓ Башҡорт теле мәктәптә туған тел һәм дәүләт теле булараҡ өйрәнелә. Уҡыусыларҙың барыһы ла тиерлек мәктәпкә республикаға исем биргән халыҡтың телен өйрәнеүе хаҡында белеп килә.***



# МЕҢ САҠРЫМЛЫҠ СӘЙӘХӘТТӘР...

## бер аҙымдан башлана



**Төплө фекерле, үҙе һәм эше генә түгел, ә ысынбарлыҡтың, тормоштоң бөтә өлкәһендә лә "үҙ кеше" булған, киң мәғлүмәтле, төрлө темаға асыҡтан-асыҡ һөйләшә алған әңгәмәсе - хәбәрсе өсөн оло табыш. Шундай геройҙарҙың береһе Наил Радик улы ӘМИНЕВ менән әңгәмәбеҙ ул етәкләгән, ҡыҫҡа ғына ваҡытта үҙен алдыңғы эшмәкәрлек алып барған белем усағы итеп танытып өлгөргән Өфөнөң Дим биҫтәһендәге 162-се "Смарт" полилингваль мәктәбе, уның бөгөнгөһө һәм киләсәге тураһында ғына булырға тейеш һымаҡ ине. Ә фекерҙәр күберәк йәш быуынды тәрбиәләү, педагогтарҙың йоғонтоһо, ғаилә мөхите, хеҙмәт тәрбиәһе тирәһендә төйөнләнде.**

**▸ Мең саҡрымлыҡ сәйәхәттәр ҙә бер аҙымдан башлана... "Бәйләнештә" социаль селтәрендә бөгөн һеҙҙең статусығыҙҙа шундай һүҙҙәр яҙылған. Һеҙ бөгөн баш ҡалала ғына түгел, ә тотош республикалағы иң заманса, иң алдыңғы мәктәптәрҙең береһен етәкләйһегеҙ. Ә шулай ҙа тормош юлығыҙ башы ҡайһы тарафтарға барып тоташа?**

- Эйе, ҙур сәфәрҙәр бәләкәй генә аҙымдан башлана. Дөрөҫөрәге, был аҙымды ни өсөн эшләргә теләүеңде белеүҙән, дөрөҫөрәге, башыңдағы уйындан, ниәтеңдән, асыҡлабыраҡ әйткәндә, һәр уныш, һәр үр, бейеклек маҡсатты, юлды, аҙымыңды дөрөҫ билдәләүҙән баш ала.

Мин сығышым менән Сибай ҡалаһынан. 1993 йылда ҡаланың 13-сө башҡорт мәктәбенә 1-се класҡа уҡырға барҙым. Бөгөн ул Рамаҙан Өмөтбаев исемендәге гимназия тип атала. Ошо абруйлы мәктәптең беренсе сығарылыш уҡыусыһы тигән маҡтаулы исемде йөрөтөүем менән бәхетлемен. Мәктәп директоры Миҙхәт Шәкүр улы Рәжәпов күренекле тарихсы Нияз Абдулхаҡ улы Мәжитовтың һабаҡташы ине. Тап ул беҙҙә башҡорт халҡының данлы тарихына ҡыҙыҡһыныу, ғорурлыҡ хисе уятты. Уның йоғонтоһонда 5-се класта уҡығанда уҡ тарихсы-археолог булыуымды белә инем инде. Ошо хыялым, телэгем мине Башҡорт дәүләт университетының Сибай филиалына тарих һәм филология факультетына уҡырға алып килде. Уҡыу миңә бик оҡшай ине. Унан да бигерәк, археологик экспедициялар мауыҡтырҙы. Беренсе курстан уҡ экпедицияларға сыға торғайныҡ.

Институтты тамамлағас, аспирантураға уҡырға индем һәм Баймаҡ районы Аҡморон ауылынан Рәфис исемле егет менән Өфөгә килеп эш эҙләй башланыҡ. Баш ҡалала мөмкинлектәр күберәк, офоҡтар кинерәк тип уйлағанбыҙҙыр инде. Директорыбыҙ Миҙхәт Шәкүр улы мәктәптә уҡығанда: "Һеҙ булаcаҡ президенттар, буласаҡ министрҙар", - тип тылҡығас ни, бер ай буйы эште республика етәксеһе хакимиәте, министрлыҡ тирәһенән генә эҙләнек. Бер көндө Мәғариф министрлығына ла инеп сығырға булдыҡ, ул ваҡытта министр булып Баймаҡтан Зиннәт Абдулла улы Аллаяров эшләй ине. Беҙҙе, әлбиттә, уға бер кем дә индермәне. Уның сыҡҡанын урамда көтөп торҙоҡ та: "Зиннәт Абдулла улы, беҙ - Баймаҡтан, эш эҙләйбеҙ, һеҙҙең министрлыҡта эшләргә теләйбеҙ", - тип барып өндәштек. Ул беҙгә ҡарап торҙо ла: "Эй, уландар, министрлыҡта эшләү өсөн тәүҙә бер нисә йыл мәктәптә уҡытып алырға кәрәк бит", - тине.

Резюмеларыбыҙҙы тотоп, киттек мәктәптәр буйлап эш эҙләп. Шулай итеп, баш ҡалалағы карьерам урта махсус музыка мәктәбендә тарих уҡытыусыһы булып башланды. Артабан, 2010 йылдан 2017 йылға тиклем, Ф. Мостафина исемендәге 20-се Башҡорт ҡала гимназияһында эшләнем. Уҡытыу эшем менән бер үк ваҡытта аспирантурала белем эстәнем. Фәнни етәксем Айтуған Ирек улы Аҡманов ине, "19-сы быуаттың икенсе яртыһында башҡорттарҙың социаль-иҡтисади хәле" темаһына диссертация яҡланым. 2017 йылда, 30 йәшемдә, Өфөнөң 23-сө мәктәбенә директор итеп тәғәйенләнеләр.

**▸ Һеҙ етәкләгән урта дөйөм белем биреү учреждениеһы Өфөнөң 162-се "Смарт" полилингваль күп профилле мәктәбе тип атала бит инде. Был йүнәлеш мәғариф системаһында яңылыҡмы? Унда етәксе итеп тәғәйенләр алдынан был система тураһында ни белә инегеҙ?**

- Полилингваль белем биреү тураһында мин, әлбиттә, таныш инем. Ул - заман талабы, урыҫ телле булмаған теге йәки был милләт вәкиле ярҙамында телдә өйрәнеү, белем алыу тигәндә аңлата. Билдәле булыуынса, бөгөнгө заманда күп тел белеү үҙ мөмкинлектәреңде яҡшыраҡ, киңерәк бойомға ашырырға булышлыҡ итә. Төрлө тел белеү, улар ярҙамында иркен аралашыу бөгөнгө конкурентлыҡ шарттарында ла бик мөһим. Шуға күрә полилингваль мәктәпкә барған уҡыусылар өсөн был - сифатлы һәм тейешле белем алыуҙың ҙур мөмкинлеге. Республикала юҡҡа ғына полилингваль мәктәптәр асыуға ҙур иғтибар бүленмәй.

Баш ҡаланан тыш, Нефтекамала, Стәрлетамаҡта эшләй башланы ундай мәктәптәр. Шулай уҡ башҡа райондарҙа ла асылыуы көтөлә.

Беҙҙең мәктәптә урыҫ, башҡорт һәм бер нисә сит ил теле өйрәнелә, уҡытыу бер нисә телдә алып барыла, ҡайһы бер предметтар билингваль нигеҙҙә уҡытыла. Бынан тыш, Башҡортостан, Рәсәй һәм донъя халыҡтарының мәҙәниәте киң өйрәнелә. Был төңгәлдә беҙ "Халыҡтар дуҫлығы йорто" менән тығыҙ бәйләнештә эшләйбеҙ. 5-се кластан профилле белем биреү башлана. Математика, информатика, химия, биология кеүек фәндәр тәрән өйрәнелә.

Өлкән кластарҙа социаль-иҡтисади, химия-биология, шул иҫәптән медицина профилдәре бойомға ашырыла. Был йүнәлеш буйынса мәктәп Башҡорт дәүләт медицина университеты менән хеҙмәттәшлек булдырҙы.

Мәктәп "тулы көн" тәртибендә эшләй, балаларға шәхси үҫеш өсөн киң мөмкинлектәр бирелә, улар төрлө түңәрәктәр, студиялар, секцияларҙа шөғөлләнә.

**▸ Күп телдәр өйрәнелгән был мәктәптә башҡорт теленә ниндәй урын бирелә?**

- Уҡыусының ихтыяжынан, мөмкинлегенән сығып, программаны үҙебеҙ төҙөйбеҙ, тип әйткәйнем инде. Башҡорт теле мәктәптә туған тел һәм дәүләт теле булараҡ өйрәнелә. Уҡыусыларҙың барыһы ла тиерлек мәктәпкә республикаға исем биргән халыҡтың телен өйрәнеүе хаҡында белеп килә, сөнки документ тапшырған ваҡытта уҡ уның ата-әсәһе был хаҡта ғариза яҙа. Кластан тыш саралар өс телдә, йәғни башҡорт, инглиз, урыҫ телдәрендә алып барыла.

**▸ Хәҙер мәғариф системаһында инновацион майҙансыҡ тигән термин бик популяр. Был йәһәттән һеҙҙең мәктәптә ниндәй майҙансыҡтар эшләй?**

- "IT-куб" балаларға һанлы белем биреү үҙәгенең эше унышлы алып барыла. Ул Рәсәй күләмендә тормошҡа ашырылған "Мәғариф" милли проектының "Һанлы белем биреү мөхите" федераль проектына ярашлы тормошҡа ашырылды. Уҡыусыларҙа мәғлүмәт технологиялары өлкәһендә күнекмәләрҙе һәм компетенцияларҙы үҫтереүгә йүнәлтелгән. "IT-куб" үҙәге заман талап иткән көнүҙәк белемдәрҙе, мәғлүмәти һәм телекоммуникациялар өлкәһендәге мөмкинлектәрҙе тиҙләтелгән алымда өйрәтеүҙе, IT-өлкәлә гәмәли эшмәкәрлеккә ылыҡтырыуҙы, техник һөнәрҙәрҙе популярлаштырыуҙы, уҡыусыларҙы IT-технологиялар һәм IT-инжиниринг менән ҡыҙыҡһындырыуҙы төп маҡсат итеп ҡуя.

Үҙәк түбәндәге йүнәлештәр буйынса уҡыуҙар алып бара: Python телендә программалау, мобиль ҡулланмалар, VR/AR-ҡушымталар эшләү, Java телендә программалау, кибергигиена һәм күләмле мәғлүмәттәр менән эшләү, алгоритмика һәм логика нигеҙҙәре, роботтар программалау. Унда си-

***Полилингваль белем биреү тураһында мин, әлбиттә, таныш инем. Ул - заман талабы, урыҫ телле булмаған теге йәки был милләт вәкиле ярҙамында телдә өйрәнеү, белем алыу тигәндә аңлата. Билдәле булыуынса, бөгөнгө заманда күп тел белеү үҙ мөмкинлектәреңде яҡшыраҡ, киңерәк бойомға ашырырға булышлыҡ итә. Төрлө тел белеү, улар ярҙамында иркен аралашыу бөгөнгө конкурентлыҡ шарттарында ла бик мөһим. Шуға күрә полилингваль мәктәпкә барған уҡыусылар өсөн был - сифатлы һәм тейешле белем алыуҙың ҙур мөмкинлеге. Республикала юҡҡа ғына полилингваль мәктәптәр асыуға ҙур иғтибар бүленмәй.***

фатлы яңы инфраструктура һәм матди-техник йыһазландырылыуҙың юғары кимәле булдырылған тиһәм, бер ҙә арттырыу булмаҫ.

"Уңышҡа юл" проектының уңышлы ғәмәлгә ашырылыуын да билдәләп үткем килә. Унда уҡыусылар үҙенең тырышлығы менән уңышҡа өлгәшкән кешеләр менән осраша, тормош һабаҡтары, кәңәштәр ала. Беҙҙә республиканың төрлө йәмәғәт ойошмалары, хөкүмәт, министрлыҡ вәкилдәре ҡунаҡта булды. Шулай уҡ йәш быуын араһында абруй ҡаҙанған сит ил кешеләрен дә саҡырабыҙ. Мәҫәлән, джиу-джитсу буйынса донъя чемпионы Джефф Монсон оҫталыҡ дәресе үткәрҙе. 1-11 кластың уҡыусылары легендар спортсы менән осрашыуҙан бик ҡәнәғәт ҡалды. Спортсы үҙе лә беҙҙең мәктәпте оҡшатты, хатта бушлай күнекмә үткәрергә теләк белдерҙе. Билдәле шәхестәр, алдынғы ҡарашлы кешеләре менән күрешеп, аралашыу уҡыусыларҙың артабанғы уңышы, еңеүе өсөн этәргес-мотивация буласағына ышанам. БДУ менән Предуниверсарий төҙөү тураһында килешеү төҙөнөк. Был яңы структура уҡыусыларға һөнәри һәм дөйөм мәҙәни әҙерлекте гарантиялаған социаль-педагогия системаһы булыр һәм, әлбиттә, мәктәпте тамамлағас, университетта уҡыуҙы дауам итеү өсөн һөнәри йүнәлеш бирер, тип ышанам.

**▸ Ғөмүмән, перспективалы йүнәлешме был системалағы белем биреү? Сит илдәрҙә, киреһенсә, беҙҙәге совет заманының уҡытыу алымдарына күсәләр түгелме?**

- Сит илдәрҙә уҡытыу нисек ойошторолғаны хаҡында бер нәмә лә әйтә алмайым, әммә полилингваль мәктәптәрҙә баланың һәләтен төрлө яҡлап асҡан, үҫтергән киләсәк белем биреү учреждениеһы тип күҙ алдына килтерә алам. Полилингваль мәктәптәр - киң белем алыу мөмкинлеге. Бала ни тиклем күберәк тел белһә, уға бөгөнгө заманда шул тиклем күп юл асыҡ һәм шулай уҡ донъяның теләгән юғары уҡыу йортона инеү мөмкинлеге лә ул.

**▸ Мәктәптә балалар менән эшләү һеҙгә ни яғы менән оҡшай? Нисек уйлайһығыҙ, теге заман балалары менән был заман балалары араһында айырма бармы?**

- Һәр быуын балалары араһында айырма бар, әлбиттә. Заман башҡа - заң башҡа, хәҙергеләргә мотлаҡ икенсе төрлө тәрбиә, белем биреү алымдары кәрәк. Бөгөнгө педагогтарға бик күп белеү мөһим. Үҙең уҡытҡан фән буйынса ғына түгел, бөгөнгө ысынбарлыҡ, сәйәсәт, ваҡиғалар, ғөмүмән, бөтә яҡлап балаларҙан күберәк белеүҙе, бар йәһәттән өлгөрөрәк, мәғлүмәтлерәк булыуҙы ваҡыт үҙе талап итә. Гаджеттар, смартфондарҙың мөмкинлеген уҡыусыларҙан да яҡшыраҡ аңлау зарур уҡытыусыға.

**▸ Йыш ҡына хеҙмәт тәрбиәһенең арттҡы планға күсеүенә борсолоу белдерелә. Ысынлап та, ҡаҙау ҡаға ла белмәгәндәр ишәйә хәҙер. Физик эшкә белеүселәр бөтөп бара...**

- Беҙҙең мәктәптә тәрбиә эше төрлө яҡлап алып барыла. Хеҙмәт тәрбиәһенә айырыуса ҙур иғтибар бүленә. Үҫмерҙәр өсөн слесарь, столяр оҫтаханалары, ҡыҙҙар өсөн йорт эштәрен алып барыу, кулинария, кейем бесеүтегеү кабинеттары бар. Мәктәптә шулай уҡ робототехника лабораторияһы булған инженер-технология профиле, 3Д моделләштереү кабинеттары йыһазландырылған. Телестудия, нәшриәт үҙәге, дизайнерҙар студияһы, тренажер залы эшләй. Быларҙың барыһы ла йәш быуындың төрлө яҡлап һәләтен асыу менән бергә ижади эшләү мөмкинлеген дә бирә. Уҡыусылар мәктәп биләмәһендә ниндәй эш бар, бөтәһен дә эшләй: ҡар ҙа көрәй, өмәләрҙә лә ҡатнаша. Булдыҡлылыҡ, яуаплылыҡ, егәрлелек кеүек эшлекле сифаттар тәрбиәләүгә өҫтөнлөк бирелә. Киләсәктә был белем биреү учреждениеһы ил мәғарифының күркәм традицияларын һаҡлаған иң яҡшы мәктәптәрҙең береһе булыр тип ышанам.

Беҙҙең мәктәптә шулай уҡ илһөйәрлек тәрбиәһенә етди иғтибар бүленә. Быйыл Рәсәй Геройы Миңлеғәли Шайморатов исемендәге класс ойошторолдо. Был кластарға иң өлгөлө, уҡыуҙа һәм тәртип йәһәтенән алдынғы уҡыусылар ғына һайлап алына. Унда уҡығандар телде, тәбиғи фәндәрҙе өйрәнә, хәрби һәм спорт йүнәлештәре буйынса шөғөлләнә.

**▸ Күп тел белгән, шул телдәрҙә ирҡен аралашҡан һеҙҙең сығарылыш уҡыусылары иң яҡшы балаларыбыҙҙың йәки кадрҙарҙың сит илгә китеүен тиҙләтер тип уйламайһығыҙмы? Әгәр ҙә шулай икән, был шауҡымды нисек туҡтатырға?**

- Беҙ ҡыҙҙарҙы һәм егеттәрҙе күп тел белергә, әммә үҙебеҙҙең республикала файҙалы кеше булырға кәрәк тип тәрбиәләйбеҙ. Үҙҙә әйтеп китеүемсә, үҙеңең Ватанына һөйөү, ғорурлыҡ хисе күңдерергә тырышабыҙ. Күңелендә патриотик рух йөрөткәндәр сит тарафтарға китмәй ул, тип иҫәпләйем. Шулай уҡ юғары квалификациялы кадрҙарҙы ҡулдан ысҡындырмайым тиһәң, эш хаҡын арттырыу мөһим. 15-18 мең һумға нисек йәшәргә? Нисек ғаиләне аҫрарға? Нисек балалар уҡытырға? Кешесә матур итеп йәшәргә теләгән кеше, әлбиттә, был эш хаҡына риза түгел. Мәктәптәрҙә, белем биреү учреждениеларында ир-егеттәр бик кәрәк. Уларҙы мәғариф өлкәһенә йәлеп итеү өсөн тик эш хаҡын күтәреп кенә өлгәшергә мөмкин, минеңсә.

**▸ Етәксе кешенең ҡулы аҫтында эшләгәндәргә уңайлы шарттар тыуҙырыу, учреждениеның матди-техник базаһын яңыртыу, уҡыусыларға белем алыуҙың яңы төрҙәрен, алымдарын, мөмкинлектәрен эҙләү, табыуҙан тыш, яраткан ғаиләһенә, шөғөлдәренә ваҡыты ҡаламы?**

- Һәр нәмәнең үҙ ваҡыты, үҙ мәле бар. Әммә нимәләр өлгәшергә уйлаһаң, тормошоңдо түңәрәк иткән, бәхетле-ҡотло иткән бөтә нәмә лә һәр ваҡыт хәрәкәттә булырға, әйләнеп торорға тейештер, тип уйлайым. Ни өсөн тигәндә, был донъяла бөтә нәмә бер-береһенә бәйле. Уларҙың барыһы ла, йәғни ғаиләң ғаилә урынында, эшең эш урынында булып, бер тигеҙ, йәнәшә булғанда ғына бөтә өлкәлә лә уңышҡа, ниәтеңә өлгәшергә мөмкин. Ҡатыным Әлфиә - Әхмәт Дәүләтов исемендәге Өфө кәсепселек һәм сервис колледжы педагогы. Мәрйәм исемле ҡыҙ үҫтерәбеҙ. Ул полилингваль балалар баҡсаһына йөрөй, өйҙә беҙҙең менән тик башҡортса ғына һөйләшә, шул уҡ ваҡытта урыҫсаһы ла бик яҡшы. Дөйөм үҫеш өсөн 3 йәше тулғас, бейеүгә бирергә ниәтләйбеҙ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Мең саҡрымлыҡ сәйәхәт бер аҙымдан башлана... Һәм был юл һәр кем өсөн асыҡ. Иң мөһиме - ниндәй маҡсат билдәләйһең, ти Өфөнөң Дим биҫтәһендәге 162-се "Смарт" полилингваль мәктәбе директоры Наил Радик улы Әминев. Бик дөрөҫ һүҙҙәр.**

**Лена АБДРАХМАНОВА**
**әңгәмә ҡорҙо.**

ҺАБАҠТАР

# УПҠЫН СИТЕНДӘГЕЛӘРҘЕ...

## ҡанат аҫтына алайыҡ



**Танышыуыбыҙ ҡыҙыҡ ҡына башланды уның менән. Юл буйы сығынсылап, эргәһендәгеләрҙе этеп-төртөп килгән бер үҫмер, яңылышмы, әллә бер нисә тапҡыр үҙенә иҫкәрмә яһап, тыйып килгән ҡатындан үс алыу ниәтенәнме, терһәге менән төртөп, күҙлеген төшөрөп сығып китте автобустан. Ҡатын танау аҫты ла кипмәгән ошо бала алдында көсһөҙләгән тойоп, эргә-тирәһендәгеләрҙән ярҙам һорағандай яҡ-яҡҡа ҡараны ла: "Педагогҡа оҡшап тораһығыҙ. Әйтегеҙ әле, ошо осраҡта нимә эшләһәм, дөрөҫ булыр ине. Артынан йүгереп төшөп, ҡолағын бороорға тейеш инеммe?" - тип, миңә төбәлде.**

Теге үҫмерҙең ҡылығына йәнем көйөүгә ҡарамаҫтан, бер нәмә өндәшмәй килеүемә уңайһыҙланып, һөнәрем буйынса уҡытыусы булһам да: "Журналиспын", - тип яуап бирҙем.

- Улайһа, минең һеҙгә һөйләй торған нәмәләр бик күп, - тине лә, пандемияға бәйле автобуста социаль дистанция һаҡланырға тейеш булһа ла, ҡатын эргәмдәге буш урынға күсеп ултырҙы.

Ханым минән саҡ ҡына өлкәнерәк. Күрше өлкәлә шәхси эше менән шөғөлләнеүе, дөрөҫөрәге, әлеге малай кеүек тәртип ҡағиҙәләрен белмәгән үҫмерҙәрҙе тәрбиәләү буйынса үҙ эшмәкәрлеген асыуы хаҡында һөйләне.

- Мин был баланы, әлбиттә, бер нәмәлә лә ғәйепләргә йыйынмайым. Бында ата-әсәһе, әгәр булһа, йә үҫкән, уҡыған, дуҫлашҡан мөхите ғәйепле, - тине. - Уның кеүектәрҙе тормошомда бик күп күрҙем. Ваҡытында асыҡлап, дөрөҫ юлға баҫтырырға мөмкин, тик бөтә йәмғиәт менән эшләргә кәрәк быны. Юғиһә, йә енәйәтсе, йә наркоман, йә үҙе енәйәт ҡорбаны булыуы мөмкин. Быны мин үҙемдең тормошом миҫалында ла иҫбатлай алам.

Ҡайны берҙә дуҫына ла һөйләмәҫ серенде бөтөнләй белмәгән, яңы күргән кешегә асаһың да һалаһың бит. Был ҡатындың да шулай булды, шикелле. Ә, бәлки, тормош сәхифәһен, башҡаларға һабаҡ булһын тип, береһенән дә йәшермәйҙер ҙә. Шулай ҙа булыуы мөмкин.

- Институтты тамамлаған йылды, дуҫлашып йөрөгән егетем барлығын белһә лә, ҡалала йәшәгән курсташым, яратыуын белдереп, артымдан ҡалмай башланы. Эскән тиһәң, есе сыҡмай, үҙе айыҡ кешегә лә оҡшамағанына иғтибар иткәйнем инде. Утыҙ йыл элек наркотик, наркоман тигәндә нәфис фильмдарҙа ғына күргәс, эргәмдә "энә"лә ултырған кеше йөрөй тип башыма ла инеп сыҡмай. Бер аҙҙан уҡыу йортонан дөйөм ятаҡҡа тиклем оҙатып йөрөүенә лә күнектем. Уның кисерештәрен, тойғоларын хөрмәт итеүем, әммә йөрәгем икенсе кешене һайлауы хаҡында аңлаттым.

Аңлашылмаусылыҡ килеп сыҡмаһын тип, уның хаҡында егетемә алдан әйткәйнем инде. Яңыраҡ ҡына уның әсәһен ерләүен, йәлләүем хаҡында белдерҙем. Һөйгәнем башта иғтибарға алманы, миңә ышаныуын әйтте. Әммә бер аҙҙан институт һәм дөйөм ятаҡ араһында көн дә һағалап тороуын оҡшатмай башланы. Сираттағы тапҡыр үҙенең ятарыуын белдереп, бер алдыма, бер артыма сығып килә ятҡанында егетем килеп сыҡты. Ике ҙур көс араһында ҡалдым: беренсеһен асыу, ятарыу, көнләшеү бергә уҡмашып, көслө итә, икенсеһе наркотик йоғонтоһонда ғәйрәтле ине. Һөйгәнем физик яҡтан ныҡлыраҡ булып сыҡты. Тегенең яғаһынан алып, ергә бәрҙе. Курсташым хәрәкәтһеҙ ҡалды, әгәр йән бирһә, һөйгәнемдә алда ниндәй хәүеф көтөүен белеп, ергә тубыҡландым да: "Ас инде күҙеңде, ас, зинһар, йәшә, үлмә! Мәңге һинеке булырмын!" - тип ялбара башланым. Бер уҡ һуҙҙарҙе ҡабатлап, күпме ултырғанмындыр, белмәйем, бер ваҡыт иплән кенә уның күҙҙәре асылды. "Ысын әйтәһеңме, үлмәһәм, минеке булаһыңмы?" - тип миңә төбәлде. Оҙаҡ йылдар үткәс кенә ошо һорауҙы биргәндә уның сырайында мыҫҡыллы йылмайыу барлығын сырамыттым. Ул юрамал беҙҙе ҡурҡытыу өсөн шулай алдап ятҡан булып сыҡты.

Әйткән һүҙ - атҡан уҡ, уны кире алып булмай. Ул заманда атеизм сәскә атһа ла, күңел барыбер нимәләр барлығына ышана ине бит. Мин дә йәшлегем менән ялбарыуымды ҡүктән ишеттеләр ҙә, курсташым күҙен асты, тип ышандым. Артабанғы тормошомдоң нисек барыуын күҙ алдына килтерәһегеҙҙер инде. Тәүҙә бик матур башланып китте, әлбиттә. Ҡаты ауырыуҙан вафат булды, тигән әсәһе лә шап-шаҡтай йөрөп ята ине. Баҙарҙа сауҙа нөктәһе бар. Атаһы баш ҡаланың эре предприятиеларының береһендә, етәксе уҡ булмаһа ла, ярайһы ҙур ғына бүлекте етәкләй. Ике яҡтан да күп кеше саҡырып, заманына күрә бик елле туй үткәрҙек...

Ғөмүмән, тормош китабымдың ошо биттәрен асырға яратмайым. Шуны ғына әйтергә теләйем: бала тәрбиәләгәндә ҡыҙмы ул йәки улмы, атай менән әсәй бер төптән булырға тейеш. Береһе тыйғанда, икенсеһе арҡаһынан һөйөп тормаһын. Атаһы-әсәһе яғынан тейешле иғтибар булмаһа, баланы урам үҙенең ҡосағына алырға ғына тора. Мин кейәүгә сыҡҡан ул егет тә мәктәптә уҡығанда уҡ насар компанияға эләгә. Әгәр йәмғиәт, йәғни уҡытыусылар, тәрбиәселәр, ололар уны ваҡытында үҙ ҡанаты аҫтына алһа, фажиғә лә булмаҫ ине. Йәнлектәр, ҡоштар донъяһында ла бындай тәрбиә ысулы бар бит: ҡарауһыҙ ҡалған йән эйәһен башҡалар һыйындыра...

Таныш түгел ханым менән һөйләшкәндән һуң мин дә шундай һығымта яһаным: бына әле автобустағы ғәм халыҡ юл буйы анау үҫмерҙең ҡылығына асыуы килһә лә, өндәшмәй генә, ситтән күҙәтеп килде. Ошондай осраҡта бигерәк тә ир-егеттең аҡыллы һүҙе кәрәк ине. Тик ниңәләр улар һәр саҡ битарафлыҡ, ғәмһеҙлек күрһәтә. Күп тапҡыр инанғаным бар: яҡының көн һайын әйтеп, башыңа инмәһә лә, сит кеше әйткән иҫтә ғүмергә ҡала бит ул. Айырыуса бала саҡта... Битараф булмайыҡ әле бала тәрбиәһендә, тип кенә әйтергә теләгәйнем.

**Ләйсән СӘЛИХОВА.**

✓ *Һуғыштың тәүге йылында уҡ, Волга ярҙарындағы ҡаты бәрелештәрҙең береһендә әсиргә эләгеп, һуғыш бөткәнсе лагерҙарҙа йөрөп ҡайтып инде ул. Яраһы - фашист конвойсыһы һуғыуҙан ҡалған эҙ.*



**Яҡташым, йәшлек дуҫым мәрхүм Нияз МӘҺӘҘИЕВтың "Өҙөлгән сымдар" тигән был хикәйәһенә рецензияны мин Әзербайжанда әрмелә хеҙмәт иткәндә яҙғайным. Был яҙманы яңыраҡ Зөһрә апай Ҡотлогилдина Нияздың шәхси архивынан табып бирҙе. Унда әрменән яҙған хаттарым да һаҡланған. Дуҫымдың баҡыйлыҡҡа күскән яҙ айында "Өҙөлгән сымдар" хикәйәһенең уҡыусылар хөкөмөнә тәҡдим итергә булдым. Әҙәби тормош менән янып йәшәгән йәш саҡтарыбыҙҙың бер иҫтәлеге лә ул яҙмалар.**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**




Әхмәтйән, башҡаныҡына ла үрелмәйем, үҙемдекен дә бирмәйем, тигәнерәк холоҡло кешеләр рәтенән булып, һуғышҡа тиклем үҙенең бейек ҡойма-кәртә менән уратып алынған йорт-ҡураһы эсендә ҡасан ҡарама үҙ алдына ер ҡорто кеүек соҡоноп йәшәп ятты. Эйе, ер ҡорто ине ул. Ағас-япраҡ ҡарышлауыҡы һымаҡ, һутлы япраҡтар кимермәне был ҡорт, ә ерҙә соҡсондо... Күп итеп йәшелсә-емеш үҫтереп, мал тотоп йәшәп ятты.

Бүтәндәр эшенә ҡыҫылманы, бүтәндәр байлығынан да көнләшмәне. Ләкин үҙенекен ныҡ тотто: һығып-ҡыҫып сығарҙы. Аҡсаһын да тинентингә ялғап йыйып барҙы. Әйтерһең дә, шул баҡсанан емеш йыйып аламы ни! Ҡатыны, төп ат янына егелгән мисәүҙәй, ул тартһа - тартып, ул көсәнһә- көсәнеп, иренең ыңғайына ғына, үҙ "зонаһында" - аласыҡ-өй тирәһендә эшсән генә эштерҙәп йөрөп ятты. Ҡырысыраҡ холоҡло Әхмәтйән ошо ҡамап алынған бәләкәй генә батшалыҡта үҙе бер хаким - ҡурҡа ла, ихтирам менән тыңлай ҙа ине ҡатыны уны. Ҡуйы ҡаштар аҫтына йәшеренгән, ҡайсаҡ арып тоноҡланған, ҡайсаҡ баҙлаған ике күҙ ай менән ҡояш уға.

Әхмәтйән бәләкәйҙән ситтәрәк йөрөгәс, тиҫтерҙәре менән аралашманы. Улары, етмәһә, үҙҙәре ситләште - "мулла малайы" тип йөрөттөләр, яйы сыҡҡанда, әләктереп тә алдылар... Юҡ, уның атаһы мулла булманы, ләкин ғүмере буйы ошо тирә ауылдарына танылған бер мулла менән әшнәләште. Шунлыҡтан, йыш ҡына бәләкәй Әхмәтйәнде дилбегәгә ултыртып, ул-был ергә барырға тейешле әшнәһе ҡарамағына бирер ине. Уның атаһы, үҙ ауыл кешеһе булып, күҙгә салынып бармағас, Әхмәтйәнде мулла менән күберәк күрҙеләр малайҙар.

Бына шулай, "мулла малайы" булып китте. Хәйер, мулланан һәм атаһынан ҡалған әҙ генә буш ваҡытын да ул баштараҡ малайҙар менән уҙғарырға тырыша ине. Тик тегеләре генә үҙһенмәнеләр. Шулай ипләп-ипләп кенә "мулла малайы" уларҙан ситләште. Кәләште лә ситтән алды. Шул малайҙар, һуңғараҡ инде егеттәр, "кәләште лә мулла алып бирҙе" тиешеп йөрөнөләр. Дөрөҫ түгел ине был. Мулла алып бирмәне уға кәләште. Ҡыҫылышы бар-барын. Мулла менән йөрөгәндә шул малайҙарға ҡарағанда күберәк донъя күрә ине Әхмәтйән. Шулай, бер ауылға барғас, мулла ингән өйөндә бигерәк оҙаҡлап китте. Әхмәтйән уны кашауай санала көтә торғас, өшөнө, асыҡты. Иҫкемоҫҡо ғына кейем ҡаршылыҡ күрһәтә алмайынса, ғинуар һыуығын әллә ҡайҙарға електәргә тиклем үткәреп ебәргәйне. Аслыҡ икеләтә бәрә. Шул саҡ өйҙән аҡһыл йөҙлө бер ҡыҙ баҙнатһыҙ ғына атлап килеп сыҡты ла: "Асыҡҡанһыҙдыр", - тип, ҡалын телем икмәк, яртыһы һындырып алынған кәнфит бирҙе. Уның ашап бөткәнен һүҙһеҙ генә ҡарап торғас, йомшаҡ ҡына атлап өйгә инеп китте. Әхмәтйәндең күҙ алдында ҡыҙыҡайҙың еңдәре ямалған ҡыҙыл пальтоһы ғына тороп ҡалды. Ошонан һуң килгәндә лә ҡыҙыҡайҙы гел күрҙе ул. Аҡһыл йөҙөндә ҙур ҡара моңһоу күҙҙәре, гел өндәшмәҫ төҫһеҙ ирендәре генә хәтерендә. Аҙаҡ, егет ҡорона ингәс, яусылатып алды ла ҡуйҙы был сабыр ғына аҫырау ҡыҙҙы.

Малайҙарҙың Әхмәтйәнде яратмауҙарын да күрә алмау тип әйтеп булмай. Ни тиһәң дә, ул аңра һәм сырылдаҡ, ошаҡсы Сафа түгел бит инде. Шулай ҙа Әхмәтйән әкренләп тиңдәштәренән ситләште. Ә ғаиләһе менән йәшәй башлағас, хәҙер инде үҙ донъяһы булған ирҙе төрлөһө төрлө ерҙә эшләп, төрлө вазифаға теҙелгән йәштәштәре менән бөтөнләй тиерлек бер нәмә лә бәйләмәй ине. Колхоз тормошо... Юҡ, Әхмәтйән һис һүҙһеҙ унан баш тартты: унда инеп байлыҡ таратырға...

Һуғыш башланды. Илгә ауыр һынау булған һуғыш килде. Яуға оҙатылған ирҙәр баҫыу ситенән билдәһеҙлеккә атланы...

* * *

...Оҙайлы дүрт йыл буйы барған ғазаплы, ҡот осҡос ауыр, ғәйәт ҙур күләмле эш, эйе, хаҡы тик ғүмерҙәр һәм ҡайғылар менән генә түләнгән утлы ғәрәсәт-һуғыш, бер мәл килеп туҡталды. Ауыр тамға булып, ҡанлы яра булып кешелек тарихына күсте.

Туптар гөрһөлдәүенән, үлем сыйнауынан арыған, ҡоралдаш дуҫтарын юғалтыу кисерештәренән әсенгән, осо-ҡырыйы күренмәгән һуғыш утын үткән, бер-береһенә оҡшаш ниндәйҙер уртаҡ һыҙаты булған һалдаттар, йәһәннәм упҡынынан арынып, тыныслыҡ тигән ҡояш аҫтына сыҡты. Шул тынлыҡтан ҡапыл шаңҡыбыраҡ ҡалған яугирҙарҙы шау-шыулы, илау-көлөүле, ҡыуаныслы-ҡәһәрле Еңеү байрамы үҙ ҡосағына алды. Был байрам үҙе, бик күпте кисергән һәм юғалтҡан, ләкин сикһеҙ һөйөнгән бер тере йән кеүек, меңәр-меңәр кешеләр ауыҙы менән шаулап-гөрләп, һирәгәйешеп ҡайтҡан һалдаттарын Киев, Смоленск, Мәскәү һәм йөҙҙәрсә бүтән ҡалаларҙа тулҡын-тулҡын булып ҡаршылап-оҙатып торҙо.

Еңеүселәр тыуған яҡтарына яҡынлаған һайын, был тулҡындар берсә көсәйеп, берсә сайпылып ҡына һүрелеп, икенсе планға күсә торҙо. Тере ҡалғандар өсөн беренсе урынға инде хәҙер артабанғы тормош, бөлгән хужалыҡтарҙы күтәреү ысынбарлығы килеп баҫты. Уларҙы, тәүге ике дәү тулҡын да - үлем тулҡыны һәм һуғыш та, йылы, өмөтлө Еңеү ҙә - артҡа сигенеп, тынып ҡалған ауылдар, бөлгән хужалыҡтар, ел-ямғырға таушалып үҙгәргән, әйтерһең дә, үҙҙәре һуғышта ҡатнашҡан өйҙәр-аласыҡтар ҡаршы алды. Уларҙың берәүҙәренән ҡосаҡтарын йәйеп, күҙ йәше аша йылмайып йонсоған һәм күпкә өлкәнәйгән туғандары атылып сыҡһа, икенселәренән бары тик сикһеҙ юғалтыуҙарҙан һыҙылған үкһеүҙәр генә ишетелде...

...Байтаҡҡа һуңлап ҡайтып төштө һуғыштан Әхмәтйән дә. Тик, күптәр кеүек орден-миҙалдарын сыңлатып, йәки буш еңен ҡайыш аҫтына ҡыҫтырып, еңеүселәрсә йылмайып, ғорурлыҡ менән ҡайтып инмәне... Белә ине ауылдаштары - һуғыштың тәүге йылында уҡ, Волга ярҙарындағы ҡаты бәрелештәрҙең береһендә әсиргә эләгеп, һуғыш бөткәнсе лагерҙарҙа йөрөп ҡайтып инде ул. Аяҡ-ҡулы имен ине уның, ә яраһы - фашист конвойсыһы һуғыуҙан ҡалған эҙ, уң ҡашынан алып сикәһенә тиклем һуҙылған йөй. Был йөй уға, ҡашын емереп торған төҫ биреп, йөҙөнә сикһеҙ һағыш билдәһе һала ине. Эйе, аяҡ-ҡулы имен, тик күңеле яралы...

Ҡуҙҙай әрнегән күңелендә баяғы яранан ҡала, күренмәҫ, ләкин унан да тәрәнерәк йәрәхәттәр бар ине. Ауылдаштары тын ғына ҡаршы алды уны. "Ә-ә-ә, ҡайтҡанһың икән..." - тине берәүһе. Әйтерһең дә: "Минеке ҡайтманы, ә һин ни эшләп ҡайттың?" - тигәндәй ине. Әсирҙә булғандарға айырым ҡараш ине шул. Кешеләрҙең бәғер яраһы асыҡ, аҙ ғына ҡуҙғатһаң да, ярһып һыҙларға тотона - үҙҙәре лә ярһып китмәгәйе...

Әхмәтйән өсөн өсөнсө тулҡын башланды. Һалҡын тулҡын... Хәйер, өсөнсө түгел, дүртенсе: тәүгеһе - һуғышҡа тиклем булған, былай ҙа булған ситләшеүҙәр.

Барыһын да аңланы Әхмәтйән. Әсиргә тиклем, танкыларға ҡаршы бәрелештә алған "Батырлыҡ өсөн" миҙалын да төпкәрәк йәшерҙе.

Хәлде ярты һүҙҙән, ҡайсаҡ яман итеп бер ҡарауҙан төшөнгән ҡатыны бер ни төпсөнмәне. Күҙ йәшен һөртә-һөртә, яурындары уңған ниндәйҙер күкһел-көрән пинжәк кейгән, йоҡарып ҡалған, әллә нисек ятһыраған иренә ара-тирә ҡарай-ҡарай сәй әҙерләне ул.

...Бер ярҙамсыһы, балалары булмаһа ла, йүнсел ҡатын донъяны бар көсөн һалып, бөтөн тоторға тырышты. Һуғышҡа китер алдынан иренең: "Урыҫ Иванды еңерҙәй ил юҡ әле донъяла. Ә беҙ уның менән... Һуғыш булыр ҙа бөтөр, ә һин малды ныҡ һаҡла, нужа барыбер әйләнеп килер ул..." - тиеп ныҡ итеп әйткәненән ситкә тайпылманы, бар хәлен һалды: мотлаҡ булған һалымдарҙы ыңғыраша-ыңшый түләне, өҫтәмә заемдарҙан баш тартты.

...Сәй эскәс, Әхмәтйән тупһаға сыҡты. Береһенә лә барып күренеп тормай (кемдәр ҡайтты, кемдәр ҡалды - ҡатыны сәй артында уҡ, ҡурҡыу ҡатыш тауышын яулыҡ осо аша сығарып һөйләп биргәйне инде) аҙбар аша баҡсаға үтте. Яртылаш бөткән, ҡасандыр балҡып торған, күп итеп емеш-еләк биргән баҡса...

Оҙаҡ ҡына ҡарап торҙо. Тәмәкеһен ташлап, көрәк алды. Яҙ бит.

Ваҡыты еткән, хатта үтеп бара - ағастарҙың төбөн йомшартырға, түтәл әҙерләргә кәрәк. Әхмәтйән ҡойма буйынан ҡаҙа башланы. Ер һағынғайны уны. Ярмалы тупраҡтың сырҡып торған еүешлеге бөткән, дымлы ғына - өлпөлдәп тора. Бер онотолоп, бер әрнеүле хистәргә бирелеп ҡаҙырға тотондо ул. Ер ҡортомо ни.

Тик хәле генә элеккесә түгел икән. Дүрт-биш аҙым үтеп өлгөрмәне, тыны тарығып, йөрәге лепелдәп, быуынына төштө бит. Ярым иҫкергән, ҡымшылдай башлаған ҡойма эргәһендә туҡтаны Әхмәтйән. Ҡулдары менән көрәгенә таянып, арҡаһын ҡоймаға терәне. Тынысланып, бер аҙ ял иткәс, тирә-яғын шым ғына күҙәтеп торҙо.

Ҡайҙалыр эттәр өрөп ҡуя. Яңғыҙ әтәс ҡысҡыра ла ҡысҡыра. Әйтерһең дә, кәрҙәштәрен йәки тауыҡтарын һуғышта юғалтҡан. Тегеләренән яуап юҡсы... Һуғышта юғалтманыңмы икән ҡаты аслыҡ, юҡлыҡ йылдарында һуйылып ашап бөтөлгән ҡәрҙәштәреңде? Әллә аслыҡ ауазы шаңдау булып әтәс тауышы менән ҡысҡырамы?..

Ҡойманың ошо тәңгәле тәпәш булып, сәнскеле сым һуҙғайны Әхмәтйән. Әле, тын ғына ҡойма аша ҡарап торған еренән ул ҡапыл тертләп китте... Тыҡрыҡҡа үҙенең ҡураһынан сәнскеле сым аша ҡарап тора икән дә. Үҙенең донъяһын үҙе үк бүлгән, таныш булған ҡот осҡос сәнскеле сымдар аша...

Тәүҙә ул сымдарға шаҡ ҡатып, сирканып ҡарап торҙо. Аҫҡаҡ, ҡуңыр йөҙө яман булып ағарынып китте, баҙлап янған күҙҙәрендә ҡурҡыу уты тоҡанды. Бына ул кинәт ярһып, сәнскеле сымдарҙы йолҡҡолап ташларға булып китте. Ләкин... инде үрелгән ерҙән ҡапыл туҡтаны, яртылаш һонған ҡулын һәйәт кенә тартып алды - уларҙың лагерын ураткан сәнскеле сымдарҙан көслө электр тоғы үтә ине.

Әхмәтйән юғалып ҡалды... Ул бер нисә йыл элек үҙе яһап, үҙе үк һуҙған сымдарға ҡулы менән ҡағыла алманы... Бер-ике аҙым артҡа сигенгәс, ҡапыл һелтәнеп, көрәге менән сымдарға һуҡты. Өҫтәге берәүһе өҙөлөп китте. Ләкин ҡалғандары бирешмәй, зыңлап бергә уҡмашты. Әхмәтйән ҡыҙып, ытырғанып, тағы, тағы һуҡты:

- Ы-ы-х, - был юлы сымдарҙы тотоп, һерәйеп торған һайғауҙарҙың берәүһе һынып китте. Ҡойманың буйынан буйына һуҙылған сымдарҙы көрәге менән һуҡҡыслап йолҡоп алғас, уларҙы ергә һалып тапай башланы.

"Эх, черт. Эх, черт" - әсирлектән алып ҡайтҡан берҙән-бер һүҙен ҡабатлай- ҡабатлай, оҙаҡ тапап арығас, сымдарҙы бәҙрәф артындағы сүплеккә, тутығып бөткән тимер-томор араһына ырғытты. Ҡойма буйындағы яртылаш серек бүрәнәгә ултырып, тәмәке төрөргә тотондо. Ҡалтыранған

**✔ Улар фәрештә кеүек камил да, әҙәм аҡтыҡтары ла түгел, ыңғай һәм кире яҡтары булған ҡәҙимге кешеләр. Әлбиттә, дөйөмләштереп бирелгән заманыбыҙҙың типик образдары.**



бармаҡтары менән гәзит киҫәгеп рәтләй алмай, махорҡаһын түгеп ебәрҙе. Ҡабаланып, тағы тәрөргә тотондо. Баяғы кеүек: "Эх, черт. Эх..." - тиеп, мәғәнәһеҙ мығырҙап әсенмәһә лә, ағарынған ирендәре берсә асылып, берсә ҡымтыла, ә үҙе йыш-йыш тын ала ине.

Бына ул тәмәкеһен тоҡандырып, тынып ҡалды. Төпкә батҡан күҙҙәренән һирәк күренер ҡайнар йәштәр бәреп сыҡты ла, ябыҡ яңаҡтары буйлап йүгерешеп, ярмалы тупраҡҡа тамды.

Бына ултыра ҡойма буйындағы бүрәнәлә әсирлектән ҡайтҡан ҡарт һалдат... Күптән һүнгән тәмәкеһе аша ергә ҡарап, нимә уйлай икән ул? Әсирлектә күргән ҡот осҡос ауырлыҡтарҙымы, эргәһендә дошмандарҙы әсе ҡәһәрләп, ҡаты яраларҙан үлгән ватандашын иҫкә аламы, әллә сатлама һыуыҡта ла, йәйге эҫелә лә, икенсе полоса сәнскеле сымы тогына һуғылып, арҡаһына автомат очереды алып, шунда әләгеп торған әсирҙе килтерҙеме күҙ алдына?

Әллә уның уйҙарында ике өй аша торған Гөлбәҙәр инәйҙең улы Рәмил Мостафинмы? Һуғыш башланырҙан бер нисә йыл элек ошо сымдарға әләгеп тотолғайны ул. Ҡыҙыл ҡарағат ашарға ингән еренән... Аша сығып барғанда, һаҡһыҙыраҡ ҡыланып, салбар-күлдәгенән әләгеп тотолғайны малай. Ну эләккәйне шул юлы уға Әхмәтйәндең ҡаты ҡулынан. Эләккәйне. Хатта ул - был яҡҡа түҙемле Гөлбәҙәр еңгә лә иртәгеһен килеп, үпкә һүҙҙәрен әйтеп киткәйне.

Ашарға бик наҡыҫ ине шул ул йылды... Ә Рәмил... Тарамышыраҡ кәүҙәле, асыҡ йөҙлө Рәмил, ҡырҡ дүртенсе йыл һуғышҡа алынып, өс ай ғына фронтта булып, туғандаш илдәрҙе азат итеү өсөн барған бәрелештәрҙең береһендә үлемесле яраланып, сит ерҙәрҙә ятып ҡалған.

- Эх! Теге ваҡытта ҡарағат ашағаны өсөн... - Әхмәтйән, итегенә әләгеп, йылан кеүек уралған сым киҫәген һелкеп ебәрҙе лә, ҡапыл аяғүрә баҫты, тирә-яғына бер аҙ ҡарап торғандан һуң, ниндәйҙер ҡарарға килеп, ҡабаланып өйөнә инеп китте.

Күп тә үтмәй ул, аптыраған ҡатыны оҙатыуында ниндәйҙер бер һәлмәк төйөнсәк тотоп килеп сыҡты... Ауыҙын асып бер һүҙ әйтә алмай ыҙалаған ҡатынына өтөп берҙе ҡараны ла, шундуҡ ҡапҡа аша сығып та китте.

Урам сатында тәмәкеһен тоҡандырып алғас, ҡапыл ышаныслы, ныҡлы аҙымдары ваҡланды, кәүҙәһе тағы ла баяғы кеүек бөләкәсәйеп, һығылып төштө. Ләкин барыбер сыҡҡан юлынан ситкә ялтанманы Әхмәтйән: йылдар буйы йыйған байлығы төйнәлгән төйөнсәгән унайһыҙ ғына тотоп, баҙнатһыҙ аҙымдар менән колхоз идараһына йүнәлде. Нисегерәк ҡаршы алырҙар икән? Кешеләрҙең бөгөр яраһы асыҡ мәл - әҙ генә ҡуҙғатһаң да, ярһып һыҙларға тотона. Үҙҙәре лә ярһып китмәгәйе...

*ИЖАДХАНА*

# ДОНЪЯЛЫҠТА...

## эҙең ҡалһын, кеше



**Рәсүл Ғилметдин улы Байгилдин менән беҙ ауылдаштар. Улай ғына ла түгел, 1996 - 1999 йылдарҙа Баймаҡ районының "Октябрь байрағы" гәзитендә бергә эшләнек. Унын журналистикаға яңы аяҡ баҫҡан сағы ине. Ул бөгөн яҙыусы булараҡ та билдәле. Был әңгәмәне яҡташымды ижадсы булараҡ гәзит уҡыусыларға киңерәк таныштырыу маҡсатында ҡорҙом.**

**➔ Рәсүл, әҫәрҙәрең матбуғат биттәрендә яңыраҡ - тиҫтә йыл самаһы элек кенә - күренә башланы. Хәҙер китап уҡыусылар һирәк икәнен иҫәпкә алғанда, һине танып-белеүселәр ҙә күп түгелдер, тип фаразларға ҡала. Таныштырып китәйек башта...**

- Сығышым менән мин Йылайыр районы Матрай ауылынан. Бишенсе класҡа тиклем тыуған ауылымда уҡыным, мәктәпте Баймаҡ интернат-мәктәбендә тамамлап ҡуйҙым. Артабан Мейәс геология разведкалау техникумында белем алдым, ике йыл сик буйы ғәскәрҙәре сафында хеҙмәт иттем (ун һигеҙ йәшем тулғас та армияға саҡырҙылар). Ҡулға диплом алғас, йүнәлтмә буйынса Чукоткаға киттем, унда алты эҙләү эшендә булдым. Ике йылдан Башҡортостанға ҡайттым. Бер аҙыраҡ Өфөлә "Башгипроводхоз" проект-тикшеренеү институтының геология бүлегендә хеҙмәт итеп алдым. Өйләнгәс, тыуған яҡҡа ҡайтырға тура килде, тик һөнәрем буйынса эш таба алманым. Аҡъярҙа төпләнеп, һигеҙ йылдан ашыу ғүмерем тәҙәләштә үтте. Өйрәнсектән башлағайным, 5-се разрядлы ташсы-монтажсыға тиклем барып еттем, өс йыл ташсылар бригадаһы бригадиры вазифаһын башҡарҙым. 1996 йылда ғаиләм менән Баймаҡҡа күсеп килдек, район гәзитәрендә махсус хәбәрсе ("Октябрь байрағы" гәзитендә), бүлек мөдире ("Һаҡмар"ҙа) булып эшләнем. 2002 йылда Сибайға күстек. Унда "Атайсал" гәзитендә хәбәрсе, мөхәррир булдым, 2005 йылда ҡала хакимиәтенә мәғлүмәт-аналитика бүлеге начальнигы итеп саҡырҙылар. Был вазифала ун дүрт йылға яҡын хеҙмәт иттем. 2019 йылда ғаиләм менән Өфөгә күстек һәм бөгөнгә көндә "Башҡортостан ҡыҙы" журналында эшләйем, баш мөхәррир урынбаҫарымын. Ғүмүмән алғанда, биш һөнәр алмаштырҙым, ситтән тороп Башҡорт дәүләт университетының Сибай институтын, Башҡортостан Республикаһы Башлығы ҡарамағындағы дәүләт хеҙмәте һәм идара академияһын тамамланым.

**➔ Гәзиткә эшкә килгәнендә яҡшы хәтерләйем, ә ҡасан әҙәби әҫәрҙәр яҙа башланың һуң?**

- Яҙышыу теләге миндә һәр саҡ булды. Йәш ваҡытта бер дәфтәргә төрлө фекерҙәремде теркәп бара инем. Шунан үҙем өсөн генә хикәйәләр яҙып ҡараным. Үткән быуаттың 90-сы йылдарында "Йәшлек" гәзитендә сыҡҡан мәҡәләләремдә, ҡағыҙға баҫылған тәүге әҫәрҙәрем, тип әйтергә мөмкиндер. Гәзиттә эшләй башлауым күңел ихтыяжымды ҡайһылыр миҡдарҙа ҡәнәғәтләндерҙе ине. Журналистикала аҙмы-күпме тәжрибә туплағас, етдиерәк яҙышыу теләге тыуҙы. Тәүге хикәйәм 2005 йылда донъя күрҙе. Сибай ҡала хакимиәтендә яуаплы вазифала эшләй башлағас, ижадты тағы ҡуйып торорға тура килде. Илле йәш тулған осорҙа, әгәр ошонан ары ла кире яҙа башламаһам, һуң буласаҡ, тигән уй йәнә ҡәләм алыуға этәрҙе.

Бер нисә хикәйәмде республика баҫмаларына ебәрҙем. Тик яуап булманы. Күпмелер ваҡыт үткәс, "Киске Өфө" гәзите редакцияһынан шылтыраттылар, әҫәрең оҡшаны, баҫырға әҙерләйбеҙ, тинеләр. Шылтыратыусы билдәле яҙыусы, шағир Әхмәр Үтәбай ине. Шулай итеп, "Киске Өфө"нөң баш мөхәррире Гөлфиә Янбаева, ул ваҡытта ошо гәзиттә эшләгән Әхмәр Үтәбайҙың фатихаһы менән әҫәрҙәрем тағы донъя күрә башланы, яҙышырға дәрт өҫтәне. Йыл йомғаҡтары буйынса баҫманың лауреаты итеп тә күрһәттеләр. Әгәр шул саҡта терәк тапмаһам, бәлки, төңөлөп тә ҡалған булыр инем.

**➔ Әлегә һин - бер китап авторы. Китабыңдың геройҙары кем?**

- "Аҙашҡандар юлды табырмы..." тип аталғайным тәүге китабымды. Һорау һимаҡ яңғыраһа ла, баҫым күберәк икеләнеү яғына яһалған. Үҙ замандаштарым тураһында яҙам, геройҙарымдың прототиптары арабыҙҙа йөрөй. Улар фәрештә кеүек камил да, әҙәм аҡтыҡтары ла түгел, ыңғай һәм кире яҡтары булған ҡәҙимге кешеләр. Әлбиттә, дөйөмләштереп бирелгән заманыбыҙҙың типик образдары. Үҙҙәрен таныған геройҙарҙа кемдәлер сырамытып, шул кешене яҙғанһың бит, тигәндәр ҙә осрап ҡуя.

**➔ Китапҡа инеп киткән "Сиктең сигендә..." хикәйәһендә төп герой, бик оҙаҡ ситтә йөрөгәндән һуң, тыуған ауылына ҡайта һәм тәпәй баҫҡан төйәгенең бөгөнгө хәлен күреп тетрәнә. Шул уҡ ваҡытта автор өмөткә лә урын ҡалдыра...**

- Эйе, үкенескә ҡаршы, ауыл ҡартая, яйлап һүнә бара. Асфальт юл һыҙатында ятҡан элекке ҡеүәтле "Башҡорт" совхозы үҙәге Матрайҙа ла тормош хәҙер ҡайнап тормай. Төпкөл ауылдарҙа ул бөтөнләй һүнеп барған төҫлө: эш юҡ, йәштәр бармаҡ менән генә һанарлыҡ, мәктәптәр, клубтар ябылған. Халыҡ район үҙәктәренә, ҡалаларға барып төпләнә, Себер тарафтарында үҙенә төйәк таба. Был айырым кешенең генә түгел, ә тотош милләттең трагедияһы. Сөнки ауыл - ул халҡыбыҙ бишеге, телебеҙ, ғөрөф-ғәҙәттәребеҙ һаҡланған урын. Бөгөнгө глобаллаштереү милли мәҙәниәтте, телдәрҙе, ғөрөф-ғәҙәттәрҙе, ғөмүмән, миллилекте юҡҡа сығара бара. Ә тормошто цифрлаштырыу кешенең шәхсәнлеген юя. Кеҫәлә йөрөткән телефон аша беҙҙең һәр аҙым күҙәтеү аҫтында. Тағы ла тиҫтә-тиҫтә ярым йылдан беҙ бөтөнләй башҡа йәмғиәттә, бөтән шарттарҙа йәшәйәсәкбеҙ, тип уйлайым. Тормош ҡиммәттәре үҙгәрәсәк, йәмғиәт тә, тәбиғи мөхит тә икенсе төрлө буласаҡ. Әгәр еребеҙҙән, тыуған төйәгебеҙҙән тамам айырылһаҡ, алда көткән ысынбарлыҡ беҙҙе бөтөнләй йотасаҡ, илһеҙ, телһеҙ, тарихһыҙ ҡамғаҡ кеүек, ел ыңғайына бәреп-һуғып йөрөтәсәк. Себергә лә кеше бөтөнләйгә тип сығып китмәй, аҙыраҡ аҡса эшләйем дә ҡайтам, тигән уй менән ҡуҙғала. Ә ҡайтырмы һуң ул? Үҙе лә ҡайтһын, балаларын да алып ҡайтһын ине. Шунда ғына киләсәккә өмөтөбөҙ булыр.

"Корҙаштарыма, үҙемдән оло һәм кесе ауылдаштарыма, ҡарап, уларҙың, бер ҡор булып, бер төптән эш ҡылыуға һиуһауҙарын, ҡорбашсыға мохтаж булыуҙарын тойҙом. Әгәр алда асыҡ маҡсат күрһәләр, теүәл бурыс ҡуйыусы булһа, ғәскәргә тупланырға әҙер ине ауылдаштарым. Бөгөн беҙҙең арала батыр, юл башлаусы юҡ - мин шуны аңланым тау башында торғанда". Был - хикәйәнең төп геройы уйланыуҙары. Ҡуштау ваҡиғалары, ысынлап та, ойоштороп, берләштергән көс булһа, беҙҙең халыҡ тауҙар аҡтарырға әҙер икәнен күрһәтте. "Күккә терәлеп тау башында ултырған йәшел-ҡыҙыл һыҙатлы байраҡҡа йыш баҡып торам мин. Башҡаларҙың да, аңҡайып, уға текләп-текләп алғандарына иғтибар иттем.

- Олатай, ҙурайғас мин дә погран булам. Ауылыбыҙҙы һаҡлайым, - эргәмә шым ғына килеп баҫҡан күрше малай шулай тине.

Мин ер эшкәртһәм, ул һаҡта торһа, ауылыбыҙ үлмәҫ, бөгөрҙәрҙе телгән ир күҙ йәштәре лә тыуған тупрағыма бөтән таммаҫ, аҡһаҡалдар ҡоро киң һәм бәҫле булыр!" Ошо юлдар менән тамамлана әлеге хикәйә. Эйе, өмөт бар һәм ул - беҙҙең йәштәребеҙ һәм балаларыбыҙ.

**➔ Ауылда йәшәүселәр, ситкә таралған миллләттәштәребеҙ тыуған төйәгебеҙҙең бөгөнгө хәлен төбөнә төшөп аңлаймы икән һуң?**

- Аңлай, тип уйлайым. Унан сығыу юлын да белә кеүек улар, тик ауыл кешеһен донъя баҫҡан. Торлаҡ алыу (төҙөү), балаларын үҫтереү, уҡытыу, башлы-күҙле итеү, уларға аяҡҡа баҫып китергә ярҙамлашыу хәстәре менән йәшәй ул. Башҡаһына көсө лә, ваҡыты ла, аҡсаһы ла ҡалмай. Үкенескә ҡаршы, эскеселек тә бәкәлгә һуға.

Ситтә үҙен тапҡан, кәсебен уңышлы алып киткән яҡташтарға өмөт бағлау ҙа урынлылыр. Миҫал өсөн алыҫҡа йөрөргә лә түгел. Матрайҙан Ирек Фәхри улы Мәҡсүтов, "Башҡорт" совхозынан ҡалған ферманы һатып алып, крәҫтиән хужалығы асты. Үҙе Себер тарафтарында эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнә, ә хужалыҡты ауылдағы туғандары алып бара. Шундай кешеләр күберәк булһа, ауыл йәшәйәсәк, әлбиттә.

**➔ Ижади пландарың тураһында бер-ике ауыҙ һүҙ әйтеп китһәң ине...**

- Повестар һәм хикәйәләрҙән тупланған китабым нәшриәттә үҙ сиратын көтөп ята. Әле "Ғаилә" романы өҫтөндә эшләйем. Ул - бер нисә быуындың тормошон үҙ эсенә алған әҫәр. Повестарға бүлеп, айырым-айырым яҙам. Өсәүһе "Ағиҙел" журналында баҫылды, дүртенсеһе сиратын көтөп ята, ә бишенсеһе өҫтөндә эшләп ултырам. Ун - ун ике повесть булыр, тип уйлайым. Аҙаҡтан улар бер романға берләштереләсәк.

**➔ Был бик ҡыйыу аҙым, тип уйлайым. Нисек шундай ҙур әйбергә тотонорға йөрьәт иттең?**

- Кеше ғүмере ҡыҫҡа ла, шул уҡ ваҡытта оҙон да. Был Ерғә нисәмә быуын килеп киткән. Улар нисек йәшәгән, нимәгә инанған, ниндәй көскә таянған? Был һорауҙарға яҙыусылар үҙҙәренең тарихи әҫәрҙәрендә яуап эҙләй. Шул уҡ ваҡытта бөгөнгө тормош, яҡын үткәндәр тураһында һирәк яҙыла. Әлбиттә, шаһит булған ҡайһы бер ҙур ваҡиғаларҙың айышына беҙ тик ваҡыт үткәс, улар алыҫлашҡас ҡына төшенәсәкбеҙ. Әле иҫән оло быуын кискән ғүмер, улар заманы тураһында хәҙер яҙып ҡалыу дөрөҫөрәктер барыбер. Бер кем дә был донъялыҡтан эҙһеҙ юғалырға тейеш түгел, тигән фекерҙәмен. Һуғыш осоро документтары халыҡҡа асҡан "Мемориал", "Память народа" сайттарында Зыяетдин, Имаметдин, Нуриәхмәт, Илһам олатайҙарымдарға ҡағылышлы документтар таптым. Уларҙың тәүге өсәүһе яу ҡырынан әйләнеп ҡайта алмай. Бигерәк тә тетрәндергәне Зыяетдин олатайымдың яҙмышын асҡан немец концлагерендә тултырылған формуляр булды. Матрай мәктәбе директоры булған олатайым һуғышҡа тик 1942 йылдың 20 майында ғына алына. Шул уҡ йылдың июлендә хәбәрһеҙ юғала. Табылған документтан билдәле булыуынса, немец-фашистарының көслә йәйге һөжүме йүнәлешенә тап килгән Воронеж өлкәһенең Кантимировка ҡасабаһы эргәһендә әсирлеккә төшә. 1944 йылдың 18 апрелендә Германияла концентрацион лагерҙа вафат була. Олатайымдың фажиғәле яҙмышын бер нисек тә иғтибарһыҙ ҡалдырып булмай. Бөгөнгө ысынбарлыҡты ситләп үтеү ҙә ҡулына ҡәләм алған кеше өсөн яҙыҡтыр. Башлаған ҙур әйбәрем беҙҙең ғаиләнең дүрт быуыны тормошон үҙ эсенә алған роман булараҡ ниәтләнгән. Атай-әсәйемдең бала сағы тап килгән һуғыш осоронан башланып, бөгөнгө көнгә тиклем килеп етергә тейеш ул...

**Рәшит ҮТӘЕВ**
**әңгәмәләште.**

ИНТЕРНЕТТАН



# БЫЛ ЭСЕМЛЕК...
## хәтерҙе яҡшырта

■ Гарвард университетында үткәрелгән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, ҡайнар какао ҡулланыу ҡарттарҙың баш мейеһе торошон һәм хәтерен яҡшырта. Ғалимдар быны какао составындағы флавоноидтар менән бәйләй. Һынауҙарҙа уртаса 73 йәшлек кешеләр ҡатнашҡан. Ай дауамында улар көнөнә ике тапҡыр какао эскән. Асыҡланыуынса, быдан һуң уларҙың баш мейеһендә ҡан әйләнеше яҡшырған, хәтерҙәре ныҡыған. Какао тромбтар һәм насар холестерин, ҡан тамырҙары системаһы ялҡынһыныуын булдырмай.

■ Ә быуа ҡәһүә эсеүселәрҙә бауыр циррозы булмай, ти Сингапур ғалимдары. Әлеге мәлдә бауыр циррозы донъялағы бөтөн үлемдәрҙең 1,3 процентының сәбәбе булып тора. АҠШ-та ул 11-се урында тора. Тикшеренеүҙәр 15 йыл дауам иткән, унда 63 меңдән ашыу кеше ҡатнашҡан. Ғалимдар ҡәһүә, алкоголь, ҡара һәм йәшел сәйҙәр, емеш һуттарының цирроз булдырыуға йоғонтоһон өйрәнгән. Иң ҙур хәүеф алкоголдән булып сыҡҡан. Ә көнөнә 2 сынаяҡ ҡәһүә эсеүселәр араһында был процент - иң түбәне. Әммә гепатит һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән циррозға ҡәһүә бер нисек тә йоғонто яһамай икән.

■ Британия ғалимдары ҡыҙыҡлы эксперимент үткәргән. Ир-егеттәргә төрлө ҡатын-ҡыҙҙарҙың фотоларын күрһәткәндәр һәм араларынан иң матурын һайлап алырға ҡушҡандар. Күптәр тән ауырлығы ҡабул ителгән норманан ауырыраҡ гүзәл заттарҙы һайлаған. Был матурлыҡ идеалдары артынан ҡыуып, үҙҙәрен аслыҡ менән яфалаған ҡатын-ҡыҙҙарға бер иҫкәртеү булып яңғырайһын ине, ти улар.

■ Британия ғалимдары билдәләүенсә, кибеттәрҙә һатылған һыуҙа микроорганизмдар санитар норманан 100 тапҡырға күберәк. Хатта крандан аҡҡан һыуҙа бактериялар әҙерәк икән. Әлбиттә, был бактериялар кеше сәләмәтлегенә артыҡ зыян килтермәй, шулай ҙа иммунитетты түбәнәйтеп, төрлө ауырыуҙар башланыу ихтималлығы бар. Сит илдә крандағы һыу юғары сифатлы, уны ҡайнатмайынса ла эсергә мөмкин. Беҙҙә иһә күптәр хәҙер эсәр һыуҙы һатып ала, тик пластик һауыттар ҙа һыуҙы токсиндар менән "байыта", тип белдерә белгестәр.

■ Әле күптән түгел генә хроник арыу синдромын уйлап сығарылған буш хәбәр, тип иҫәпләй инеләр. Һуңғараҡ психик тайпылыш тип һанаһылар. Бөгөн ғалимдар был ауырыу - физиологик тайпылыш һәм ул өлкәндәрҙә генә түгел, балаларҙа ла осрай, ти. Һуңғы тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, 16 йәштәге үсмерҙәрҙең 2 проценты хроник арыу синдромы менән ярты йыл, тағы ла 3 проценты өс ай яфалана. Үсмерҙәр араһында малайҙарға ҡарағанда күберәк ҡыҙҙар был диагнозға дусар була. Тикшеренеүҙәрҙә 5 756 бала һәм үсмер ҡатнашҡан. Иң ҡурҡынысы, тип иҫәпләй ғалимдар, үҙенең проблемаһы менән белгескә мөрәжәғәт итеүселәр һаны ныҡ түбән.

■ Салат, ҡуҙғалаҡ һәм башҡа төрлө йәшел тәмләткестәр ябығырға ярҙам итә, ти Италия ғалимдары. Рационды бындай йәшелсәләр менән тулыландырыу организмды кәрәкле клетчатка менән байыта, аппетитты көйләргә ярҙам итә. Сөнки уларҙың составындағы фолий кислотаһы һәм К витамины инсулин бүленеп сығыуҙы яйға һала. Клетчатка иһә эсәктәр өсөн "щетка", токсиндарҙы сығара, аш һеңдереүҙе тиҙләтә.

УЛЫМ, ҺИҢӘ ӘЙТӘМ...

# НИКАХ ҠОРОУСЫЛАРҒА НӘСИХӘТ



**Шулай бер мәл алтмыш йыл бергә йәшәгән ир һәм ҡатындан: "Нисек итеп оҙаҡ йылдар буйы бергә йәшәп, ғаиләгеҙҙе матур итеп һаҡлап киләһегеҙ?" - тип һорайҙар икән. "Беҙҙең заманда нимәләр боҙолһа, уны шунда уҡ сығарып ташламанылар, йүнәтә торғайнылар..." - тип яуап биргән ҡатын. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, хәҙер улай түгел шул. Йәштәр ата-әсәләренән ҡиммәткә төшөрөп туй яһата. Һуңынан, ғаиләлә саҡ ҡына берәй ыҙғыш сыҡһа, ташлашыуға ла күп һорап тормайҙар. Әлеге ҡатындың яуабынан һабаҡ алып, һынауҙарҙы лайыҡлы үтеп, ғаилә кәмәһен йүнәтеү юлын һайларға кәрәк тә бит... Әйткәндәй, яңы ғаилә ҡороусыларға бер нисә кәңәш биреп үтке килә.**

### Сабырлыҡ кәрәк

Ғаилә именлеге өсөн көләш тә, кейәү ҙә, икеһе лә берҙәй яуаплылыҡ алырға тейеш. Яуаплылыҡ алыу, тигәндә, шуны әйтергә теләйем: әгәр ҙә ғаиләлә ниндәйҙер ҡытыршылыҡтар тыуа ҡалһа, һинең арҡала шулай килеп сыҡты, тип ғәйепләүҙәр ташлашырға ашыҡмағыҙ. "Бәлки, ғәйеп миндә лә барҙыр, үҙем дә яңылышманым микән, ҡайһы ерҙә хаталандым, аңлашылмаусылыҡты бөтөрөү өсөн нимә эшләргә була?" тигәнерәк уйҙар һәр икегеҙҙең башына инеп сығырға тейеш. Хатта ки, ғәйеп үҙендә түгел икәнен белгәндә лә сабырлыҡ менән ҡоралланыу дөрөҫ буласаҡ. Бер аҡыл эйәһе, ғаилә ҡороу өсөн ғашиҡ булыу ҙа етә, уны һаҡлау өсөн сабырлыҡ һәм ғәфү итә белеү кәрәк, тигән. Ләкин сабырлыҡты түҙеү менән бутарға ярамай. Ниндәйҙер күңелһеҙерәк хәл тыуғанда, "мин түҙәм", тип, үпкәле, күңел ҡырған, хәтер ҡалдырған һүҙҙәрҙе йотоп, өндәшмәйенсә, эстән янып тик йөрөһә, кешенең ауырыуға һабышыуы ла ихтимал. Насар хәтирәләрҙе үҙегеҙ менән алып йөрөтмәгеҙ, тиҙерәк онотоғоҙ, үпкәләтеүсене ғәфү итегеҙ. Ошолай итһәгеҙ, һаулығығыҙ ҙа, ғаиләгеҙ ҙә имен булыр.

### Минең ирем иң яҡшыһы!

Дин әһеленә йәш бер ҡатын килә лә ике йыл элек уларға никах уҡыуын иҫләтә, хәҙер айырылышырға теләүен әйтә. Сәбәбен иренең эштән һуң ҡайтыуында һәм шул арҡала көн һайын ыреш-талаш сығыуында тип аңлата. Дин әһеле: "Айырылырға ризалыҡ бирермен, тик бер шарт ҡуям: бөгөн бешерергә йыйынған икмәгең өсөн онdo, һыуҙы һәм тоҙҙо күрше ҡатындарҙан үтескә алып тор. Миңә һөйләгән зарыңды уларға ла һөйлә", - ти. Ҡатын беренсе күршеһенә инә лә бер ижау һыу һорай. Тегеһе: "Һеҙҙә һыу бөттөмө әллә, үҙегеҙҙең ҡотоғоғоҙ бар ҙа инде", - тип ғәжәпләнә. "Бар ҙа ул. Дин әһеленә иремде ошаҡларға барып, айырылырға рөхсәт итеүен һорағайным, ул тәүҙә бына ошо шартты үтәп, һинән һыу алып торорға ҡушты", - тип яуаплай ҡатын. Шунда күрше ҡатындың теле сиселеп, үҙенең иренең насарлыҡтарын, етешһеҙлектәрен теҙеп алып китә. Артабан ҡатын тоҙ һорарға икенсе күршеһенә килә. "Бер ҡалаҡ ҡына ла тоҙоң ҡалманымы ни?" - тип аптырай уныһы ла. "Бар ҙа ул... Иман йортона барып, ирем менән айырыуҙарын һорағайным..." тип әйтә башлау менән икенсе ҡатын да: "Ә минең ирҙе белһәң ине..." - тип, үҙ иренең ямана-тын теҙеп алып китә. Йәш ҡатындың иренән айырылырға йыйыныуы тураһындағы хәбәр өсөнсө күршегә лә үҙ иренең яман ҡылыҡтарын һөйләргә сәбәп була. Өс күршеһендә лә йөрөп сыҡҡас, йәш ҡатын икмәк бешерә лә, бер түтәрәмен тотоп, иман йортона алып бара һәм: "Рәхмәт һеҙгә. Мин кире уйланым, айырылышмайым", - ти. "Ниңә ундай ҡарарға килдең, ҡыҙым?" - тип ҡыҙыҡһына имам. "Минең ирем иң яҡшыһы икәнен аңланым", - тип яуаплай йәш ҡатын.

### Һәйбәт ирҙәргә - һәйбәт ҡатындар

Ҡөрьән-Кәримдә былай тиелә: "Насар ҡатындарға - насар ирҙәр, насар ирҙәргә - насар ҡатындар, һәйбәт ирҙәргә - һәйбәт ҡатындар, һәйбәт ҡатындарға - һәйбәт ирҙәр" *(24-се сүрә, 26-сы аят).* Яҙмыш тигәнебеҙ ир менән ҡатынды осраҡлы ғына табыштырмай. Меңдәр араһында осрашҡан икәнһегеҙ, был бушҡа түгел. Тимәк, һеҙҙең бер-берегеҙгә оҡшаш яҡтарығыҙ күп, бер-берегеҙгә лайыҡһығыҙ. Шулай уҡ, Изге китапта шулай тиелә: "Һеҙ уларҙа күңел тыныслығы тапһын өсөн үҙегеҙҙән үк һеҙгә ҡатындарығыҙҙы яралтты, һеҙҙең арала мөхәббәт һәм мәрхәмәт-шәфҡәтлелек булдырҙы, ошолар, һис шикһеҙ, Аллаһтың ҡөҙрәтенә асыҡ дәлилдәрҙер. Хаҡтыр, фекерләй белеүселәр өсөн бында ғибрәттәр бар" *(30-сы сүрә, 21-се аят).* Аҡыл эйәһеләренең береһе әйткән: "Ир бер ниндәй кәмселеге булмаған ҡатын алырға хыялллана. Ҡатын үҙенә бөтә яҡлап оҡшаған кейәү эҙләй. Әммә улар Аллаһы Тәғәлә тарафынан бер-беререн тулыландырыу өсөн яратылғанын аңларға тейеш. Идеаль мөнәсәбәттәр юҡтыр. Аҡыллы ҡатын иренең яңылышыуҙарын аңғармаҫҡа тырышыр. Ирмен тигән ир кеше ҡатын хаталарын кисерергә көс табыр".

Аллаһ рәсүле: "Мосолманға ҡатынында нимәләр оҡшамаһа ла, үҙе яратҡан икенсе төрлө сифаттары булыр, шуның өсөн ул уны күрә алмауҙан тыйылырға тейеш", - тине *("Әхмәт",*

КҮҢЕЛ МӨҺӨРӨ

# БЕР ИНӘЙҘЕҢ ЯҘМЫШЫ

**Бөгөн килеп Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында тыл михнәттәрен үҙ иңендә татығандар тураһында күберәк һөйләнә, күберәк хәстәрлек күрелә башланы, ахры. Ошо көндәрҙә "Һуғыш балалары" тигән статус рәсми ҡабул ителеп, уларға ниндәйҙер ташламалар менән файҙаланырға мөмкинлек биргән танытмалар таратыла башланы. Шундай тыл ветерандарының береһе тураһында һүҙебеҙ.**



...1934 йылда Башҡортостандың Күгәрсен районы Үрге Һаҙ ауылында Миңзифа һәм Исмәғил Әбйәлиловтарҙың өсөнсө балаһы булып донъяға килә уңған, эшһөйәр, егәрле ҡыҙ Басира Әбйәлилова. Аталары Бөйөк Ватан һуғышында яраланып, инвалид булып ҡайта. Снайпер пуляһы унын ике аяғынан да үтәнән үткән була. Ҡайтҡас, ул ауыл мәктәбендә ҡарауылсы - хужалыҡ етәксеһе булып хеҙмәтен дауам итә. Ул заманда ауылдағы мәктәп ағастан һалынған була. Һигеҙ йыллыҡ мәктәптәге ун бишләп кластың, шулай уҡ уҡытыусылар бүлмәһенең мейестәрен төнө буйы утын яғып йылытып, һүрелтеп, күмерен алып, уҡыусы балалар килеүгә әҙерләү, иҙән йыуыр өсөн һыу ташыу, утын әҙерләү, балсыҡ баҫып, бинаның стеналарын һылау уның иңендә була.

Басира ла туғандарына, ағай-апайҙарына эйәреп, һәр ваҡыт ғәрип атаһының уң ҡулы булып, бәләкәйҙән гел эш өҫтөндә үҫә. Кананикольск урман хужалығында ҡул бысҡыһы менән урман ҡырҡып, сплав менән ағас ағыҙыуҙа йөрөгәндә бер нисә тапҡыр саҡ ағас аҫтында тороп ҡалмай 12 йәшлек Басира. 8-10 йәшенән алып һарыҡ фермаһында йөҙләгән һарыҡ бағып, уларҙы бәрәсләтеп, бәрәстәрен имеҙеп, үҙе лә һарыҡ бәрәстәре кеүек кенә сағында ал-ял белмәй фермала ла эшләп ала. Ете класты тамамлағас, алыҫ туғаны Марат

✓ *Ҡайһы бер атайҙар, мин бәләкәй саҡта етешһеҙ тормошта үҫтем, тип, ярты йыллап ҡырҙа эштә йөрөй, ҡайтып, бәләкәй генә балаһына күпләп аҡса тотонып туҙҙыра ла, тағы ситкә китеп олаға.*



*"Мөслим")*. "Хәҡиҡәттә, ҡатын ҡабырғанан яралтылды, уны төҙәтәм тиһәң - һындырасаҡ, уны ошо көйө ҡалдыр, унан ҡәнәғәт булып йәшәү өсөн һинә шул етә", - тиелә хәҙистә *("Әл-Бохари")*.

### Ниндәй ҡатын ожмахҡа эләгә?

Бәхетле ғаиләлә ир кеше ябай хеҙмәтсе кеүек тыйнаҡ, баҫалҡы булһа, ҡатыны уға батшаға мөрәжәғәт иткән һымаҡ мөғәмәлә итер, ти аҡыл эйәләре. Хәҙистәрҙең береһендә: "Әгәр ире ҡатынынан риза, ҡәнәғәт икән, ҡатыны мотлаҡ ожмахҡа эләгә", - тиелә *("Тирмизи")*. Ләкин ир кеше ҡатынының эскерһеҙ ихласлығын уҫал ниәттә файҙаланырға тейеш түгел, һин мине риза итергә бурыслыһың, тип, үтә шашырға түгел, кәләшенең ҡәҙерен белергә, ихтирам итергә тейеш. Ҡатындарҙың да шул уҡ бурыс һәм хоҡуҡтары бар, уларға яҡшы мөғәмәлә итеү талап ителә, ләкин ирҙәр дәрәжәһе буйынса өҫтөнөрәк тора, тиелә Ҡөрьән-Кәримдә *(2-се сүрә, 228 аят)*.

### Кәңәшле эш тарҡалмай

Ир һәм ҡатын, ышаныслы, ныҡ мөнәсәбәттәр төҙөргә теләһә, ошо хәҡиҡәтте аңларға тейеш. Ғаилә ҡорооусы йәштәр үҙе өсөн генә булған "Мин" төшөнсәһен артҡараҡ ҡуйып, "Беҙ" тигән ғаилә мәнфәғәттәрен алға ҡуйһын ине. Кәләш йәки кейәү ниәмәлер эшләр, ниндәйҙер ҡарар ҡабул итер алдынан, был беҙҙең мөнәсәбәттәргә нисек тәьҫир итер, тип уйланһын, мотлаҡ бер-береһе менән кәңәш итһен. Кәңәшле эш тарҡалмай. Юрған улай-былай тартҡыланһа, бер кем дә йылына алмай. Шуның өсөн ғаилә юрғанын тигеҙ итеп ябыныу зарур.

### Туғанлыҡ мөнәсәбәттәрен һаҡлағыҙ

Яңы ғаилә ҡорғандан һуң һеҙгә кейәү, килен, еҙнәй, еңгәй тип һәм башҡа шундай ҡәрҙәшлек һүҙҙәре менән өндәшә башларҙар. Туғандарығыҙ артты, тимәк. Ҡайным, ҡәйнәм, ҡәйнеш, балдыҙ, бикәс, ҡайынбикә, ҡайнаға, тип әйтерлек туғандарығыҙ барлыҡҡа килде. Һинекә, минеке, тип зат айырмайынса, икe яҡ туғандарығыҙҙы хөрмәт итегеҙ, ҡәҙерләгеҙ. "Ата-әсәң һинән ҡәнәғәт икән, Алла ла һинән риза буласаҡ. Ата-әсәңде асыуландыраһың икән, Алла ла һинә асыулы буласаҡ" *("Тирмизи")*. Бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт *(с.ғ.с.)*, мөьминдәргә мөрәжәғәт итеп, ошолай тине: "Мосолмандар, туғанлыҡ мөнәсәбәттәрен һаҡлағыҙ, сөнки был ғүмерҙе оҙайта һәм ризыҡты мул итә" *("Әл-Бохари", "Мөслим")*.

Туғанлыҡ мөнәсәбәттәре - изге, шулай ҙа был мәсьәләлә лә сама белергә кәрәк. Аллаһы Тәғәлә Ҡөрьәндең "Әл-Бәҡара" сүрәһенең 143-сө аятында: "Һеҙҙе урталыҡта тороусы өммәт иттек", - тине. Ислам дине, ғөмүмән, һәр бер мәсьәләлә урталыҡта булырға өндәй, сиктән уҙмаҫҡа өйрәтә. Кейәү кеше балдыҙҙарын шаяртыуҙа, ҡатынының башҡа ҡыҙ туғандары менән һөйләшеүҙә артыҡ ҡыланмаһын, кәләшен көнләштереүгә юл ҡуймаһын. Килен кеше лә ҡәйнештәре менән мәрәкәләшеүҙә, ҡайнағалары менән аралашыуҙарҙы дөрөҫ алып барһын, ирен ҡыҙғандыра күрмәһен. Бәлки, ҡыҙғанырлыҡ ҙур эш тә ҡылынмаҫ, шулай ҙа саҡ-саҡ ҡына эләгерлек сәбәп сыҡһа, шайтан быһдай мөмкинлекте ҡулдан ысҡындырмай, ирҙе ҡатынына, ҡатынды иренә ҡаршы ҡоторта башлай.

Бәйғәмбәребеҙ *(с.ғ.с.)* үҙенең хәҙисендә: "Иблес *(шайтандар башлығы)* тәхетен һыуға урынлаштыра һәм үҙенең ғәскәрен төрлө яҡҡа ебәрә. Ҙур фетнә, бола сығарыусы шайтандар иң яҡшылар рәтендә икән, улар Иблескә иң яҡын һанала. Бер шайтан Иблескә килеп, мин шундай-шундай ҡаңғырыш тыуҙырҙым, тип еткерһә, ул: "Һин бер нәмә лә эшләмәнең", - ти. Шунан икенсе шайтан бара ла: "Мин ир менән ҡатынды талаштырмайынса, уларҙан китмәнем",- тип һөйләй. Иблес уны үҙенә яҡынайта ла, "Һин хәтәр шәпһең", тип маҡтай икән" *("Мөслим")*. Ир үә ҡатындың саф мөнәсәбәттәре - мосолман ғаиләһенең ныҡлы терәге. Шайтан бөтә көсөн ошо изге мөнәсәбәттәрҙе емереүгә йүнәлтә. Шайтан ҡан кеүек кешенең бөтә тәне буйлап йөрөй ала *("Әл-Бохари")*. Ул насар уйҙар уйлатып, нисек тә булһа ирле-ҡатынлыны бер-береһенә ҡаршы ҡоторторға тырыша. Шайтан тигән дошман бар икәнен белегеҙ, Алланан уға ҡаршы ярҙам һорағыҙ, бер-берегеҙҙе аңлашып йәшәгеҙ, йорттарығыҙҙа Ҡөрьән уҡығыҙ һәм Иблес һеҙгә зарар итә алмаҫ.

### Матур теләктәр

"Өс кешенең теләге: рәнйетелгәндең, мосафирҙың һәм дә ата-әсәнең балаһы өсөн әйтелгән теләге, һис шикһеҙ, ҡабул булыр", - тип әйтелә хәҙистә *("Тирмизи", "Ибн Мәджә")*. Күптәр ошо хәҡиҡәтте аңлап етмәй, Алланан һорап була икәнен белмәй, йәки, киреһенсә, аңғармаҫтан яңылыш нәмә теләүе ихтимал. Ҡайһы бер оло кешеләрҙең, балама бәхет һорай белмәгәнмен, тип үкенгәнен ишеткәнем бар. Ошо хәҙискә таянып, йәш ғаилә сабыйҙары өсөн даими рәүештә доға ҡылып, Аллаһы Тәғәләнән балаларына бәхет, тәүфиғын, байлығын һорап һәм башҡа матур теләктәр теләргә онотмаҫҡа тейеш. Ислам дине шулай уҡ балалары күп булған ғаиләгә уларҙың һәр береһенә ғәҙел булыуҙы талап итә. Береһенә бүләк алһаң, башҡаларын мәхрүм итергә ярамай. Бындай ғәҙелһеҙлектәр ҡабатлана килһә, уларҙың араһында татыулыҡ булмай, Аллам һаҡлаһын, дошманлыҡ булыуы ла ихтимал.

### Балалар тәрбиәһе

Бер мәл әсә кеше остазға бара һәм ҡыҙын ҡасандан тәрбиәләй башларға тип һораша. Остаз әлеге мәлдә балаға нисә йәш икәнен белешә. "Алты ай" тигән яуап алғас, "Һин алты айға һуңланың", тип яуап бирә.

Эстер Селдсон тигән кеше: "Әгәр ҙә һәйбәт балалар үҫтергегеҙ килһә, уларға аҡсаны ике тапҡыр әҙерәк тотоноғоҙ, ә ваҡытты ике тапҡыр күберәк бүлегеҙ", - тигән. Эйе, был фекер менән ризалашырға мөмкин. Ҡайһы бер атайҙар, мин бәләкәй саҡта етешһеҙ тормошта үҫтем, тип, ярты йыллап ҡырҙа эштә йөрөй, ҡайтып, бәләкәй генә балаһына күпләп аҡса тотонып туҙҙыра ла, тағы ситкә китеп олаға. Был тәңгәлдә лә алтын урталыҡҡа ҡоролған Ислам принцибына таяныу мөһим. Балаларға сама менән аҡса сарыф итеү ҙә кәрәк, ләкин улар аҡсаның нисек эшләнә икәнен дә аңларға һәм уларҙы һаҡ тотоноп өйрәнергә лә тейеш. Эш-эш тип сабып йөрөп, балаларығыҙға иң кәрәк мәлдә уларҙың янында булыуҙан ҡолаҡ ҡаҡмағыҙ. Иң мөһим нәмәләрҙе бәләкәй саҡтарында аңлатығыҙ, ҙурайғас тәрбиәләүҙән файҙа булмай.

**Азат КӨМӨШБАЕВ,**
**БДУ-ның "Ислам теологияһы" бүлеген тамамлаусы.**

---

УҢЫШ ҠАҘАН



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

### Изгелек изгелек тыуҙыра. Нисек?

Изге эштәрегеҙ нисек изгелек булып ҡайтҡанын аңлау өсөн, иң яҡшыһы, үҙегеҙҙең тәнегеҙҙән башлағыҙ. Һуңыраҡ беҙ ошо тар ҡараштың киң, тотош донъя менән бәйле икәнен күрербеҙ.

Барығыҙға ла мәғлүмдер, тән менән аң идара итә. Был факт күптән инде кеше сәләмәтлеге тураһындағы күҙаллауҙарҙа урын алыуға ҡарамаҫтан, һуңғы йылдарҙа ул киң мәғлүмәт сараларында киң сағылыш тапты, хатта йәш быуын табиптары ошо концепцияға йөҙ бора, ә ҡайһы бер абруйлы медицина мәктәптәре, мәҫәлән, Гарвард медицина мәктәбе, уны уҡыу программаһына индергән.

Тән менән аң идара иткәс, гәзиттә, ыңғайға көйләнгән аң тәндең сәләмәтләнеүенә булышлыҡ итәсәк, ә кире көйләнгәне - ауырыуҙар тыуҙырасаҡ. Дәлилдәргә күҙ һалайыҡ.

Ошо өлкәләге ғилми тикшеренеүҙәр буйынса ай һайын донъя күргән "Аң һәм аҡыл" мәғлүмәт бюллетене Йөрәкте математик юл менән тикшереүҙәр институтында асыуланыу тойғоһо организмға - кире, ә рәхмәт тойғоһо файҙалы йоғонто яһауын асыҡлаған, тип белдерә. Беренсе осраҡта, йәғни кеше асыулы саҡта, вегетатив нервылар системаһының симпатик өлөшө әүҙемләшә. Был йөрәк ритмының йышайыуына һәм артерияларҙың ҡыҫылыуына - йөрәктең үлемесле хәүеф менән янаған ауырыуҙарына хас симптомдарға килтерә. Киреһенсә, икенсе кешегә рәхмәт тойғоһо вегетатив нервылар системаһының парасимпатик өлөшенә йоғонто яһай. Ул, заманса күҙаллауҙар буйынса, организмдың сәләмәтлеге һағында тора. Бындай кешенең электрокардиограммаһы уның йөрәге ҡыҫылыуының даими булыуын күрһәтә. Йәғни уның йөрәге яҡшы эшләй. Уның организмдың инфекцияларға һәм ауырыуҙарға ҡаршы тороусы А иммуноглобулины күләме лә юғары булып сыға.

Йөрәкте математик тикшереү төркөмө етәксеһе Роллин Маккрейти был һөҙөмтәләрҙе "һөйөү һәм рәхмәтле була белеүҙең асыуланыуҙан сәләмәтерәк" булыуын беренсе аныҡ раҫлау, тип белдерә.

Аң менән тәндең башҡа үҙ-ара мөнәсәбәтенең дә был һығымтаны раҫлауында һис шик юҡ: ыңғай эмоциялар тәндең сәләмәтлегенә йоғонто яһай, киреләре иһә уны етди боҙоуы ихтимал. Был хаҡта һеҙҙең аралашыу манераһына ҡарап та билдәләргә мөмкин. Әгәр һеҙ үҙ тәнегеҙ хаҡында йыш ҡына кире раҫлауҙарға мөрәжәғәт итһәгеҙ, ахырҙа, улар тормошҡа ашып, ауырыу булып сығырға мөмкин. Мәҫәлән һеҙ: "Уны күрһәм, елкәм ауырта", - тиһәгеҙ, иртән уянғас, башығыҙҙы бора алмаһағыҙ, уйланығыҙ, ысынлап та ул "кемдән" ауырта икән... Йәки һеҙ: "Уны күрһәм, йөрәгем болғана", - тиһәгеҙ. Йышыраҡ ҡабатлаһағыҙ, ысынлап та шулай буласаҡ. Йәки: "Шул кеше менән аралашһам, аяҡтарым тотмай", - тиһәгеҙ, был һеҙҙең файҙаға түгел.

Киберфизиология - аң менән тәндең үҙ-ара бәйләнеше тураһындағы фән - шундай һығымта яһай: үҙ тәнеңә ихлас һөйөү менән ҡарарға, ошо һөйөүҙе функцияһы боҙолған ағзаға йүнәлтергә кәрәк. Тынысланығыҙ һәм уны туҡтауһыҙ эшләй, тип күҙ алдына килтерегеҙ. Ул һеҙҙең уйығыҙҙағы образға яуап бирәсәк. Уға ихлас һөйөүегеҙҙе һәм яҡшы эше өсөн рәхмәтегеҙҙе белдерегеҙ.

Әгәр һеҙ уны килтереп тыуҙырған проблемалары өсөн ғәйепләй башлаһағыҙ, әгәр быны йыш ҡабатлаһағыҙ, тиҙҙән үҙегеҙгә матәм йыры йырлаясаҡһығыҙ.

Изгелек изгелек тыуҙыра. Хәҙер һеҙ уның нисек тормошҡа ашҡанын беләһегеҙ.

**Роберт СТОУН.**
**(Дауамы бар).**

---

Вәли улы Зәйнуллин һәм Зиннур Ураҡсиндар менән бергә Мораҡ педучилищеһына уҡырға ла инә Басира. Тик урыҫса насар белеү сәбәпле, урыҫтар араһында уңайһыҙланып, уҡыуын ташлап, кире ауылына ҡайтырға мәжбүр була...

1955 йылда Ерекле ауылына, Ырыҫҡоловтар ғаиләһенә, килен булып төшә Басира. Зиннәт атлы егет менән матур донъя көтөп, Зәки, Ильяс, Наил, Әнүәр, Таңһылыу исемле биш бала тәрбиәләп үҫтерәләр. Хәләл ефете лә, үҙе лә алһыҙ-ялһыҙ колхоз-совхоз эшендә егелеп хеҙмәт итәләр. Басира ауылда ғына түгел, тотош районға егәрлелеге менән танылған уңған һауынсыларҙың береһе була. Көнөн төнгә ялғап, малсылыҡта эшләй, фермала һыйыр һауа, бик күп Маҡтау ҡағыҙҙарына лайыҡ була. Атай-әсәйҙән, нәҫелдән килгән сифат була инде уның бындай фиҙаҡәрлеге.

- Әсәйем Басираның атаһы Исмәғил ҡартатайыбыҙ, Минзифа өләсәй менән бергә 70 йыл татыу, бәхетле ғүмер кисерәләр, - тип йылы хәтирәләре менән уртаҡлаша хәҙер Басира инәйҙең балалары. - Исмәғил ҡартатайыбыҙ 91 йәшендә генә вафат булды. Ул ғүмере буйы бал ҡорттары тотто. Борон үгеҙ егеп, 4-5 фляга балды Иҫәнғол, йә Троицк баҙарына алып барып, килоһын өсәр һумдан һатып, хужалыҡта кәрәк булған ваҡ-төйәк, кейем-һалым, сәй-шәкәр тейәп ҡайтыр ине. Ике яҡтан да ҡартатай - өләсәйҙәр донъя көтөүгә тырыш булдылар. Атайҙың атаһы Ғәбиҙулла ҡартатай ҙа көҙгә әллә ни ҙур булмаһа ла, физик яҡтан ныҡ көслө булды. Хатта ул биш йөҙ килолы атты күтәрә торғайны... Атайыбыҙ менән әсәйебеҙ һәр беребеҙгә белем бирергә тырышты. Беҙ уҡыған саҡта атайыбыҙ ҡыш көнө, буран тип тормай, сана һөйрәп беҙгә аҙыҡ ташыр ине...

Басира инәйгә быйыл 87 йәш. Ул дүртаяҡҡа таянып йөрөһә лә, Себер тарафтарында эшләп, хаҡлы ялға сыҡҡан 3 улының, эшҡыуар һәм директор урынбаҫары булып эшләп, хаҡлы ялдағы тағы бер улы һәм ғүмер буйы уҡытыусы булып эшләп, хаҡлы ялға сыҡҡан бер бөртөк ҡыҙының матур тәрбиәһендә донъя көтә. Кистәрен үҙе кеүек оло йәштәге әхирәттәре "Киске телецентр"ға барабыҙ" тип шаяртышып, хәл-әхүәл белешергә, донъя хәбәрҙәре менән бүлешергә уның эргәһенә йыйылалар. Тәм-томдар, бәлештәр ҡоймаҡтар бешереп, кемеһе бал, кемеһе "үәринйә" тотоп килеп, киңәнеп сәйҙәр эсеп, Басира инәйҙең күңелен күреп ҡайта улар. Шунда бала саҡ, һуғыш йылдарындағы хәтирәләр йомғағы ла һүтелеп китә. "Һөйләргә генә ҡалһын инде ул йылдағы михнәттәрҙе", - тиешеп, ҡорҙо тамамлап ҡуялар шунан. "Донъялар тыныс булһын!" - ошо инде һуғыш балаларының телдән төшмәй торған иң изге теләге, доғаһы.

**Мәрйәм ЗӘКИРЙӘНОВА.**
**Күгәрсен районы.**



## 21 ИЮНЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Жить здорово! [16+]
10.55, 3.50 Модный приговор. [6+]
12.10, 23.25, 1.55, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.10 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.45 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Призрак". [16+]
22.25 Познер. [16+]
23.45 Чемпионат Европы по футболу-2020. Сборная России - сборная Дании. Прямой эфир из Дании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. Яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Любовь всегда в моем сердце-2". [12+]**
**11.00 Итоги недели (на рус. Яз.).**
**11.45 Специальный репортаж. [12+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. Яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 "Дорога к храму". [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Әлләсе... [6+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**17.30 Ради добра. [12+]**
**17.45 История одного села. [12+]**
**18.00 "Пофутболим?" [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**21.00 Д/ф "Спортивная история". [12+]**
**22.00 Нурбостан сәйәхәте. [6+]**
**23.00 Күстәнәс. [12+]**
**23.30 Топ 5 клипов. [12+]**
**0.00 Х/ф "Итальянские фантазии". [12+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Суд матери". [12+]**
**4.45 Д/ф "Конная гвардия: умирает, но не сдается..." [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 22 ИЮНЯ
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Жить здорово! [16+]
10.55 Модный приговор. [6+]
12.10, 14.30, 2.45, 3.05 Время покажет. [16+]
14.00 Москва. Возложение цветов к Могиле Неизвестного Солдата у Кремлевской стены в день 80-летия начала Великой Отечественной войны.
15.10 Давай поженимся! [16+]
16.05, 17.15 Мужское / Женское. [16+]
17.00 Новости (с субтитрами).
18.10 Сегодня вечером. [16+]
20.00 Вечерние новости (с субтитрами).
21.00 80 лет со дня начала Великой Отечественной войны. Концерт-реквием. Прямая трансляция.
23.00 Время.
23.45 Чемпионат Европы по футболу-2020. Сборная Чехии - сборная Англии. Прямой эфир из Англии.
1.55 "Вечерний Ургант" в Санкт-Петербурге. [16+]

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. Яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00 Д/ф "Один из тринадцати". [12+]**
**10.45 "100 шагов на войне..." Отрывки из военной прозы башкирских писателей. [12+]**
**11.15 Республика live #дома. [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. Яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.15 Светлой Памяти павших в борьбе против фашизма. Минута молчания.**
**14.30 Концерт "На всех одна память". [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Истории в табличках. [6+]**
**15.45 Брифинг Министерства здравоохранения РБ по коронавирусу.**
**16.15 "Гора новостей".**
**16.30 Х/ф "Медаль". [12+]**
**17.15, 20.00, 4.45 Мы дети войны. [12+]**
**17.30 "Времечко".**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 Генеральная уборка. [12+]**
**21.00 100 имен Башкортостана. [12+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 "Башҡорт йыры" представляет... [12+]**
**1.00 Х/ф "Останемся друзьями". [16+]**
**3.00 Спектакль "Между небом и землей". [12+]**
**4.30 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**5.00 "Бай". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 23 ИЮНЯ
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Жить здорово! [16+]
10.55 Модный приговор. [6+]
12.25, 1.20, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.10, 3.40 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.45 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Призрак". [16+]
23.35 "Вечерний Ургант" в Санкт-Петербурге. [16+]
0.25 Д/ф Премьера. "Звезды кино. Они сражались за Родину". [12+]

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. Яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00 Т/с "Любовь всегда в моем сердце-2". [12+]**
**11.15 100 имен Башкортостана. [12+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. Яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 "Аль-Фатиха". [0+]**
**15.00, 17.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 "Апчхи". [0+]**
**15.30 "Сулпылар". [0+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**16.30 Д/ф "Спортивная история". [12+]**
**17.00 Дорожный патруль. [16+]**
**17.30 Министерство правды.**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 "Честно говоря". [12+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 "Байыҡ-2021". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**0.00 Х/ф "Жених на двоих". [12+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Три аршина земли". [12+]**
**4.45 Әлләсе... [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 24 ИЮНЯ
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Жить здорово! [16+]
10.55, 2.45, 3.05 Модный приговор. [6+]
12.10, 0.25 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.10, 3.40 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.45 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Призрак". [16+]
22.40 "Вечерний Ургант" в Санкт-Петербурге. [16+]
23.30 Д/ф "Я Вас любил..." К 80-летию Валерия Золотухина. [12+]

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. Яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Любовь всегда в моем сердце-2". [12+]**
**11.15 "Честно говоря". [12+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. Яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30, 22.00 Республика live #дома. [12+]**
**15.00, 17.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Бирешмә. Профи. [12+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**17.30 "Времечко".**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**18.15 Инцидент-репортаж. [12+]**
**19.00 Брифинг по туризму и отдыху в Башкортостане.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 Вечерний телецентр.**
**23.00 "Ете егет". [12+]**
**23.45 История одного села. [12+]**
**0.00 Х/ф "Северное сияние". [16+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Вот так случилось..". [12+]**
**5.15 Преград. Net. [6+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 25 ИЮНЯ
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00 Новости.
9.50 Жить здорово! [16+]
10.55, 2.10 Модный приговор. [6+]
12.10 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15, 3.05 Давай поженимся! [16+]
16.10, 3.50 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.45 Поле чудес. [16+]
21.00 Время.
21.30 Премьера. "Dance Революция". [12+]
23.15 "Вечерний Ургант" в Санкт-Петербурге. [16+]
0.05 Премьера. Группа "Кино"-2021. [12+]
1.25 Д/ф "Цой - "Кино". [16+]
5.10 Д/с "Россия от края до края". [12+]

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. Яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Д/с "Битва оружейников". [12+]**
**11.15, 21.00 "Йома". [0+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Республика live #дома. [12+]**
**12.30, 23.30 Автограф. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. Яз.).**
**13.30 Үткән ғүмер. [12+]**
**14.00 "Красная кнопка". [16+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15, 4.45 "Алтын тирмә". [0+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**18.00 Дорожный патруль. [16+]**
**19.00 "Башҡорт йыры-2021". [12+]**
**19.45 История одного села. [12+]**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**22.00 "ВасСәләм!" [12+]**
**23.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**0.00 Х/ф "Маменькин сынок". [16+]**
**2.15 Спектакль "Ҡаһым түрә". [12+]**
**3.45 Башҡорттар. [12+]**
**5.30 "Млечный путь". [12+]**

## 26 ИЮНЯ
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.45 Слово пастыря. [0+]
10.00 Новости.
10.15 Д/ф Премьера. "Тамара Москвина. На вес золота". К 80-летию легенды фигурного катания. [12+]
11.15, 12.15 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
14.00 Д/с "Остров Крым". [6+]
16.30 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым. [12+]
18.00 Сегодня вечером. [16+]
21.00 Время.
21.20 "Клуб Веселых и Находчивых". Высшая лига. [16+]
23.30 "Вечерний Ургант" в Санкт-Петербурге. [16+]
0.20 Х/ф "Спасти или погибнуть". [16+]
2.25 Д/ф "Дети Третьего рейха". [16+]
3.15 Модный приговор. [6+]
4.05 Давай поженимся! [16+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00, 18.30 Новости (на баш. Яз.).**
**8.15 "Аль-Фатиха". [12+]**
**8.45 "Ҡурай даны". [12+]**
**9.00 Күстәнәс. [12+]**
**9.30 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**10.00 "Физра". [6+]**
**10.15 "Выше всех!" [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "Книга сказок". [0+]**
**11.00 "Сыйырсыҡ". [0+]**
**11.15 Бишек. Колыбельные моего народа. [0+]**
**11.30 "На пути к истине". [12+]**
**12.00 Үткән ғүмер. [12+]**
**12.30 Колесо времени. [12+]**
**13.30 Башҡорттар. [6+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 Юбилейный концерт народного артиста РБ Азата Аиткулова. [12+]**
**19.00 Полезные новости. [12+]**
**19.15 Ради добра. [12+]**
**19.30 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.30 "Байыҡ-2021". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. Яз.).**
**22.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**22.30, 2.00 Новости недели (на баш. яз.).**
**23.15 "Башҡорт йыры-2021". [12+]**
**0.00 Х/ф "Это чертово сердце". [16+]**
**2.45 Спектакль "Половецкая мистерия". [12+]**
**4.30 Детей много не бывает. [12+]**
**5.00 "Бай". [12+]**
**5.30 "Млечный путь". [12+]**

## 27 ИЮНЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.10, 6.10 Х/ф "Свадьба в Малиновке". [0+]
6.00, 10.00 Новости.
6.55 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.40 Часовой. [12+]
8.10 Здоровье. [16+]
9.20 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.15 Жизнь других. [12+]
11.15, 12.15 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
13.55 Д/ф "Маргарита Назарова. Женщина в клетке". 60 лет знаменитой комедии "Полосатый рейс". [12+]
14.55 Х/ф "Полосатый рейс". [12+]
16.35 Левчик и Вовчик. [16+]
19.20 "Три аккорда". Новый сезон. [16+]
21.00 Время.
22.00 "Что? Где? Когда?" Летняя серия игр. [16+]
23.10 Х/ф "Углерод". [18+]
1.00 Д/ф "Дети Третьего рейха". [16+]
1.50 Модный приговор. [6+]
2.40 Давай поженимся! [16+]
3.20 Мужское / Женское. [16+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. Яз.).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 "Бай". [12+]**
**9.15 "Ҡурай даны". [12+]**
**9.30 Тормош. [12+]**
**10.00 "Бейе". [0+]**
**10.15 "АйТекә!" [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "Сулпылар". [0+]**
**11.15 Нурбостан сәйәхәте. [6+]**
**11.30 "Ҡош юлы. Балалар". [6+]**
**11.45 Бирешмә. Профи. [12+]**
**12.30 Итоги недели (на баш. Яз.).**
**13.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**15.15 Посмотрим... [6+]**
**16.00 "Дорога к храму". [0+]**
**16.30, 4.45 Историческая среда. [12+]**
**17.00 Концерт Зайнетдина. [12+]**
**18.30 Лидеры региона. [12+]**
**19.00 Вестник "Газпромтрансгаз Уфа". [12+]**
**19.15 "Байыҡ-2021". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**20.15 Әлләсе... [12+]**
**21.00, 22.30 Республика live #дома. [12+]**
**21.30, 6.00 Итоги недели (на рус. Яз.).**
**22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**23.00 "Красная кнопка". [16+]**
**0.00 "ВасСәләм!" [12+]**
**0.30 Х/ф "Зип и Зап. Клуб стеклянных шариков". [6+]**
**2.15 Спектакль "Эти свободные бабочки". [12+]**
**5.15 "Млечный путь". [12+]**

## *СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*



## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**23 июнь "Йәш ғаилә фатир эҙләй"** (М. Рощин), мөхәббәт story. 16+
**24 июнь "Ҡара йөҙҙәр"** (М. Ғафури). 16+
**25 июнь "Ҡыҙ урлау"** (М. Кәрим), комедия. 12+
**26 июнь "Толстой о людях, люди о Толстом"**, пьесаны ролдәргә бүлеп уҡыу. 18.00

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**21 июнь "Аладдин"** (И. Казакова), мажаралы әкиәт. 11.00 6+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**26 июнь "Большой секрет"** (А. Рахманкулова). 12.00, 14.00 0+
**27 июнь "Три поросенка"** (С. Михалков). 12.00, 14.00 0+

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1442 һижри йыл.*

| Июнь (Зөлҡағиҙә) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Акшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 21 (10) дүшәмбе | 3:11 | 4:41 | 13:30 | 20:25 | 21:55 | 23:25 |
| 22 (11) шишәмбе | 3:11 | 4:41 | 13:30 | 20:25 | 21:55 | 23:25 |
| 23 (12) шаршамбы | 3:11 | 4:41 | 13:30 | 20:25 | 21:55 | 23:25 |
| 24 (13) кесе йома | 3:12 | 4:42 | 13:30 | 20:25 | 21:55 | 23:25 |
| 25 (14) йома | 3:12 | 4:42 | 13:30 | 20:25 | 21:55 | 23:25 |
| 26 (15) шәмбе | 3:12 | 4:42 | 13:30 | 20:25 | 21:55 | 23:25 |
| 27 (16) йәкшәмбе | 3:13 | 4:43 | 13:30 | 20:25 | 21:55 | 23:25 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

✓ *Урыҫ ауылдарында сөйәл үләне бешкән һыуҙа ҡылауырлы балаларҙы йыуындыралар, шулай уҡ тире туберкулезы, ҡорсаңғыны дауалайҙар, сөйәл һәм һипкелдәрҙе бөтөрәләр.*



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# 20 ИЮНЬ - ХАЛЫҠ-АРА АТАЙ КӨНӨ




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**24-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Бабич. Ҡатыҡ. Аршын. Илһам. Кәрим. Ишәй. Си. Мәмерйә. Тукай. Кимоно. Раиса. Ата. Юлаев. Таяҡ. Аҡыҡ. Һыйыр. Ван. Вары. Ашуғ. Ленин. Аҡмулла. Аксиома.

**Вертикаль буйынса:** Матросов. Исмәғилев. Рамаҙан. Ҡама. Анкара. Миәкә. Бутҡа. Арҡау. Ғафури. Шайморатов. Айгөл. Сабан. Аша. Кит. Юҡһыл. Урал. Алле. Май. Варан.

ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ

# СӨЙӘЛ ҮЛӘНЕ



**Сөйәл үләненең (чистотел) бер бик ҡыҙыҡлы үҙенсәлеге бар. Ул шунда уҡ ауырыуҙың сығанағын таба. Әгәр ҙә үләндең һутын йәки онтағын биологик актив нөктәгә урынлаштырһаң, ул үҙгәреп, сир сығанағына күсә.**

Беҙҙә йыш ҡына сөйәл үләнен "урыҫ женьшене" тип тә йөрөтәләр. Уны һут, төнәтмә, сәй, экстракт рәүешендә лә ҡулланып була. Халыҡ сөйәл үләненең шифаһы тураһында борондан белә.

Күҙ ауырыуҙарын дауалау өсөн сөйәл үләне һутын бал менән 1:1 нисбәтендә ҡушып, талғын утта күбеге бөтөп, үҙе лә бал кеүек булғансы талғын утта ҡайнатырға кәрәк. Был шыйыҡсаны бысый күҙ (трахома) һәм күҙгә төшкән аҡтан арыныу өсөн күҙҙәргә һөртөргә кәрәк.

Кәзә майына сөйәл үләне ҡушылған мазь ярҙамында ғәрәптәр тышҡы яраларҙы дауалай. Сөйәл үләне онтағы, ланолин һәм вазелиндан торған мазь "Плантазан Б" тип атала. Ул тире туберкулезының башланғыс төрөн, псориаз, тире яман шеше, ҡыҙыл сөсө (красная волчанка) ауырыуҙарын, сөйәлде дауалай. Майҙағы сөйәл үләне, ланолин һәм вазелин 10-ар грамм, 0,25 процент - 10 тамсы карбол кислотаһы. Урыҫ ауылдарында сөйәл үләне бешкән һыуҙа ҡылауырлы балаларҙы йыуындыралар, шулай уҡ тире туберкулезы, ҡорсаңғыны дауалайҙар, сөйәл һәм һипкелдәрҙе бөтөрәләр.

Сөйәл үләне шештәргә ҡаршы яҡшы сара, ул инфаркт һәм инсульттан һуң ҡалған яраларҙы яҡшы уңалта. Был осраҡта 1 ҡалаҡ сөйәл үләненә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 15 минут термоста тоторға. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан алда 2-шәр ҡалаҡ эсергә.

Сөйәл үләне төнәтмәһе кесерткән һәм календула менән бергә шеш күҙәнәктәренең таралыуын тотҡарлай. Үләндәрҙе үлсәп, бер тигеҙ миҡдарҙа алырға һәм ваҡлап, бергә ҡушырға. Әҙерләмәнең 1 ҡалағына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, термоста төнәтергә. Иртәнсәк ас ҡарынға яртыһын эсергә, ҡалған ярты стаканды киске аштан алда эсеп бөтөрөргә.

Сөйәл үләненең һутын һығып, сөйәл, кандилома, полип, парадонтоз урындарын яндыралар. Бауыр һәм үт ҡыуығы ауырыуҙары булғанда ла ҡулланалар, күҙгә аҡ төшкәндә, күҙ бысыйланғанда тамыҙалар, һыҙлаған тешкә һалалар. Йыуан эсәк полипы булғанда 50-60 грамм һыуға 5-7 тамсы сөйәл үләне һутын тамыҙып, төнгөлөккә клизма ҡуялар.

Сөйәл һутын ҡышҡыға ла әҙерләп ҡуйырға була. Бының өсөн 12-15 сантиметрлыҡ һабаҡтарын иләп кенә ҡырҡып алып, ит турағыс аша үткәрергә һәм һутын һығып алырға кәрәк. 1 литр һутҡа 500 грамм араҡы йәки 250 грамм спирт ҡушырға. Ашҡаҙан ауырыуҙары менән яфаланғанда һутты түбәндәге кәңәш буйынса эсергә кәрәк: беренсе көндә 3 тапҡыр ашарҙан алда 1-әр балғалаҡ, икенсе унан һуңғы көндәрҙә 3 тапҡыр ашарҙан алда 1-әр ҡалаҡ эсергә. Сөйәл үләненең ағыулы икәнен дә онотмағыҙ һәм бик һаҡ ҡулланығыҙ.

## ҠОТЛАЙБЫҘ!

Июнь айында тыуған көндәрен билдәләүсе - **Өфө районы** Шамонин ауылынан Роза Абдуллина, Фәриҙә Мөрсәлимова, Рәғиҙә Түләбаева, Зәйтүнә Абдуллина, **Ишембай районы** Аҙнай ауылынан Рәсүл Хәсәнов, Фирҙәүес Кинйәбулатова, Әлфиә Насирова, **Ғафури районы** Мәндем ауылынан Гөлнара Аҡулова, **Баймаҡ районы** Ишбирҙе ауылынан Фәннүр Солтанғолова, **Сибай ҡалаһынан** Рәмзиә Ғәйнуллина, Луиза Дәүләтбирҙина, Мәмдүҙә Илбәкова, Әкрәм Ҡарамурзин, Дмитрий Бардеев, Мөнирә Әлибаева, Резеда Бикбова, Самат Мираҫбаев, Азамат Тажетдинов, Гүзәл Фролова, Фаил Йортбәков, **Стәрлетамаҡ ҡалаһынан** Рәмилә Заһиҙуллина, Фәнүзә Юнысова, **Көйөргәҙе районы** Кинйәбай ауылынан 80 йәшлек юбилейын билдәләүсе Мәймүнә Сәғитованы һәм башҡа уҡыусыларыбыҙҙы ихлас күңелдән ҡотлайбыҙ! Шулай уҡ ошо айҙа күркәм ғүмер байрамын билдәләүсе әүҙем авторыбыҙ **Абдрахманова Лена Барый ҡыҙын** тәбрикләйбеҙ! Барығыҙға тән һәм йән сәләмәтлеге, бай, бәхетле оҙон ғүмер, яҡындарығыҙ менән бер-берегеҙгә терәк-таяныс булып, ҡыуаныстар менән йәшәүегеҙҙе, эшегеҙҙә ижади уңыштар теләйбеҙ.

**Иң изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр.**

РӘХМӘТ ҺҮҘЕ

# ЗЫЯЛЫ ЗАТ ИҪТӘЛЕГЕНӘ



**Ошо йылдың 11 июнь көнө күренекле ғалим, тарих фәндәре докторы, БДУ профессоры, Салауат Юлаев һәм Халыҡтар дуҫлығы ордендары кавалеры, Башҡортостан Республикаһының фән һәм техника өлкәһендәге дәүләт премияһы лауреаты, тормош юлдашым Әнүәр Закир улы Әсфәндиәров йәшәгән йортта таҡтаташ асыу тантанаһы үтте.**

Минең мөрәжәғәтемде иғтибарға алып, оло ғалим исемен мәңгеләштереү буйынса ошо сараны тормошҡа ашырыуға булышлыҡ итеүсе Башҡортостан Башлығы Радий Хәбировҡа, Хөкүмәт Премьер-министры Андрей Назаровҡа, премьер-министр урынбаҫары Азат Бадрановҡа, Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Сергей Грековҡа, Киров район хакимиәте башлығы Илвир Нурдәүләтовҡа, уның урынбаҫары Рәфҡәт Үмәрғәлинға һәм БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе урынбаҫары Эльвира Айытҡоловаға, шулай уҡ ошо тантанала Әнүәр Закир улы хаҡында йылы иҫтәлектәре менән уртаҡлашҡан уның хеҙмәттәштәренә, дуҫтарына, уҡыусыларына уның рухын хөрмәтләп йыйылған барса халыҡҡа ихлас күңелемдән оло рәхмәттәремде белдерәм!

**Клара ӘСФӘНДИЙӘРОВА.**

БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ!

# БАШҠОРТ ОРНАМЕНТЫ

**Археологик һәм этнографик тикшеренеүҙәр башҡорттарҙың биҙәү сәнғәтендә орнамент иң тотороҡло элемент булыуын күрһәтә. Биҙәктәрҙең күбеһе меңәр йылдар элек барлыҡҡа килгән.**

Орнамент - геометрик, үҫемлек йәки зооморф элементтарҙан торған биҙәк. Үҫемлек биҙәктәр ҡайыу, күнгә баҫып биҙәкләү, граверлау, һырлауға хас. Ишелмә һымаҡ биҙәктәр - ҡорама, селтәрләп сигеүгә. Ҡыя шаҡмаҡ һәм икс рәүешле геометрик орнамент күтәреп һуғыу һәм контурһыҙ шыма ҡайыуға хас булған. Башҡорт орнаменты симметрик, һүрәте сағыштырмаса һирәк урынлаштырыла. Әйберҙең тәғәйенләнеше, формаһы һәм ҙурлығына ҡарап, биҙәк өлөштәре ҡайма рәүешендә, өйкөм-өйкөм итеп, йәки тоташ селтәрҙе хасил итеп урынлаштырыла, ҡайһы берҙә бөтә был алымдар бергә ҡулланыла. Төҫтәр гаммаһында ҡыҙыл, һары һәм йәшел өҫтөнлөк иткән. Төҫтәр ҡапма-ҡаршыһы менән сиратлашҡан.

БР Милли музейында һаҡланған әйберҙәрҙәге башҡорт орнаментын сағылдырған карточкалар йыйынтығын иғтибарығыҙға тәҡдим итәбеҙ. Уны төҙөүселәр - Р.А. Хафизова, мөхррире К.Р. Игбаев, яуаплы мөхәррире РФ һәм БР атҡаҙанған фән эшмәкәре, тарих фәндәре докторы, профессор, Р.З. Янғужин.



Намаҙлыҡтар биҙәлешендә тотороҡлоҡ һаҡланғанған: уртала нәҙек кенә биҙәк һыҙаты дуғаланып китә, уның тирәһендә абстракт фигуралар йәки сәскәләр өйкөмө урынлаша.



Оя биҙәк. Иҫәпләп нағышлау.



Ҡатын-ҡыҙҙарҙың тула ҡунысл байрам ҡатаһына һалынған ҡусҡар биҙәктәр үрнәге.



Ҡаймалап биҙәк һалынған ҡашаға ҡормаһы. Сүпләп һуғыу.



Күнгә баҫылған биҙәккә талғын кәкре һыҙыҡлы үҫемлек формалары хас. Һаҙаҡтың бер өлөшө.



Һигеҙ сатлы йондоҙ һынландырылған баҙыян биҙәк. Таҫтар башы. Иҫәпләп нағышлау.

Үҫемлек биҙәкле янсыҡ. Элмә сигеү.



Шаршау орнаментында ваҡ ҡоштабаҡ биҙәктәр. Сүпләп һуғыу.





Һөлгә башына сигелгән сәскә мотивтары. Элмә сигеү.



Таҫтамал орнаментында мөһөр (соляр) биҙәктәр.



Һуғылған һәм сигелгән биҙәктәрҙә бормас фигуралар.



Свастика ҡояштың, изгелектең иң боронғо символдарының береһе. Башҡорт орнаментында свастика геометрик йәки кәкерсәкле һыҙатланыш алған.

СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ

# САЛАУАТТЫҢ ТЫУҒАН КӨНӨНДӘ...





**16 июнь - Салауат Юлаевтың тыуған көнө. Был көндә Эстонияла башҡорт әүҙемселәре Рәсәй илселегенең рәсми вәкиле менән бергә башҡорт халҡының милли геройы Салауат Юлаев иҫтәлегенә сара ойошторҙо.**

Эстонияның Таллин ҡалаһындағы "Ағиҙел" башҡорт мәҙәни ойошмаһы 20 йылдан ашыу атаһы Юлай Аҙналин менән бергә Рогервик ҡәлғәһенә - хәҙерге Палдиски ҡалаһына ғүмерлеккә һөргөнгә ебәрелгән (1775-1800) башҡорт халҡының милли батыры Салауат Юлаев тураһында хәтерҙе ҡәҙерләп һаҡлай. Улар йыл һайын Палдиски ҡалаһына барып, Салауат Юлаев һәйкәленә сәскәләр һала, доға ҡыла. Быйыл эстон башҡорттарына Рәсәй Федерацияһының Эстон республикаһындағы илселегендә яңы эш башлаған яҡташыбыҙ Салауат Мөхәмәтов ҡушылды. Сарала сыуаш һәм мари мәҙәни ойошмаһы вәкилдәре Людмила Ямурзина һәм Надежда Григоренко ла ҡатнашты. Улар ҙа Башҡортостанда тыуып үҫкән һәм әлеге көндә Эстонияла йәшәй.

- Башҡорт диаспораһы әүҙемселәре иртән ете машинала Эстонияның баш ҡалаһы Таллиндан 45 саҡрым алыҫлыҡта урынлашҡан Палдиски ҡалаһына юлланды. Кисен, төндә һәм иртән ямғыр яуҙы, һауа торошо боҙолғас, кәйефебеҙ ҡырылды. Ләкин Палдискиға килеп еткәс, ямғыр ҡапыл туҡтаны, ҡояш сыҡты. Илдар хәҙрәт Мөхәмәтшин беҙгә генә түгел, Хоҙайға ла был сараның кәрәк булыуын әйтте. Беҙгә Палдиски ҡалаһы бик ҡәҙерле: унда Салауат рухы йәшәй, үҙебеҙҙе тыуған илебеҙгә ҡайтҡан кеүек тоябыҙ", - тип хәбәр итте "Ағиҙел" башҡорт мәҙәни ойошмаһы етәксеһе Флүзә Хәйруллина.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ҮРМӘКСЕ АУЫНА...

## арыҫлан эләкмәҫ

Тыныс йәшәргә теләһәң, телеңде тый, оҙаҡ йәшәргә теләһәң, ауыҙыңды тый.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Өлгөргән еләкте ҡунаҡҡа ике төрлө биреп була: бысраҡ ҡулдарҙа йә ялтырап торған тәрилкәлә - уларҙың тәме төрлөсә буласаҡ.

**(Леонид Сухоруков).**

Ахмаҡҡа уның ахмаҡ икәнен хатта аҡыллы ла иҫбат итә алмаясаҡ.

**(Л. Гаврилов).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Аллаһы Тәғәлә кешене яралта һәм унан: "Һиңә күпме ғүмер бирергә?" - тип һорай.**

**- Барыһы ла һинең ихтыярыңда, Раббым, - тип яуаплай кеше.**

**- Ярай, улайһа, - ти Хоҙай Тәғәлә, - егерме йыл йәшәрһең...**

**- Ниңә улай аҙ ғүмер бирәһең, Раббым?- тип кеше илап ебәрә.**

**Шул саҡ улар эргәһенә ишәк килә. Хоҙай Тәғәлә уға ҡарап:**

**- Ә һиңә мин ҡырҡ йыл ғүмер бирәм. Егерме йыл эшлә һәм кешегә ярҙам ит, ә егерме йыл ял итерһең, - ти.**

**- Ул тиклем оҙаҡ йәшәү ауыр булыр, ғүмеремде ҡыҫҡарта бир, Хоҙай, - тип үтенә башлай ишәк.**

**- Ҡыҫҡартылған йылдарҙы минең ғүмеремә өҫтә... - ти кеше.**

**Шулай итеп, Хоҙай Тәғәлә ишәктең ҡыҫҡартылған ғүмер йылдарын кешенең ғүмеренә өҫтәй. Бына бер мәл улар эргәһенә эт килә.**

**- Ә һин ҡырҡ йыл йәшә, - ти уға Хоҙай Тәғәлә. - Егерме йылын кешегә хеҙмәт итерһең, егерме йылында ял итерһең.**

**- Юҡ, миңә ул тиклем ғүмер кәрәкмәй, ҡыҫҡарта күр уны, - тип үтенә башлай эт.**

**- Уныҡын да минең ғүмергә өҫтә, Раббым, - ти кеше. Хоҙай уның үтенесен үтәй. Бына улар эргәһенә маймыл килеп етә.**

**- Ҡырҡ йыл йәшә, - ти уға Хоҙай Тәғәлә. Маймыл да илап ебәрә:**

**- Ғүмеремде улай оҙон итмә, Раббым, ҡыҫҡарт, зинһар, - ти ул да. Хоҙай уның ғүмеренең дә яртыһын кешегә бирә.**

**Шулай итеп, кеше үҙенең егерме йылын бик матур йәшәп үткәрә. Шатлана, көлә, бер хәсрәте лә юҡ. Шунан ул өйләнә һәм ишәк ғүмеренә аяҡ баҫа. Тормоштоң бар ауырлығын үҙ елкәһендә йөкмәп бара башлай. Шунан эт ғүмерен һүтә башлай. Кешенең балалары үҫеп етә, өйҙә булған бар әйберҙе ситкә ташый башлайҙар. Кеше ризаһыҙлыҡ белдерә, балалары менән туҡтауһыҙ бәхәсләшә, талаша. Бына маймыл ғүмере менән йәшәр мәл дә етә. Кеше ҡартая. Был ваҡытҡа инде уның йорто ла ауып төшөргә тора. Ул балаларынан балаларына ҡунаҡҡа йөрөй, ейән-ейәнсәрҙәрен ҡараша, улар алдында төрлө сүрәткә инеп, маймылланырға ла тура килә уға. Бына шулай үтә кешенең бар ғүмере..."**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

1 582218 911006 21025

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Сәрүәр СУРИНА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**

«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99, 246-03-24
**Матбуғат таратыу** 246-03-23

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
18 июнь 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3400
Заказ - 387/06